ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15 йыл

23-29 декабрь (аҡъюлай) 2017

№51 (781)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Сит ерҙәргә барып...**



үҙебеҙҙе лайыҡлы күрһәтәбеҙ 5-6

**Ижад итеү һәләтлеген...**



балаларҙа ла, ололарҙа ла үҫтереү кәрәк 8-9

**Ылау-ылау булып...**



бейеүселәр килде "Байыҡ"ҡа 11

**Америка астронавы Армстронгтың...**

Айҙа аҙан ишеткәне



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!***
***2018 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу 28 декабрҙә тамамлана. Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 554 һум 82 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 584 һум 82 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары өсөн - 499 һум 08 тингә яҙыла алаһығыҙ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов быйылғы Мөрәжәғәтнамәлә йәштәр мәсьәләһен үҙәккә ҡуйып, беҙҙең өсөн уларҙың һәр береһе ҡиммәт, тигән фекер әйтте. Башҡортостан йәштәренең бер вәкиле булараҡ, һеҙ ошондай иғтибарҙы тояһығыҙмы, йәштәрҙең ҡиммәтен баһалайҙармы беҙҙә?*

***Даян СОЛТАНҒУЖИН, Хәйбулла районы Аҡъяр район дауаханаһы табип-онкологы, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ҡарамағындағы Йәштәр йәмәғәт палатаһы комиссияһының рәйес урынбаҫары:*** Ысынлап та, Мөрәжәғәтнамәлә йәштәр сәйәсәте һәм мәғариф мәсьәләләре айырым иғтибар үҙәгенә ҡуйылып, ошо өлкәләге бурыстарҙы хәл итеү буйынса төп йүнәлештәр билдәләнде. Мәсьәләнең мөһимлеге хаҡында ҡабатлап тормайым, беҙгә фәҡәт ең һыҙғанып ошо юҫыҡта аныҡ эштәргә тотонорға ғына кәрәк. Сөнки илебеҙ яҙмышы белемле, талантлы, алдынғы фекерле йәш белгестәргә бәйле - был һәр кемгә лә аңлашылалыр. Бөгөн глобалләшеү һәм конкуренция шарттарында донъя кимәленән артта ҡалмаҫ өсөн Рәсәйгә, шул иҫәптән республикабыҙға ла, бөтөн йүнәлештәрҙә лә заман талаптарына яуап бирерлек юғары квалификациялы белгестәр талап ителә. Әйткәндәй, улар ҡалаларҙа ғына түгел, ауыл шарттарында ла ең һыҙғанып эшләргә әҙер булырға тейештәр. Үкенескә, ҡайһы бер йәш кешеләрҙән, шулай уҡ уларҙың ата-әсәләренән эш юҡлыҡҡа зарланыуҙарҙы йыш ишетергә тура килә, ләкин мәсьәләнең шул яғы ла бар: яҡшы, кәрәкле белгестәр ауырлыҡһыҙ эш таба ала. Үҙенден кәрәклегендә тойоу, минеңсә, һәр кемдең үҙ ҡулында. Киләсәктә кәрәкле кеше булыр өсөн мәктәп йылдарынан уҡ тырышып белем алырға һәм бигерәк тә вузда уҡыған йылдарынды мөмкин тиклем һөҙөмтәле файҙаланып ҡалырға кәрәк. Көн үтһен, тип, нисек тә диплом алып сыҡһам, шул етте, тип йөрөй ҡайһы берәүҙәр. Уларҙың, тәбиғи, эшкә лә бик барымы булмай, әлбиттә. Шунан улар кемгә кәрәк булһын? Эш береүсене лә бит хәҙер диплом менән генә алдаштырып булмай. Улар ҙа белемле, креатив йәштәргә өҫтөнлөк бирә, конкурс нигеҙендә һайлап ҡына ала үҙҙәренә кадрҙарҙы. Икенсенән, вуз тамамлаған йәштәрҙең күбеһе ҡалала ҡалыу яғын ғына ҡарап тора. Ә бында, ысынлап та, эшкә урынлашыу проблема. Ауыл еренә ҡайтыуҙан ҡурҡырға ярамай. "Ауыл табибы" программаһына ярашлы, һуңғы биш йылда мендән ашыу йәш кеше ауыл еренә эшкә күсте", тип әйткәйне сығышында Рөстәм Зәки улы. Ана шул мендәрҙең береһе булараҡ, мин был ҡарарыма бер ҙә үкенмәйем. Хәйбулла район дауаханаһына эшкә килдем. Ярты йыл эшләгәс, торлаҡ бирҙеләр. Мәғлүм булыуынса, был программа буйынса эшкә килеүселәргә 1 млн һум күләмендә компенсация түләү ҙә ҡаралған. Районға, кешеләргә кәрәкле эштәмен, тип уйлайым, сөнки ошоға тиклем бында онколог тигән табип-белгес бер ваҡытта ла булмаған. Үҙ миҫалымдан сығып, йәштәштәремә әйтер һүҙем шул: үҙ ҡиммәтебеҙ, үҙ ҡәҙеребеҙҙең үҙебеҙҙең ҡулдарҙа икәнен онотмайыҡ. Тырышып уҡыу, тормошҡа позитив һәм әүҙем ҡараштa булыу, үҙең һайлаған һөнәреңдә камиллыҡҡа өлгәшергә тырышыу төп шарт, шул саҡта ғына үҙегеҙҙең кәрәкле булыуығыҙҙы тойорһоғоҙ. Ләкин шуныһы ла бар: был тойғо, әлбиттә, юҡ ерҙән барлыҡҡа килмәй. Юғары һәм урта махсус уҡыу йорттарын тамамлап сыҡҡас, йәш белгес алдында, ҡайҙа эшкә барырға, тигән һорау килеп тыуырға тейеш түгел. Уны ҡайҙалыр көтөп тороуҙары ла кәрәк бит. Мәҫәлән, йәш кадр үҙенең тыуған районында кәрәкмәҫ инеме ни? Элегерәк шундай эш алымы ҡулланыла башлағайны: районға эшкә ҡайтыу шарты менән урындағы йәштәр маҡсатлы йүнәлтмә менән уҡырға ебәрелә ине. Үкенескә, аҙаҡҡа табан был эште туғанлыҡ-әшнәлек кәсебенә әйләндереп, ахырҙа, юҡҡа сығарып ҡуйҙылар. Урындарҙағы власть органдары сығарылыш уҡыусылары, вуздар менән берлектә бәйләнеш булдырып, үҙ төбәге студенттарының уҡыуы, уңыштары менән даими ҡыҙыҡһынып, артабан уларҙы эш менән тәьмин итеү мәсьәләһен ҡараған осраҡта ла был йүнәлештә ниндәйҙер алға китеш күренер ине.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# КҮПЕР ЯБЫЛА, ЯҢЫҺЫ ТӨҘӨЛӘ

Воровский урамы киҫелешенән Ағиҙел йылғаһы аша күпер 1956 йылда һалына. 2004 йылда белгестәр уны тикшереп, авария алды хәлендә, тигән һығымтаға килә. Бөгөнгә тиклем ҡала хеҙмәттәре унда регламент буйынса ремонт эштәре башҡарып, күперҙең хеҙмәт ваҡытын оҙайта килде. Әлеге ваҡытта өҫтәмә тикшереү уҙғарыла, шул сәбәпле күперҙә транспорт сараларының тиҙлегенә сик билдәләнгән - унан 10 тоннаға тиклем машиналар ғына үтә ала һәм тиҙлек сәғәтенә 20 километрға тиклем кәметелә. Быйыл 29 ноябрҙән күперҙең һул һыҙатында хәрәкәт сикләнгән.

Тикшереүҙәрҙең яҡынса һығымтаһы буйынса күперҙе ҡулланыу ваҡытын тағы ла күп тигәндә 2-3 йылға оҙайтырға мөмкин. Артабан инде уны тулыһынса ябырға тура киләсәк. Өфө ҡала хакимиәтендә күперҙе реконструкциялау буйынса проект документацияһы әҙерләнгән. Шулай уҡ әлеге ваҡытта ҡала хакимиәтендә өсөнсө күпер төҙөү мәсьәләһе лә күтәрелә.



12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТЕЛЕ БАРҘЫҢ ҒЫНА...

## иле бар

***Өлфәт ЙОМАҒУЖИН, ЮНЕСКО эштәре буйынса Башҡортостан комитеты директоры:*** Бөгөнгө көндә донъя хәлдәре ябайҙан түгел, беҙ халыҡ-ара ойошма булараҡ, был процестарҙы аңлап торабыҙ. Глобалләшеүгә, халыҡ-ара мөнәсәбәттәр ҡатмарлашыуға, Рәсәйҙең донъя илдәре араһында урынын нығытыуға бәйле бик күп мәсьәләләр уйланд ыра, борсолдора. ЮНЕСКО халыҡ-ара ойошмаһының вәкиллеге булараҡ, беҙ мәғариф, фән һәм мәҙәниәт өлкәһендәге мәсьәләләргә айырыуса ҙур иғтибар бүләбеҙ. Бигерәк тә туған телдәрҙе һаҡлау, үҫтереү буйынса эшләргә тырышабыҙ. Сөнки бөтә донъя халыҡтары телдәре атласы төҙөгәндә аналитиктар башҡорт теленә ҡарата "ярҙамға һәм һаҡлауға мохтаж тел" тигән тәҡдим индерҙе. Халыҡтың рухи һәм матди мираҫын һаҡлауға, киләсәк быуынға еткереүгә булышлыҡ итергә тейешле ойошма булараҡ, был иҫкәрмәне күҙ уңынан ысҡындырмау мөһим. Шуға, йәш быуынды башҡорт телен өйрәнеүгә ылыҡтырыу, телдең ҡулланыу даирәһен үҫтереү, милли йолаларҙы һәм әҙәби, мәҙәни мираҫты һаҡлауға йүнәлтелгән төрлө кимәлдәге саралар ҙан тыш, китаптар сығарыу, сит илдәргә башҡорт халҡы тураһында мәғлүмәт еткереү йәһәтенән дә бик күп эштәр атҡарыла.

Бөгөн башҡорт теле генә түгел, Рәсәйҙәге башҡа аҙ һанлы халыҡтарҙың туған телдәрен өйрәнеүҙең кәрәкле, кәрәкле булмауы тураһында һүҙ күтәрелгәндә ни өсөн беҙ шулай тырышабыҙ һуң? Сөнки теле барҙың - иле бар. Туған телен белмәгән кеше далалағы ҡамғаҡ кеүек: уның тамыр йәйер ере лә, үҙ кешеһе итеп тойор мөхите лә, атап әйтерлек иле лә юҡ. Әлбиттә, бөгөн сит телдәрҙе белеү, сит илдәргә сәйәхәт итеү, аралашыу даирәһен киңәйтеү йәш кешегә мотлаҡ. Ләкин тиндәр араһында тиң булып йәшәр өсөн тәү сиратта туған телде белергә кәрәк. Йәштәр генә түгел, ололар ҙа ошо хәҡиҡәткә төшөнһөн ине.

Әйткәндәй, киләһе йыл ЮНЕСКО эштәре буйынса БР комитеты эшен башлауға егерме йыл тула. "Егет ҡорона ингән" ойошманың йәш быуынды тәрбиәләүсе кафедралары, мәктәптәре, дуҫтар клубтары эшенә йомғаҡ яһаласаҡ. Яңы йыл ошо ойошмалар өсөн генә түгел, милләтебеҙ өсөн дә һөҙөмтәле, ҡыуанэслы булһын, тип теләйем. Башҡорт телендә һөйләшкән, йәшәү тамырҙары башҡорт ерендә булған быуын тәрбиәләүгә һәр беребеҙ көсөнән килгәнсә ғаиләлә, эшендә үҙ өлөшөн индерергә бер ҡасан да онотмаһын!

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

***Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов быйылғы Мөрәжәғәтнамәлә йәштәр мәсьәләһен үҙәккә ҡуйып, беҙҙең өсөн уларҙың һәр береһе ҡиммәт, тигән фекер әйтте. Башҡортостан йәштәренең бер вәкиле булараҡ, һеҙ ошондай иғтибарҙы тояһығыҙмы, йәштәрҙең ҡиммәтен баһалайҙармы беҙҙә?***



(Башы 1-се биттә).

***Люцизә ЮЛЫЕВА, "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Йәш гвардия" төбәк штабы етәксеһе:*** Йәш быуынға һәр замандарҙа ла бер аҙ дыуамаллыҡ та, самаһыҙыраҡ ихтыяждар ҙа хас нәмә, тип уйлайым. Бер яҡтан, был йәштәргә тормошта үҙ-үҙҙәрен табырға булышлыҡ итеүсе кәрәкле сифаттыр ҙа әле ул, сөнки башҡалар баһаңды белһен өсөн тәүҙә үҙеңә үҙ баһаңды белеү кәрәктер. Ә кеше баһаһы эштә беленә. Тәбиғи, йәштәр белеменә ярашлы эш хәстәрләү менән бергә дөйөм кимәлен үҫтереү өсөн шарттар ҙа эҙләй. Әгәр ошо талаптарына яуап бирерҙәй варианттар таба алмаһа, йәш кеше уны ситтән эҙләйәсәк, башҡа төбәктәргә, хатта сит илдәргә юлланасаҡ. Шуға күрә лә Башҡортостан Башлығы Р. Хәмитов Ҡоролтайға Мөрәжәғәтендә Башҡортостаныбыҙҙы һәр йәһәттән ылыҡтырғыс төбәккә әйләндереү бурысын ҡуйҙы. Йәштәр менән эшләүсе ойошма етәксеһе булараҡ, мин быйылғы Мөрәжәғәтнамә тарафынан беҙҙең алға етди мәсьәләләр ҡуйылыуын бик яҡшы аңлайым. Мәғариф системаһы, һөнәри йүнәлеш һәм йәштәр ҡеүәтен һөҙөмтәле файҙаланыу кеүек мөһим бурыстар менән бер рәттән, ғаилә ҡиммәттәренә лә ҙур иғтибар бирелеүе һөйөндөрә, сөнки был мәсьәлә йәш кешенең тормош тотороҡлоғон тәьмин итеүсе нигеҙ булып тора. Йәш ғаиләләрҙең ныҡлығы уларҙың эш һәм торлаҡ менән тәьмин ителеүендә генә түгел, бәлки, Мөрәжәғәтнамәлә билдәләп кителеүенсә, сәләмәт тормош рәүешендә лә. Тәүге ике мәсьәлә буйынса беҙҙең ойошма мөмкинлеге йәштәргә кәңәш һәм йүнәлеш биреү менән генә сикләнһә, йәштәштәребеҙҙе сәләмәт тормош рәүешенә йәлеп итеү йәһәтенән байтаҡ файҙалы эштәр башҡара алабыҙ. Мәҫәлән, йәштәр араһында тәмәке һәм алкоголле эсемлектәрҙе ҡулланыуҙы кәметеү буйынса беҙ күптән көрәш алып барабыҙ. Һүҙ бында ағыулы спиртлы эсемлектәрҙе тыйыу тураһында ғына түгел, шул уҡ вәҡытта балиғ булмаған үҫмерҙәргә араҡы һатыу, шулай уҡ мәктәп һәм башҡа уҡыу-тәрбиә учреждениелары янында законһыҙ рәүештә спиртлы эсемлектәр, тәмәке һатыу кеүек күренештәрҙе лә ауырһыҙ мөнәсәбәттә булыуыбыҙ хаҡында бара. Быйылғы осор эсендә йәш гвардиясыларҙың урындарҙағы бүлексәләре республика халҡынан алкоголле эсемлектәр һатыу урындарына йөмәғәт тикшереүе үткәреүҙе һораған ике йөҙҙән ашыу мөрәжәғәт алды, шулар нигеҙендә 700-ҙән ашыу рейд-тикшереү үткәрелде. Эштән, уҡыуҙан һуң йәштәрҙе төрлө спорт секцияларына, бассейндарға йәлеп итәбеҙ. Бынан тыш, тағы ла республикабыҙҙа йәш лидерҙар үҫтереү буйынса эшләүсе проекттарҙы телгә алып китеү кәрәктер. Шуларҙың береһе - Сәйәси лидерлыҡ мәктәбе 2014 йылдан бирле алдан конкурс нигеҙендә һайлап алынған 110 йәш тыңлаусыға башланғыс белем биреп сығарҙы. Киләсәктә уларҙы республиканың ижтимағи-сәйәси аренаһында күрге килә. Ҡыҫҡаһы, Мөрәжәғәтнамәлә киләсәккә матур пландар тураһында һүҙ бара, тик улар ана шул матур һүҙ булып, ҡоро ҡағыҙҙа ғына тороп ҡалмаһын өсөн тырышырға ине бөтәбеҙгә бер төптән. Үҙемдең илемә, халҡыма кәрәклегемде мин шунда күрәм, мәҫәлән.

***Шамил МОТАЛОВ, инженер-геолог, Санкт-Петербург ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе:*** Йәштәрҙең тыуып-үҫкән төбәктәрен ташлап, ситкә китеп уҡырға, эшләргә мәжбүр булыуының сәбәптәре күп, әлбиттә. Шуларҙың күпселеге сифатлы белем алыу теләге менән китә. Ни генә тиһәң дә, Мәскәүҙә, Питерҙа, мәҫәлән, белем биреү кимәле лә юғарыраҡ, үҙ өлкәләрендә алдынғы ҡарашлы кешеләр, ғилем һәм талант эйәләре менән аралашыу мөмкинлектәре лә күберәк, дәрәжәлерәк. Һәм һин унда тап ошо юғарыраҡ, артығыраҡ, күберәк белем артынан барыуыңды аңлап юллана һың. Шуға күрә, ситкә китеүҙә артыҡ хилафлыҡ күрмәйем. Тик мәсьәләнең икенсе яғы ла бар. Иң мөһиме - төплө белем "артмаҡлап", тыуған төбәгеңә кире ҡайтыу һәм Башҡортостанға хеҙмәт итеү өсөн тыуған ереңдә стимул булыуы, йәғни ысынлап та тыуған ереңдә һинең ҡиммәтеңде баһалауҙары кәрәк. Ә инде ундай баһалау, стимул юҡ һәм һине бында көтөп тороусы ла юҡ икән - белем алған, өйрәнгән ереңдә тороп ҡалыу хәйерлерәктер. Әлбиттә, ситтә уҡыған күп йәштәр тыуған яҡта белеменә, кимәленә, ялланған ҡаҙаныштарына торошло лайыҡлы эш менән тәьмин итеүҙәрен теләй. Әммә беҙ әле Башҡортостанда ошондай белемле йәштәрҙе тейешенсә баһалауҙарын тоймайбыҙ. Ләкин бынан әллә ниндәй трагедия яһау кәрәкмәй. Белеме, аҡылы, ҙур маҡсаттары булған белгестәребеҙ ситтә лә Башҡортостаныбыҙ данын күтәрә, уны башҡаларға таныта һәм милләтебеҙ данын күтәрә бит.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республикала күп балалы ғаиләләргә социаль ярҙамды камиллаштырыу буйынса саралар тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, 2018 йылдың 1 ғинуарынан йән башына уртаса табыш балалар өсөн йәшәү минимумы дәүмәленән артмаған күп балалы ғаиләләр өсөн 2018 йылда өсөнсө йәки унан һуңғы тыуған һәр балаға өс йәше тулғансы ай һайын 8993 һум күләмендә аҡса түләнә.

✓Рәсәй Хөкүмәте Башҡортостанға 2017 йылда юҡҡа сыҡҡан уңыш өсөн 154,7 миллион һум бүлде. Бойороҡҡа ярашлы, быйыл юҡҡа сыҡҡан уңыш өсөн 18 төбәк компенсация сифатында 1,4 миллиард һум ала. Һүҙ 2017 йылдың йәйендә ауыл хужалығы етештереүселәренә "тәбиғи характерҙағы ғәҙәттән тыш хәл" килтергән зыян тураһында бара. Быйыл Башҡортостан юҡҡа сыҡҡан уңыш өсөн икенсе тапҡыр компенсация ала инде. Август айында уҙған йылғы уңыш өсөн шундай уҡ түләү килгәйне.

✓Башҡортостан Министрҙар кабинетының яңы йыл байрамдары булмай. Министрҙар 3 ғинуарҙа уҡ эшкә сыға. Республика Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов ҡул аҫтындағы кешеләргә ошондай бурыс ҡуйған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов яңы йыл байрамдарынан мөмкин тиклем иртә сығыу йолаһын башлап ебәрҙе. Төбәк етәксеһе хакимиәт һәм хөкүмәт хеҙмәткәрҙәре өсөн шөмбәне эш көнө тип иғлан итте.

✓Яңы йыл алдынан Башҡортостандың баш ҡалаһында "Сәй менән йылытабыҙ!" дегустация акцияһы башланды. "Башҡортостан продукты"ның махсуслаштырылған автокибете күмәк кеше булған ял итеү урындары буйлап йөрөй һәм өфөләрҙе ҡышҡы һыуыҡ көндәрҙә эҫе сәй менән һыйлай. Салауат Юлаев майҙанында ул өс көн дауамында көндөҙгө сәғәт 3-тән киске 7-гә тиклем тора. 25-26 декабрҙә көндөҙгө сәғәт 12-нән 4-кә тиклем барлыҡ теләүселәр Орджоникидзе исемендәге майҙанда шифалы сәй менән һыйлана һәм автокибет янында фото төшә ала.

✓Башҡортостан "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" федераль өҫтөнлөклө проектын бойомға ашырыу рейтингында ун лидер иҫәбенә инде. Республика һигеҙенсе баҫҡысты биләй, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетынан. XI "Рәсәй транспорты" халыҡ-ара форумы майҙансығында рейтинг менән танышырыу ойошторолдо.

***✓ Бер туғаным итте ауылға барып, үҙе һуйып алып ҡайта. Был эшкә улын да эйәртә. Улы ла был хаҡта: "Киләсәктә башҡорт балаһы мал һуйыуҙы ла белмәйәсәк бит, баҙарҙа ит бөтһә, ул нимә - астан үләме?" - тип ебәрә.***



*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# СУПЕРМАРКЕТТАР БЫУЫНЫ



**Тормош шундай уңайлы бөгөн. Ашайым тиһәң - аҙығы, кейәм тиһәң - кейеме бар, йөрөйөм тиһәң - дүрт ҡиблаға юл асыҡ. Әлеге шул аҡсаң ғына булһын. Һәм ана шул аҡсаны булдырыу өсөн тырыша ла инде һәр кем.**

Уйлап ҡараһаң, йәмғиәттә төрлө төркөмдәр көн итә. Уларҙың бер өлөшө (һәм ярайһы ҙур өлөшө) килемде мейе эшмәкәрлеге аша таба һәм шул сәбәпле көнкүрештең ҡайһы бер донъяуи мәсьәләренән бөтөнләй ситтә тора. Тик уларға ла ашарға, кейенергә кәрәк һәм улар был осраҡта ҡайҙа мөрәжәғәт итә инде? Дөрөҫ, супермаркеттарға, гипермаркеттарға, мегамаркеттарға, йәғни ҙур сауҙа үҙәктәренә. Мәҫәлән, һин иртәнге һигеҙҙән киске һигеҙгә тиклем эштә ултырған кеше икән, эш аҙағында мотлаҡ сауҙа үҙәгенә инәһең. Баҙарға бара алмайһың бит инде! Итте - ит баҙарынан, йәшелсәне - йәшелсә баҙарынан, химия кәрәк-яраҡтарын шуға тәғәйен магазиндарҙан ҡарап йөрөргә артыҡ көнөң бармы? Бына бөтөн ошо уңайһыҙлыҡтарҙан оло бер уңайлылыҡ яһаған да инде беҙгә супермаркеттар. Унда һиңә ит киҫәктәре кәрәгенә ҡарап самаларлыҡ ҡына итеп бүлгеләп, уңайлы ҡумталарға һалынған, тышына хаҡтары ла яҙып ҡуйылған. Билмән, кәтлит кеүек ярымфабрикаттарҙың йөҙ төрлөһө бар. Унан ҡала, йәшелсәнең ниндәйе генә юҡ: әллә ҡайҙағы Гавай утрауҙарының күҙ яуын алырҙай сағыу үҫемлектәренә тиклем өҙөп кенә тундырылған. Йыл әйләнәһенә еләге лә, ҡыяры ла, ҡарбузы ла бар. Ә инде һөт, икмәк, салат йәки бешкән аҙыҡтар хаҡында әйтеп тә тораһы түгел. Бешкән, ҡурылған, иҙелгән картуфҡа тиклем бар. Йәки борщ бешереү өсөн бер һауытҡа кәбеҫтәһе, кишере һәм башҡаһы турап әҙерләнгән. Йәки бешкән туҡмас, бишбармаҡ аштары порциялап банкаларға ултыртылған. Шунан ниңә балалар һинең оҙон көн бишбармаҡ йәйеп ҡырҡҡаныңа аптырамаһын инде. "Ниңә ыҙалайһың? Һатып алыу осһоҙораҡҡа төшә бит", - тип, улар һиңә он, йомортҡа хаҡын һәм шуға ял көнөңдөң яртыһын ҡушып һанап та күрһәтә. Уйлап ҡараһаң, ысынлап та осһоҙораҡҡа төшә. Күп нәмә шулай. Кәтлит эшләү ҙә, салат яһау ҙа, башҡаһы ла. Тик... Бына ошо "тик"тең эсендә тотош бер тереклек мәктәбе ята. Тик әлеге быуын уны аңларлыҡ хәлдә микән?

Мәҫәлән, башбармаҡты һатып та ала алам, әммә уны эшләү яйын белеүем, шул эшкә баларымды ла ҡатнаштырыуым - үҙе бер тәрбиәүи сара. Бындай ҡатын-ҡыҙ мәшәҡәте артында мотлаҡ ниндәйҙер йылы, яғымлы ғына һөйләшеүҙәр алып барыла. Сөнки күмәкләп аш-һыу әҙерләү барышының психологияһы үҙе үк идиллияға, берҙәмлеккә, теләктәшлеккә этәрә. Шулай уҡ бер миҫал: бер туғаным итте баҙарҙан һатып ала алыу йәки һуйып алып килеүгә заказ ғына биреү урынына, ауылға барып, үҙе һуйып алып ҡайта. Был эшкә улын да эйәртә. Улы ла был хаҡта бик фәһемле һөйләй: "Киләсәктә башҡорт балаһы мал һуйыуҙы ла белмәйәсәк бит, баҙарҙа ит бөтһә, ул нимә - астан үләме?" - тип ебәрә. Дөрөҫ әйтә. Бөгөнгө уңайлыҡтар, бигерәк тә супермаркеттар быуаты беҙҙе бөтөнләй булдыҡһыҙ һәм тормошҡа яраҡһыҙ итеп бара. Иртәгә шул уңайлыҡтар булмаһын әле, ярай, быныһы артығыраҡ булды, тағы ла бер егерме-утыҙ йылдан тип алайыҡ. Ҡапыл супермаркеттар юҡҡа сыҡты, ти. Халыҡ ысынлап та тереклек сығанаҡтарын белмәйәсәк бит.

Күршеләрем - йәш ғаилә, бәпестәрен махсус балалар аҙыҡтары менән туҡландырып, памперста ғына көтә. Ҡатынҡай балаға бутҡа бешерә лә, ит йәки йәшелсәнән пюре яһай ҙа алмай. Хатта ябай ғына итеп сәйнәп ҡаптырыуҙы ла белмәй. Сабыйҙы йүргәкләмәйҙәр, йүргәк йыумайҙар, ул йәше тулып килгәндә лә бәҙрәф тәртиптәренә өйрәтелмәгән - памперста тик йөрөй. Сөнки ата-әсәгә лә уны, йәғни тереклек итеү тәртибен бирәү ҙә өйрәтмәгән, сөнки барыһы ла магазинда бар. Байрамдарҙа йыуаса, майикмәк йәки сәк-сәк бешереп, күршеләр менән бүлешкәндә, улар бөтөн был аҙыҡты ла "мәмәйкә" тип атай. Һе - мәмәйкә... Көлөр ҙә инең, әгәр шул ҡәҙәр эс бошмаһа.

Әлбиттә, һәр эштең үҙ оҫтаһы бар, махсус өлкәләр эшләй, тип әйтеүселәр ҙә булыр. Шулай ҙа тереклек итеүҙең иң ябай ысулдарын ғына кеше белергә тейеш һәм был "тейеш"тәр ата-әсә тарафынан һалынырға тейеш. Хайуан да бит балаһын йәшәү сифаттарына эйә булырлыҡ кимәлгә еткереп айыра. Ҡош та себешен бөтөн ҡош алымдарына өйрәтеп осора. Бары кеше генә, донъяһы нанотехнологиялар дәүеренә ингән һайын, булдыҡһыҙлана бара. Йәғни, ул үҙен-үҙе юҡҡа сығарыуға әҙерләнә. Бынан тағы ла бер-ике быуын алдағылар икмәк менән картуфтың ерҙә үҫеүен дә, керҙе ҡул менән йыуырға мөмкинлекте, үҙаллы бешереп ашау мөмкинлеген белмәҫкә лә мөмкин. Уларҙы әлегә супермаркеттар, KFC-лар, макдоналдстар туйҙыра. Улар шул супермаркеттар аҙығына мохтаж булып, көнө-төнө эшләй ҙә эшләй, эшләй ҙә эшләй. Әллә ниндәй сәйәсәттәрҙе хәл итә, проекттар үҙләштерә, программалар үтәй, күп нәмәне компьютер уйлай, һанай, яуап бирә. Ысынлап та үҙ башы менән уйлап, ижади фекерләй, аңын үҫтереүгә ҡулайлаштырғандар бик һирәк. Тотош быуын йәмғиәте супермаркеттар тирәләй хәрәкәт иткән роботтар отрядына, роботтар планетаһына әйләнеп барғандай...

Ә бит был үҙенә күрә масса менән идара итеү алымы ла. Халыҡты мөмкин тиклем булдыҡһыҙ һәм мохтажыраҡ итеүҙең бер юлы. Ер эшкәртеп, унда сәсеп, уны эш итеп, һатып, кәсеп итеп, йүнселлек күрһәтеп йәшәү өсөн үҙаллы уйлай һәм эш итә белеү кәрәк бит. Юҡ, идара итеүсе системаға ундайҙар кәрәкмәй, ундайҙар менән "уйнап" булмай, уға артыҡ уйлауға мохтаж булмаған, алдына һалынғанды ғына алып китә белгәндәр кәрәк. Эшләгән һәм биргәнде ашаған, эшләгән һәм ашаған ғыналар. Һәм шулай итә лә супермаркеттар быуыны...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*




## КҮҘӘТЕҮҘӘР

***20-се күҙәтеүем.*** 1983 йылда Евгений Евтушенко һуғыш йылдары хаҡында (уға һуғыш башланғанда 9 йәш була) ике сериялы "Балалар баҡсаһы" тигән нәфис фильм төшөрҙө. Фильм авторҙың бала саҡ хәтирәләренә ҡоролғайны, бер туҡтауһыҙ авторҙың шиғырҙары яңғырай, шул фонда тылда барған ваҡиғалар һүрәтләнә. Фильмдың 2-се серияһының 39-40-сы минуттарынан һуң кинозалда ултырыусылар берҙәм рәүештә тороп сығып китте. Беҙ 5-6 тамашасы ғына ултырып ҡалдыҡ. Сөнки ошо 2 минут арауығында ҡар өҫтөндә яланғас ҡыҙ көрткә сума-сума, йүгереп йөрөй. Ул көндәрҙә киноға билет табыуы ҙур проблемаға әүерелде. Кешеләр көн һайын шул яланғас ҡыҙҙы ҡарар өсөн генә кинотеатрға йөрөнө. Иҫегеҙҙә булһа, ул заманда ҡайһы бер кинофильмдар афишаларына "Кр.дет до 16 лет" тип яҙа торғайнылар. Барһаң, ҡайһы берҙәренең "Кр.дет"ы бөтөнләй булмай сыға ине. Халыҡ ундай фильмдарға эркелеп килде. Хәҙер иһә "+16", "+18" тип яҙалар. Был да үҙенә күрә реклама. Ни тиһәң дә, "тыйылған татлы була"...

***21-се күҙәтеүем.*** "Юлдаш" радиоһы егеттәре "Ҡарға буҫҡаһы" байрамы хаҡында фекер алышыу ойоштороҙо. Хуп, бик күп урындарҙа үтәлә был йола. Әммә байрамдың килеп сығышы хаҡында бер һүҙ ҙә әйтелмәне. Күренекле ғалим, антрополог Ринат Йосопов был хаҡта яҙып үтте. Ислам диненә тиклем үк үтәлә башлаған был йола. Ул саҡта вафат булғандарҙы күммәгәндәр, ҡая, ағас баштарына һалып ҡуйып, ҡоштарҙан ашатҡандар. "Ҡурай" башҡорт халыҡ әкиәтен генә иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Ҡыш көнө баҡыйлыҡҡа күсерселәрҙе иһә зыяратта ер өҫтөнә һалып ҡуйып, өҫтөнә бүрәнәләр аралығын ҡоштар инерлек кенә итеп 10-15 сантиметр ҡалдырып бура бурағандар. Йырткыс йәнлектәр мәрхүмдең мәйетен алып китмәһен өсөн шулай эшләнгән. Яҙ етеп, ҡар иреүгә кешеләр бура өҫтәренә ҡыҙыл сепрәк бәйләп, бутҡа бешереп һалып, ҡарғаларҙы, ҡоҙғондарҙы, башҡа ҡоштарҙы әүрәтеп килтереп, мәйеттәрҙе ашатҡан. Һуңынан мәрхүмдәрҙең һөйәктәрен йыйып алып, шул уҡ урында соҡор ҡаҙып күмгәндәр. "Ҡарға буҫҡаһы", "Ҡарға туйы" байрамдары ошонан ҡалған. Әбйәлил, Учалы, Белорет районларында әле булһын ҡәберҙәрҙе тап шул рәүешле бурап ҡуйыу һаҡланған, тик мәғәнәһе генә онотолған. Беҙҙең яҡта, мәҫәлән, әле булһын әжәлен көтөп ятыусы кеше иң ышаныслы яҡын кешеһенә: "Һөйәгемә һин етерһең", - тип әйтеп ҡалдыра. Тик был осраҡта мәрхүм булыусы ла, уның донъялыҡта ҡалыусы туғаны ла был һүҙҙәрҙең ни өсөн әйтелгәнен аңламай...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Баш ҡала халҡын ЮХХДИ-ның яңы махсус операцияһы башланыуы хаҡында иҫкәртәләр. "Иғтибар - балалар!" иҫкәртеү операцияһы 18 декабрҙә старт алды һәм уҡыусыларҙың ҡышҡы каникулы тамамланғансы дауам итә. Рейдтар 12 ғинуарҙа тамамлана.

✓Өфө художество галереяһында Башҡортостан Республикаһы автономияһының 100 йыллығына бағышланған күргәҙмә асылды. Экспозицияла һынлы сәнғәт, скульптура, графика, биҙәү-ҡулланма сәнғәте әҫәрҙәре ҡуйылған. Проектта Өфө, Стәрлетамаҡ, Нефтекама, Межгорье, Ишембай, Бөрө, Мәләүез, Әбйәлил, Ҡырмыҫҡалы һәм Ейәнсура районлары рәссамдары ҡатнаша. Күргәҙмә 2018 йылдың 9 февраленә тиклем дауам итә. Адресы: Революция урамы, 34.

✓15 декабрҙә Өфөлә Муниципаль электр транспорты идаралығының Башҡортостандың энергия һатыу компанияһына бурысы арҡаһында электр транспорты хәрәкәте туҡтатылғайны. Әле трамвай һәм троллейбустар хәрәкәте тергеҙелде.

✓30 декабрҙә Салауат Юлаев майҙанында Яңы йыл алдынан Башҡортостандың баш ҡалаһы өсөн йолаға әүерелгән "ИТ Фест - 2017" ит фестивале уҙғарыла. Унда халыҡты иртәнге сәғәт 10-дан киске 4-кә тиклем көтәләр. Ә Өфөнөң төньяҡ өлөшөндә йәшәгәндәргә был көндө Орджоникидзе һарайы эргәһендәге майҙанда ит йәрминкәһе ойошторола.

✓Өфөлә "Башҡортостан" дәүләт концерт залының кесе залында Владимир Спиваковтың Башҡортостан Республикаһындағы хәйриә фонды гранттарын тапшырыу тантанаһы үтте. Быйыл төбәктән дүрт йәш кеше үҙенең һәләте һәм тырышлығы менән грант яуланы. Аҡсалата бүләктән тыш, еңеүселәр ҡыҙыҡлы ижади проекттарҙа ҡатнашыуға саҡырыу алды.

✓Мәскәүҙә бөтә илдән 3-17 йәштәге талантлы ҡыҙҙар ҡатнашлығында конкурс үтте. Ярыш ҡатнашыусыларҙың мәҙәни тәрбиә, талант, башҡарыу оҫталығы, стиль тойғоһо, үҙенде сәхнәлә тотоу, матур хәрәкәт итә, тамашасылар аудиторияһы менән аралаша белеү кимәлен баһалауға йүнәлдерелгән. Өфө ҡыҙы Арина Арыҫланова "Рәсәйҙең кескәй мисы - 2017" конкурсында икенсе вице-мисс исеменә лайыҡ булды.

**"Башинформ"дан.**

ҠЫҪҠАСА

# ХОККЕЙ ҠУМТАЛАРЫ ӘҘЕР

✓ **Ҡапыл килгән һыуыҡтар Өфөлә хоккей ҡумталарын әҙерләү мөмкинлеген бирҙе.** Әлеге ваҡытта баш ҡалала 89 стационар хоккей ҡумтаһы бар, уларҙың 50-һе күп фатирлы йорттарҙың ихатаһында, дөйөм белем биреү учреждениелары территорияларында, скверҙарҙа һәм парктарҙа урынлашҡан. Һуңғы йылдарҙа шундай ҡоролмаларҙы модернизациялау буйынса киң ҡоласлы эш алып барыла - ағас борттар пластикка алмаштырыла, сисенеп-кейенеү бүлмәләре йыһазландырыла, яҡтылыҡ системаһы яңыртыла. 2014 йылдан алып барлығы 22 хоккей ҡумтаһы төҙөлгән һәм реконструкцияланған. Декабрҙә тағы ла Затон биҫтәһенең "Тулҡын" скверында, Һупайлы биҫтәһендә (М. Рыльский урамы, 6/1) хоккей майҙансығы асыласаҡ. Майҙансыҡтар миҙгелгә әҙерләнеп, ремонтлана, Өфө районларының торлаҡ хужалығы идаралыҡтары, коммуналь хеҙмәттәре, дөйөм белем биреү учреждениелары тарафынан тейешле кимәлдә тотола. Ҡайһы берҙәрендә быйылғы миҙгелдә беренсе ярыштар уҙғарыла (Комсомол урамы, 79).

✓ **Калинин районында "Заманса ҡала мөхитен формалаштырыу" федераль проекттың тормошҡа ашырылыуҙың беренсе миҙгеле тамамланды.** Ошо осорҙа унда Александр Невский урамы, 3, 5/1,7 адресы буйынса урынлашҡан квартал реконструкцияланды. Ремонтҡа тиклем ихатала соҡор-саҡырлы асфальт, балалар майҙансығы эргәһендәге газонда парковка, шиналарҙан эшләнгән клумбалар, ҡыйратылған бордюрҙар булһа, хәҙер бөтөнләй икенсе күренеш күҙәтелә. Йортта бала-саға бик күп булмаһа ла, олоратҡар турник комплексын тейешенсә баһалай. Унда телгән ваҡытта балалар ҙа, ололар ҙа шөғөлләнә ала. Шулай уҡ бордюрҙар алмаштырылған, ихатаға инеү һәм сығыу юлдары, йәйәүлеләр һукмағы асфальтланған һ.б. Һәм, әлбиттә, иң мөһим мәсьәләләрҙең береһе хәл ителгән - өҫтәмә парковка урындары булдырылған.

✓ **Ҡала үҫкән һайын унда реклама ла арта. Бер яҡтан, был заман талабы булһа, икенсе яҡтан, ҡаланың йөҙө боҙолоуға ла сәбәп.** Бөгөн Өфөнөң рекламалар конструкциялары исемлегендә 2466 тышҡы реклама сараһы иҫәпләнә. Быйыл 1050 реклама ҡоролмаһының рөхсәт ителгән ваҡыты үткән. Ошоға бәйле Өфө территорияһында реклама конструкцияларын урынлаштырыу схемаһына үҙгәрештәр индерелеп, 526 урын бөтөрөлгән, 183 яңы урын индерелгән. Билбордтарҙың (ҙур күләмле реклама щиттары) дөйөм һаны 30 процентка кәмеүе һәм рөхсәт ваҡыты үтеү сәбәпле 661 объект алынған. Был йәһәттән ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың да фекере тап килә: "Урамдарҙан билбордтар юҡҡа сығырға тейеш. Башҡарылған эштәр һөҙөмтәһендә Ленин, Цурюпа, Октябрь проспекты асылып ҡалғандай булды, тарихи биналар, парктар һәм скверҙар күренеп ҡалды. Рекламаның заманса варианттары үҫергә тейеш. Мәҫәлән, беҙҙең туғандаш ҡалабыҙ Астанала бәләкәй форматлы реклама һәм медиафасадтар киң үҫеш алған. Әлбиттә, медиафасадтар техник яҡтан ҡатмарлы, уның ҡарауы, рекламанан тыш, төрлө байрамдарҙа улар кәрәкле архитектура яҡтыртыуын тәьмин итә ала".

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов етәкселегендәге рәсми делегация Беларустың баш ҡалаһы Минскиҙа булды. Ике ҡала араһында төрлө тармаҡтар буйынса хеҙмәттәшлек булдырыу, шулай уҡ төҙөкләндереү һәм инфраструктураны үҫтереү өлкәһендәге тәжрибәне өйрәнеү сәфәрҙең төп маҡсаты булып торҙо.**

# ТУҒАНДАШ ҠАЛАЛАР АРТА



Эш сәфәре сиктәрендә Өфө менән Минск ҡалаһының туғандашлығы тураһында меморандум төҙөлөп, уға бер яҡтан - Ирек Ялалов, икенсе яҡтан Минск ҡала башҡарма комитеты рәйесе Андрей Шорец ҡултамға һалды. Был документ ҡалаларҙың ҡеүәтен тулыһынса асыу һәм идара итеү һөҙөмтәлелеген күтәреү өсөн хеҙмәттәшлектең яңы перспективалы һәм инновацион формаларын үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк. Меморандумға ярашлы, туғандаш ҡалалар сауҙа һәм фәнни-техник бәйләнештәрҙе үҫтерәсәк, быйың өсөн хоҡуҡи, финанс һәм иҡтисади шарттар тыуҙырасаҡ. Өфө менән Минск сәнғәт, мәҙәниәт, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, туризм, спорт, йәштәр сәйәсәте өлкәһендә хеҙмәттәшлек булдырырға ниәтләй.

Өфө делегацияһы Европалағы заманса күп функциялы ҡоролмаларҙың береһе - халыҡ-ара спорт һәм мәҙәни-күңел асыу сараларын үткәреү өсөн тәғәйенләнгән "Минск-арена" мәҙәни-спорт комплексын менән танышты. Бина дүрт объекттан тора: 15 мең тамашасы һыйҙырышлы арена, коньки ярыштары өсөн стадион, велодром һәм күп кимәлле асыҡ автотуктаҡа. Делегация вәкилдәре комплексты спорт майҙансыҡтары менән генә түгел, медицина секторы булыуы менән дә иғтибарға лайыҡ тип баһаланы. Шулай уҡ беҙҙекеләр Минскиҙа яңы заманса район - "Яңы Боровая" менән танышты. Ул SMART + SOCIAL концепцияһы буйынса төҙөлә һәм бер ыңғай эске инфрастуктураһын да үҫтерә. Йорт территорияһында спорт зоналары, заманса балалар майҙансыҡтары, амфитеатр буласаҡ, ә район үҙе 11 кварталдан тораcаҡ. Беларустың баш ҡалаһында транспорт яҡшы үҫешкән. Өс йүнәлештәге метрополитендан тыш, 167 - автобус, 60 троллейбус маршруты бар, трамвай һәм маршрут таксиҙары селтәре эшләй. 2011 йылдан ҡала электричкаһы йөрөй. Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, килешеү төҙөлгәндән һуң, Өфө белгестәре үҙаккә килеп, уларҙың эш тәжрибәһен ентекле өйрәнә аласаҡ. Шулай уҡ "Белкоммунмаш" холдингының идара итеү компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте лә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Ул - БДБ илдәрендә ер өҫтө электр транспортын эшләүсе алдынғы предприятие. Уның нигеҙендә - тирә-яҡ мөхиткә зыян килтермәүсе электробус эшләнгән. Бөгөн Минскиҙа ике маршрут буйынса 20 электробус йөрөй. Троллейбустан айырмалы, ул тейешле инфраструктура булмаған ерҙә лә йөрөй ала. Минск белгестәре Өфө менән йәмғәт транспорты селтәрен үҫтереү мәсьәләһендә тығыҙ бәйләнештә эшләргә әҙер булыуын белдерҙе.

Әйткәндәй, Минск - Өфөнөң туғыҙынсы туғандаш ҡалаһы. Быға тиклем Анкара (Төркиә), Астана (Ҡаҙағстан), Бишкәк (Ҡырғыҙстан), Галле (ГФР), Наньчан, Цицикар, Хэфэй, Шэньян (ҠХР) менән шундай уҡ меморандумдар төҙөлгәйне.

# УРА! ҠЫШ БАБАЙ КИЛӘ!



**26 декабрҙә Өфөнөң Ленин исемендәге майҙанында Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу ҡатнашлығында ҡаланың төп шыршыһын асыу тантанаһы үтәсәк. Башҡа боҙ майҙансыҡтары (улар барыһы 17) 23 декабрҙә уҡ эшләй башлаясаҡ.**

Райондарҙың майҙансыҡтарында театрлаштырылған тамашалар һәм уйын программалары ойоштороу ҡаралған. Димдә бындай саралар - Ял һәм мәҙәниәт паркында, Калинин районында - Машина эшләүселәр Мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда, Киров районында - Салауат Юлаев майҙанында, Орджоникидзе районында - С. Орджоникидзе исемендәге майҙанда, Ленин районында - "Тулҡын" паркы алдындағы майҙанда, Совет һәм Октябрь райондарында - "Үҙәк" сауҙа комплексы алдындағы майҙанда һәм Спорт һарайы алдында.

"Ватан" паркы һәм Салауат Юлаев майҙаны "Һоҡланғыс Яңы йыл Башҡортостаны" республика проекты майҙансығы буласаҡ. Республиканың төп шыршыһы ла, ғәҙәттәгесә, Салауат Юлаев майҙанында урынлашасаҡ. Ҡыш Бабайҙың "Ватан" паркындағы Үҙәк ҡунаҡ тирмәһе ишеген 25 декабрҙә асасаҡ.

Республика Башлығы шыршыһы 22 декабрҙә "Башҡортостан" концерт залында үтә, шунда уҡ баш ҡала һәм социаль шыршы байрамдары уҙасаҡ. Йәш ҡунаҡтарға театрлаштырылған тамаша һәм спектакль тәҡдим ителә.

Яңы йыл төнөндә, 31 декабрҙә, Рус дәүләт академия драма театры алдында эстрада-күңел асыу программаһы ойоштороласаҡ. Ул киске сәғәт 10-да башланып, төнгө 3-кә тиклем дауам итәсәк. Төнгө сәғәт 2-лә Ленин исемендәге майҙанда фейерверк атыласаҡ.

Яңы йыл байрамдарында һәм ҡышҡы каникулдарҙа традицион "Выюговей" фестивале ойоштороласаҡ. Әлеге ваҡытта ҡаланың һәр районында боҙ ҡаласыҡтары төҙөү эше әүҙем бара. "Боҙ ҡалаһы" һәм "Әкиәти боҙ" ҡаласыҡтар конкурсына йомғаҡ декабрь һуңында яһаласаҡ.

Әйткәндәй, Яңы йыл алдынан Avito белгестәре ниндәй ҡалаларҙа яңы йыл персонаждарын саҡырыу иң ҡиммәт һәм иң осһоҙ икәнен асыҡларға булған. Миллионлы ҡалалар араһында Мәскәүҙә байрам персонаждарын саҡырыу иң ҡиммәте тип баһалана. Илебеҙҙең баш ҡалаһында уртаса хаҡ 3100 һумға етә. Рейтингтың икенсе баҫҡысында - Санкт-Петербург. Нева буйындағы ҡалала Ҡыш бабай хеҙмәте уртаса 2300 һум тора. Тәүге өс ҡала исемлегенә Өфө инә - Башҡортостандың баш ҡалаһында "ҡыш тылсымсыһын" саҡырыу 1600 һумға төшә.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ "Рәсәй" дәүләт транспорт компанияһы байрам алдынан һәм Яңы йыл каникулдарында Сочиға өҫтәмә өс рейс ҡуҙаллай. Пассажирҙар 29 декабрҙә Өфөнән урындағы ваҡыт буйынса киске 7 тула 15 минутта, 3 һәм 6 ғинуарҙа иртәнге 6-сы 15 минутта оса. Симферополгә өҫтәмә рейс 6 ғинуарҙа киске 6-ла осоп китә.

✓ Яңы йыл алдынан Башҡорт опера һәм балет театры өфөләргә бүләк эшләне - Николай Римский-Корсаковтың "Батша кәләше" спектаклен тәҡдим итте. Премьера ике көн дауамында барҙы. Марфаның партияһын йәш, әммә ҙур исемдәргә эйә йырсы, музыкаль династия вәкиле Дилара Иҙрисова башҡарҙы. Тамашасылар араһында уның өләсәһе лә - элек Марфаны йырлаған башҡорт сәхнәһе ветераны, Башҡортостандың халыҡ артисы Нәжиә Аллаярова булды.

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов М.В. Нестеров исемендәге Башҡорт дәүләт художество музейында барған "Йолалар һәм рухилыҡ" Нестеров премияһына дәғүәселәр эштәренең Республика тематик күргәҙмә-конкурсы экспозицияһы менән танышты. Музей директоры Айрат Тереғолов һуҙҙәренсә, премияға бөтәһе 150-ләп эш дәғүә итә.

✓ Һынлы сәнғәт һәм сәнғәт белеме өлкәһендә М.В. Нестеров исемендәге Башҡортостан Республикаһы Дәүләт премияһы Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Указы менән булдырылған.

✓ Азат Рәжәпов Башҡортостан иген союзы рәйесе итеп һайланды, тип хәбәр иттеләр республиканың Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Азат Фәүкәт улы Рәжәпов 1982 йылда тыуған. Ул Өфө дәүләт нефть техник университетын тамамлаған. Стәрлетамаҡ районының "Рощинский" совхозы дәүләт унитар ауыл хужалығы предприятиеһының иген етештереү, һаҡлау һәм эшкәртеү етәксеһе булып эшләй.

✓ Башҡортостандың өҫтөнлөклө инвестиция проекттары исемлеге аҡ цемент етештереү буйынса завод проекты менән тулыланды. Уны Әбйәлил районында төҙөйәсәр. Дөйөм инвестициялар күләме - 2,9 миллиард һум. 360 яңы эш урыны булдырыласаҡ. Инвесторы - "Цемикс" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте, уның ойоштороусыһы - Австрияның "Ласселсбергер" компанияһы. Был объектты 2019 йылда төҙөү күҙаллана.

✓ Германия ерендә ошо "төньяҡ амурҙары" һәм ҡурай һүрәттәрен күреү әйтеп аңлата алмаҫлыҡ тәьҫораттар тыуҙырҙы. Немецтар ҙа был һүрәттәрҙе ыңғай һәм яҡшы ҡабул итә.



БЕҘҘЕҢ ӘҢГӘМӘ

# СИТ ЕРҘӘРГӘ БАРЫП...

## үҙебеҙҙе лайыҡлы күрһәтәбеҙ



**Күптән түгел Галле менән Өфө ҡалаһының дуҫлашыуына, йәғни Башҡортостан - Германия дуҫлығына 20 йыл тулыу уңайынан Башҡортостандың рәсми делегацияһы Германияға барып ҡайтты. Уны Башҡортостан Республикаһының вице-премьеры Салауат Сәғитов етәкләне. Шулай уҡ делегация составында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер БАЯЗИТОВ та бар ине. Бөгөн уның менән һөйләшеүҙе ошо сәфәр тураһындағы мәғлүмәттән башлап, башҡа темаларға ла ҡағылдыҡ.**

- Былдай осрашыуҙар мотлаҡ рәүештә кәрәк, тип уйлайым, сөнки Галле һәм башҡа ҡалаларҙа шундай матур осрашыуҙар булды, беҙҙе көтөп торғандар, сығыштарыбыҙҙы яҡташтарыбыҙ ғына түгел, ғөмүмән, немец халҡы ла ысын күңелдән, ҙур кинәнес менән ҡарап ултырҙы. Минеңсә, ошо дуҫлыҡтың булыуына, тергеҙелеүенә улар бик шат. Ике аралағы бәйләнештәрҙә бер ни тиклем ниндәйҙер өҙөклөк булһа, ошо визит менән бушлыҡты тулыландырҙыҡ, тип әйтә алам.

Башҡортостан, башҡорттар тураһында беләләр һәм был бик ҡыуаныслы. Мәҫәлән, Галле ҡалаһында ике көн булдыҡ. Урындағы гимназия менән таныштыҡ. Ундағы уҡытыусылар барыһы ла рус телендә һөйләшә һәм беҙҙе "Өфөләге дуҫтарыбыҙ килде", тип ҡабул иттеләр. Сөнки улар баш ҡаланың 86-сы гимназияһы менән хеҙмәттәшлек итә, бер-береһе менән аралашалар, ике гимназия уҡыусылары бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөй. Беҙ уҡыу шарттары, уҡыусыларҙың белем кимәле, сифаты менән таныштыҡ. Ғөмүмән, уларҙың үҙебеҙгә мөнәсәбәтен, рус телен ныҡлы өйрәнергә теләктәре булыуын аңланыҡ. Шул көндө үк ҙур медицина үҙәгендә - урындағы университет ҡарамағындағы клиникала халыҡ өсөн шундай матур шарттарҙың булыуына һоҡланып, ғөмүмән, медицинаға мөнәсәбәт, халыҡтың һаулығын һаҡлау буйынса ҙур эштәр башҡарылыуға шаһит булдыҡ. Ошо клиника табиптары менән Башҡортостан табиптары киләсәктә килешеү төҙөп, бер-береһенә ярҙамлашыр, хеҙмәттәшлек итер, тигән өмөттә ҡалам. Был турала ла һөйләшеү алып барылды. Кисен Галле ҡалаһындағы университетта рәсми сығыштар булды, уның эшендә Рәсәй Федерацияһының Лейпцигтағы консулы Дронов әфәнде, шулай уҡ Саксония округы парламенты рәйесенең урынбаҫары һәм өлкәнең мәҙәниәт министры урынбаҫары, өлкәнең мәҙәниәт идаралығы етәксеһе, яҡташтарыбыҙ ҡатнашты. Башҡортостандың билдәле фоторәссамы Рәмил Килмәмәтовтың фотоларынан күргәҙмә ойоштороҡ, сәнғәт оҫталары матур концерт менән сығыш яһаны һәм һуңынан "Етегән" фильмын күрһәттек. Сығыштарҙы ҙур кинәнес менән, ихлас ҡаранылар.

Галле ҡалаһында балалар майҙансығында стенд астыҡ. Унда бынан күп йылдар элек, Башҡортостан-Галле дуҫлығы гөрләп торған осорҙа, республиканан барған студенттар паркта ағастан ҡурайсы, көрәшсе һәм башҡа шундай милли һыҙаттарҙы сағылдырған скульптуралар эшләп киткән. Әле лә улар бар һәм ошо майҙанда балалар бик теләп уйнай икән. Беҙ унда Галле ҡала парламенты етәксеһе ҡатнашлығында мәғлүмәт стендын асып, парктың Башҡортостан, башҡорт халҡы, уның мәҙәниәте менән бәйле икәнен иҫбатланыҡ һәм быны рәсми рәүештә нығыттыҡ.

Икенсе көн Дрезден ҡалаһында булдыҡ. Унда доктор Шеллер ойошторған Рус ойошмаһы бар, Рәсәйҙән килгән барлыҡ халыҡ уның ағзаһы булып тора. Улар ойошторған осрашыуға хатта Швейцариянан, Эстониянан милләттәштәребеҙ килеп етте. Аралашыу матур, йылы үтте, кисен университетта мәҙәни программаны ҡабатланыҡ.

Өсөнсө көн Лейпциг ҡалаһында булдыҡ. Унда беҙҙең милләттәшебеҙ, эшҡыуар Ирек Байышев 20 йылдан ашыу йәшәй. Һәм ошо ҡаланың уртаһында милләттәштәребеҙ 1813 йылда яуҙарҙа ҡатнашҡан "төньяҡ амурҙары" хөрмәтенә өс телдә яҙылған иҫтәлекле таҡтаташҡа сәскәләр һалдыҡ. Артабан Ирек үҙе төҙөгән йорттарҙы күрһәтте, уларҙың фасадтары "төньяҡ амурҙары"ның һүрәттәре менән биҙәлгән. Германия ерендә ошо "төньяҡ амурҙары" һәм ҡурай һүрәттәрен күреү әйтеп аңлата алмаҫлыҡ тәьҫораттар тыуҙырҙы. Немецтар ҙа был һүрәттәрҙе ыңғай һәм яҡшы ҡабул итә. Башҡорттар хаҡында хәбәрҙарҙар, белмәгәндәре үҙҙәре йәшәгән йорт фасадында һүрәтләнеүселәрҙең кемдәр булыуы менән ҡыҙыҡһына башлай һәм ошондай биҙәлешкә теләктәшлек белдерә.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ!

# ЭШЛӘМӘГӘН ПЕНСИОНЕРҒА...

**БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың сираттағы ултырышында 2018 йылға пенсияға социаль өҫтәмә күләмен билдәләү маҡсатында Башҡортостан пенсионерының йәшәү минимумы күләме 2017 йылғы 8 015 һум урынына 8 320 һум итеп раҫланды.**

2018 йылдың 1 ғинуарынан республиканың эшләмәгән 146 мендән ашыу пенсионеры пенсияһына федераль социаль өҫтәмәне яңы күләмдә аласаҡ. Шуларҙың 7 меңе былдай өҫтәмә хоҡуҡҡа тәүгә эйә була. Өҫтәмә түләүҙең был төрө бер ҡайҙа ла эшләмәүсе пенсионерҙарға 2010 йылдың 1 ғинуарынан булдырылғайны. Социаль өҫтәмәнең күләме һәр пенсионер өсөн айырым һәм ул һәр кемдең матди тәьминәт кимәле (пенсияһын һәм бөтөн өҫтәмә түләүҙәрҙе ҡушып) пенсионерҙың йәшәү минимумы күләменән күпмегә кәм булыуына бәйле.

2018 йылдың 1 ғинуарынан социаль өҫтәмә тәғәйенләү өсөн ғариза был хоҡуҡҡа тәүгә эйә булыусылар тарафынан ғына яҙыла һәм ул пенсияны алған урындағы Пенсия фондына ошо йылдың декабрендә тапшырылырға тейеш, сөнки социаль өҫтәмә уға ғариза яҙылған айҙан һуңғы айҙың тәүге көнөнән иҫәпләнә. Социаль өҫтәмә18 йәше тулмаған йәштәге пенсия алыусыларға былдай ғаризаны яҙмаһа ла тәғәйенләнәсәк. Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса идарасыһы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, быйылғы 10 ай эсендә социаль түләүҙәр өсөн федераль бюджет сығымдары 2 млрд. 456 млн. һум тәшкил итте.

**РФ Пенсия фонды БР буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

# БҮЛӘК БИРЕҮ ТЫЙЫЛА!

**Рәсәйҙә түрәләргә бүләк биреү һәм алыу тыйыла. Рәсәй Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы Яңы йыл һәм Раштыуа байрамдары алдынан бөтә министрлыҡтарға һәм ведомстволарға ошо хаҡта хат ебәреп иҫкәртте.**

Хаттарҙы Рәсәй субъекттарының юғары башҡарма власть органдары, федераль дәүләт органдары, бюджеттан тыш дәүләт фондтары һәм дәүләт корпорациялары алды. Ведомство сайтында билдәләнеүенсә, вазифалы кешегә бүләк алған өсөн ышанысты юғалтыу менән бәйле эштән ҡыуыуға саҡлы яуаплылыҡ ҡаралған. Бүләк ришүәт булараҡ иҫәпләнһә, енәйәт яуаплылығы янай. Протокол саралар, эш командировкалары һәм башҡа рәсми саралар менән бәйле алынған һәм тапшырылырға тейеш бүләктәргә генә ташлама бирелә. Ведомство етәкселәре тейешле мәғлүмәтте еткереү маҡсатында хеҙмәткәрҙәре менән шәхсән әңгәмәләшергә, был мәсьәлә буйынса ойошмаларҙың рәсми сайттарында хәбәр урынлаштырыу юлы менән аңлатма эштәре уҙғарырға тейеш.

# УН КӨН ЯЛ ИТӘБЕҘ!

**Рәсәй Хеҙмәт министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәй, шул иҫәптән Башҡортостан халҡы өсөн алдағы яңы йыл каникулдары теүәл ун көн дауам итәсәк: 2017 йылдың 30 декабренән 2018 йылдың 8 ғинуарына тиклем. Йәғни, күптәребеҙ шишәмбе, 9 ғинуарҙа, эшкә сыға. Тимәк, яңы йылда тәүге эш аҙнаһы ҡыҫҡа була.**

2018 йылда рәсәйҙәрҙе 26 байрам көнө көтә. Ул - Ватанды һаҡлаусылар көнө менән тап киләсәк өс көн 23-25 февралдә, Рәсәй көнөнә тура киләсәк өс көн 10-12 июндә һәм тағы өс көн Халыҡтар берҙәмлеге көнөнә бәйле 3-5 ноябрҙә. Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө менән бәйле 8-11 мартта Рәсәй халҡы дүрт көнлөк отпускта була. Май байрамдарына биш ял көнө ҡаралған: 29 апрелдән 2 майға саҡлы һәм 9 май - Еңеү көнө. Графикка ярашлы, ял көндәре шәмбе 6 ғинуарҙан йома 9 мартҡа; йәкшәмбе 7 ғинуарҙан шаршамбы 2 майға; шәмбе 28 апрелдән дүшәмбе 30 апрелгә; шәмбе 9 июндән дүшәмбе 11 июнгә; шәмбе 29 декабрҙән дүшәмбе 31 декабргә күсерелә. Шул рәүешле, 2018 йылда өс шәмбе - 28 апрель, 9 июнь һәм 29 декабрь эш көндәре булып иҫәпләнә.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡан тамырын таҙартыу

❖ Баш мейеһе тамырҙарын таҙартыу муйын остеохондрозынан, атеросклероздан ҡотҡара, баш ауыртыуҙары бөтөп ҡалыр, кәйеф тә күтәрелер. 5 әстерхан сәтләүегеен ваҡлап, 1 ҡалаҡ йүкә балы менән болғатырға. Бер семтем дәрсен (корица), имбир өҫтәргә һәм 1 тәүлеккә һыуытҡысҡа ҡуйырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ ашарға.

❖ 1/3 стакан һуған һутына 1 стакан бал өҫтәп, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр балғалаҡ ашарға. Ул тамырҙарҙы таҙартып ҡына ҡалмай, иммунитетты ла нығыта.

❖ Көн һайын төшкө һәм киске аштан ярты сәғәт алда яртышар стакан анар (гранат) һуты эсегеҙ. Уны алма һәм кишер һуты менән сиратларға ла була.

❖ 10 грамм дегәнәк тамырын термоста 8-10 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм һыуытҡысҡа ҡуйырға. Төнәтмәне иртәнге аштан ярты сәғәт алда 4-әр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай.

❖ Организмды һауыҡтырыу һәм тамырҙарҙы таҙартыу өсөн көн һайын иртәнге аштан ярты сәғәт алда 1 мандарин, бер ус йөҙөм һәм әстерхан сәтләүегеге ашап, 15-20 минуттан 1 балғалаҡ бал һәм лимон киҫәге һалынған 1 стакан һыу эсергә. Тағы ла 15-20 минуттан ашаһағыҙ була.

## Йүткереү

❖ 6-8 ҡара торманы йоҡаҡ ҡына итеп турарға, шәкәр һибергә, 6 сәғәт төнәтергә. Һәр сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Йүткереү ҡоро булған саҡта ҡыҙыл көртмәле (брусника) сиробына бал өҫтәп яһалған дауа ярам итә. Шулай уҡ һәр сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ ашарға. Ҡара сәй урынына еләкле сәй эсегеҙ.

❖ Бер нисә йылға һуҙылған ҡоро йүткереү менән яфаланыусылар өсөн кәңәш (уны йөрәк йүткереүе тип тә йөрөтәләр): йүткертә башлағас та танау менән йыш-йыш итеп тын алырға. Йүткереү шунда уҡ баҫыла. Ошо рәүешле тын алыу күнегеүҙәре менән был сирҙе еңергә була.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

### Хафизаға өйләнгәне

Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙенең кейәүен, Ислам динен ҡабул итергә теләмәгән Әбүл Әсте түләүһеҙ ҡайтарырға хәл итә. Уға бер генә шарт ҡуйыла - Әбүл Әс үҙенең ҡатыны Зәйнәбте Мәккәнән Мәҙинәгә ебәрергә тейеш була. Әбүл Әс ризалашмай, үҙ азатлығы өсөн бик күп аҡса тәҡдим итә. Мөхәммәт бәйғәмбәр уның менән күҙгә-күҙ әңгәмәләшеп, үҙ шартына күндерә. Әбүл Әс һүҙендә тора һәм, Мәккәгә ҡайтыу менән, ғоманлы ҡатынын юлға әҙерләй башлай. Ләкин Мәккә халҡының күбеһе быға ҡаршы була, сөнки был аҙымды улар Мөхәммәт бәйғәмбәргә баш биреү тип баһалай. Хәббәр исемле бер ир Зәйнәб ҡаланан сыҡҡас та уны һөңгө менән сәнсеп үлтерәсәге тураһында әйтә, шунан, һүҙҙәрен ҡеүәтләп, бер нисә тапҡыр Зәйнәбкә һуға. Бер көндән һуң Зәйнәбтең балаһы төшә.

Әбүл Әс был турала Мәҙинәгә хәбәр итә һәм күпмелер ваҡыттан һуң Зәйед уның менән бәйләнешкә инә. Әбүл Әс Зәйнәбте төндә Мәккәнән алып сыға ла, алдан һөйләшелгән урында уларҙы көтөп торған Зәйедкә тапшыра. Зәйед Зәйнәбте Мәҙинәгә алып китә.

Зәйнәбте күптәр яусылай. Ләкин Зәйнәб береһенә лә кейәүгә сығырға теләмәй. Ирен ярата ул һәм мөхәббәтенә тоғро ҡала. Иренә рәхмәтле лә була, сөнки Мәккәлә мосолмандарҙы ҡыҫырыҡлағанда, Әбүл Әстең Зәйнәбте айырыуын талап итәләр. Әбүл Әс иһә, нәҫел аҡһаҡалдарының ҡарына ҡаршы сығып, туғандарының баҫымына ҡарамай, Зәйнәб менән айырылышыуҙан ҡырҡа баш тарта.

Был тарих матур тамамлана. Алты йылдан һуң Әбүл Әс яңынан әсиргә эләгә. Был юлы уны язаларға тейеш булалар. Зәйнәб атаһынан Әбүл Әсте ҡотҡарып, ҡайтарып ебәреүен һорай. Әбүл Әс иһә, язанан ҡотҡарылғандан һуң, Ислам динен ҡабул итергә теләк белдерә. Бынан һуң ул Зәйнәб менән осраша. Аҙаҡ улар, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән рөхсәт алып, яңынан өйләнешә...

Бәҙәр һуғышында Ғүмәрҙең кейәүе һәләк була. Шуға ла Ғүмәр үҙенең ҡыҙын Әбү Бәкергә димләй. Әбү Бәкер, төрлө сәбәптәр табып, баш тарта. Сөнки Ғүмәрҙең ҡыҙы, ун һигеҙ йәшлек Хафиза, матурлығы һәм иҫ китмәле буй-һыны менән дан алһа ла, атаһына оҡшап, үтә лә тәүәккәл һәм ярһыу холоҡло була. Шуға ла уны ҡатынлыҡҡа алыуҙан шөрләйҙәр. Ошо арҡала Ғосман да баш тарта. Ғүмәр уны әрләп ташлай ҙа, иң күренекле һәм абруйлы мосолмандарҙың үҙе менән туғанлашырға теләмәүҙең сәбәптәрен аңлатыуҙы талап итеп, Мөхәммәт бәйғәмбәргә юллана. Үҙҙәре менән тиң һанамауҙары, үҙен кәмһетергә тырышыуҙары, тип көйөнә ул. Мөхәммәт бәйғәмбәр Ғүмәрҙе иғтибар менән тыңлай ҙа, Хафизаға үҙенең өйләнергә теләге тураһында әйтә. Быны ишеткәс, Мөхәммәт бәйғәмбәр менән туғанлашыу бәхете тураһында хыялланырға ла баҙнат итмәгән Ғүмәр үҙ ҡолағына үҙе ышанмай, байтаҡ ваҡыт бер ни әйтә алмай ултыра. Аҙаҡ шатланып риза була.

Түйҙан һуң Хафизаға ла Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең башҡа ҡатындары янында айырым йорт төҙөп бирәләр. Әйтергә кәрәк, Мөхәммәт бәйғәмбәргә Хафизаның ярһыу холҡон үҙ елкәһендә татырға тура килә - ғаиләһенең ығы-зығыларының байтағының сәбәпсеһе була ул. Мөхәммәт бәйғәмбәргә ҡатындары араһында килеп сыҡҡан бәхәстәргә йыш ҡына ҡыҫылырға тура килә башлай. Ләкин, нисек кенә булмаһын, Ҡөрьән яҙмалары һаҡланған һандыҡты ул фәҡәт Хафизаға ғына ышанып тапшыра.

(Дауамы бар).

БЕҘҘЕҢ ӘҢГӘМӘ

# СИТ ЕРҘӘРГӘ БАРЫП...

## үҙебеҙҙе лайыҡлы күрһәтәбеҙ



(Башы 5-се биттә).

**➔ Шундай уҡ һүрәттәрҙе Өфөлә лә бер нисә урынға эшләү тураһында хыял тыуманымы?**

- Әлбиттә, ундай идея тыуҙы. Беҙҙә лә бындай миҫалдар бар, әммә бик һирәк һәм улар, ғәҙәттә, билдәле шәхестәрҙең портреты. Киләсәктә баш ҡалала ла шундай йүнәлештәр булыр тип уйлайым. Сөнки сит илдә йорт фасадында башҡорттар һүрәтләнеп, үҙебеҙҙә булмауы бер ниндәй ҡалыпҡа ла һыймай.

**➔ Хәҙер юғары технологиялар заманы, Башҡортостан делегацияһы Германияла йөрөгәндә үк "Караүан" фольклор-эстрада төркөмө егеттәренең урамда ҡурай уйнап йырлауы интернет селтәрҙәрендә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы...**

- Эйе, Галле ҡалаһының иң бейек башняһына менгәс, ҡурайсы егетебеҙ мәшһүр "Урал"ды һыҙҙырып ебәрҙе, Марсель Ҡотоев уға ҡушылып йыр һуҙҙы. Ғөмүмән, егеттәр ниндәй урында булабыҙ, шунда "Урал"ды башҡарҙы. "Төньяҡ амурҙары"на ҡуйылған таш эргәһендә лә "Урал" моно ағылды, тирә-яҡҡа таралды. Ғөмүмән, рухи йәһәттән милләттәштәребеҙҙе дәртләндереп, башҡорт халҡының мәртәбәһен тағы ла арттырып ҡайттыҡ.

**➔ Башҡортостанда "Урал" йырын тыңлағанда әйтеп бөткөһөҙ кисерештәр тыуа, күңелдең аҫтыөҫкә килә, тигәндәй. Ә бына тыуған ерҙән ситтә халҡыбыҙҙың гимны булған ошо йырҙы ишеткәндә ниндәй тәьҫораттар кисерҙегеҙ?**

- Йырҙы тыңлағанда республика, халыҡ күҙ алдынан үтә, уның тарихын тыңлап үтә, рухи ҡиммәттәрен байҡайһың һәм бөгөнгә тиклем йәшәгән халҡың өсөн ҡыуанаһың. Был мөңдө күтәренке рухта ҡабул итәһең. Һәр кеше үҙенең тыуған яғын ярата, бигерәк тә сит илдә ошо йырҙы ишеткәс, кесе һәм оло Ватаныңдың матурлығын, хозурлығын һаҡлап алып ҡалыу, уны быуындан-быуынға тапшырыу, киләсәк быуындарыбыҙ белһен өсөн тыуған еребеҙҙе һаҡларға кәрәк икәненә тағы бер инанаһың.

**➔ Германиянан башҡа быйыл күп ерҙәрҙә булдығыҙ, Ҡала мәҙәниәт һарайының "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле менән дә сәфәрҙәрҙә йөрөнөгөҙ. Барған ерҙәрегеҙҙән башҡорттар өсөн ғорурланып ҡайтырлыҡ ниндәй фекерҙәр ишеттегеҙ?**

- "Мираҫ"тар менән Венгрияла, 18 ил ҡатнашлығындағы халыҡ-ара фестивалдә булдыҡ. Беҙҙең ансамбль ысын мәғәнәһендә сараның йөҙәк ҡашына әйләнде. Коллективтар араһында иң тәүгеләрҙән булып сығыш яһаны һәр ваҡыт, ойоштороусылар уны бик йылы ҡабул итте, сөнки йыр-моңдарыбыҙҙың, ҡурай моңонаң аһәңен, бейеүҙәребеҙҙең матурлығын тулыһынса еткерә алды артистар һәм башҡорт халҡының шундай юғары кимәлдә сығыш яһауын раҫланы. Венгрҙар башҡорттарҙы бик яҡшы белә, үҙҙәрен сығышы менән Уралдан, тип белдерә, Башҡортостан беҙҙең боронғо тыуған еребеҙ, тиҙәр. Унда ла беҙҙең яҡташтарыбыҙ, милләттәштәребеҙ йәшәй, улар көн һайын концерттарыбыҙға йөрөнө. Фестивалдә ҡатнашыу дуҫлыҡ ҡына түгел, туғанлыҡ мөнәсәбәттәрен нығытыу булды.

Сентябрҙә Ирландияла 80 ил ҡатнашлығындағы халыҡ-ара сарала ҡатнаштыҡ. Өфө ҡалаһының, Башҡортостандың үҫеше тураһында һәм шулай уҡ Өфө тураһында инглиз телендә матур фильм алып барҙыҡ. Уны ҡарағандан һуң йыйылыусылар беҙҙәге матурлыҡҡа хайран ҡалыуын белдерҙе һәм, Рәсәйҙең ҡайһы ерендә, тип ҡыҙыҡһына башланылар. "Уралда, Рәсәйҙең ҡап уртаһында, килегеҙ", тиеш. Индонезия, Сингапур, Мали, Сомали, Һиндостан илдәре вәкилдәре килергә теләк белдерҙе. Сөнки башҡорт балы, ҡымыҙы, ҡурайы, республиканың баш ҡалаһы менән бик ҡыҙыҡһындылар. Беҙҙең менән дуҫ булырға теләүҙәрен күрһәттеләр. Шулай сит илдәргә йөрөгәндә беҙ республиканың матурлығын, унда күп милләттәрҙең дуҫ һәм татыу йәшәүен, мәҙәниәтебеҙҙең юғары кимәлгә күтәрелеүен, халыҡ ынйыларын, милли уйын ҡоралдарыбыҙҙы, фольклорыбыҙҙы күрһәтәбеҙ. Төрлө сувенирҙар, китаптар, видеотаҫмалар һ.б. күргәҙмә материал таратабыҙ һәм донъяла Башҡортостан тигән республика ла барлығын белдерәбеҙ, уны танытабыҙ, уның мәртәбәһен арттырабыҙ.

**➔ Тиҙҙән Яңы йыл етә, ул байрам ғына түгел, үткән осорға йомғаҡ яһау мәле лә. Үҙегеҙ ҡураторлыҡ иткән өлкәләрҙең эшмәкәрлегенә ҡыҫҡаса ғына байҡау яһап үтһәгеҙ ине.**

- Мин яуаплы булған гуманитар өлкәлә һәр бүлек үҙ йүнәлеше буйынса эшләй. Мәҙәниәт өлкәһендә шул уҡ "Мираҫ" ансамбле донъя кимәлендә билдәлелек яулай, баш ҡалала уҙған төрлө сараларҙы беҙҙәй, китапханалар халыҡҡа аң-белем тарата, мәғрифәтселек менән шөғөлләнә. Мәғариф өлкәһен алһаҡ, 2016 йылда ЮНЕСКО буйынса Өфө иң белем алыусы (самый обучающийся город) ҡалалар исемлегенә Рәсәйҙән берҙән-бер ҡала булып инеп, мәғариф системаһында алға китеү, тыуҙырылған шарттарҙы дөрөҫ ҡулланыу, балаларға дөрөҫ тәрбиә һәм белем биреү йәһәтенән донъяға танылдыҡ. Ирландияға ла шул йүнәлеш буйынса барырға тура килде.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Әңгәмә аҙағында Сынтимер Биктимер улы быйылғы уҡыу йылында бар халыҡты борсоуға һалған туған телдәр уҡытыу мәсьәләһенә лә ҡағылды. "Баш ҡалала ата-әсәләрҙең, йәмәғәтселектең тырышлығы арҡаһында мәктәптәрҙә туған телдәрҙе, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу буйынса мәсьәләне артыҡ тетрәнмәй генә көйләй алдыҡ, - тине ул. - Киләсәктә лә ошо позицияларҙы һаҡлаясаҡбыҙ, сөнки республика Башлығы Рөстәм Хәмитов нигеҙенә телдәрҙе һаҡлап ҡалыу, артабан үҫтереү, тейешле шарттар тыуҙырыу идеяһы һалынған Башҡортостандың дәүләт телдәрен һәм республика халыҡтары телдәрен үҫтереү буйынса матур Указ ҡабул итте. Башҡорт телен уҡытыу, уны донъя кимәлендә танытыу, ниндәйҙер креатив фекерҙәр табыу йәһәтенән эштәр күп әле. Был тәңгәлдә бөгөнгә ҡаҙаныштар менән генә сикләнеп ҡалмабыҙ, артабан да ошо изге бурысты үтәү өсөн тейешле саралар күрербеҙ, тип уйлайым..."**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

✓ *Феодаль дәүләттең дүрт быуатлыҡ иҙеүе ғәйнә башҡорттарының рухын һындыра алманы, улар башҡорт теленең үҙенсәлекле төньяҡ-көнбайыш диалектын, мәҙәниәтен, йола-традицияларын һаҡлап ҡала алды.*



*ТАРИХ АУАЗЫ*

**Бөйөк Ваҡыт даръяһының хәҙер инде алыҫта ҡалған 921-922 йылдарында Бағдад ҡалаһынан Ғәрәп хәлифәте илселеге сәркәтибе Ибн Фаҙландың Урта Иҙелгә (Урта Волгаға) сәфәре тураһында бәйән иткән тиҫтәләгән фәнни хеҙмәттәр донъя күргән. Шул хеҙмәттәрҙең иң төплөһө - күренекле тюрколог Әхмәтзәки Вәлидиҙең докторлыҡ диссертацияһы. Был хеҙмәт (уны немец теленән башҡортсаға Марат Исмәғилев ауҙарған) 1997 йылда "Ватандаш" журналының 7-се һанында баҫылып сыҡты. Әхмәтзәки Вәлидиҙең бер фаразы иғтибарымды йәлеп итте.**

# ИБН ФАҘЛАН ЭҘЕНӘН

Унда һорау шулай ҡуйылған: ғәрәп хәлифәте илсеһе 922 йылдың йәйендә Кама буйындағы Яуширмә йылғаһына уҡ килеп етмәнеме икән? Ғалим был һорауға яуап итеп былдай фаразды килтергән: Ибн Фаҙлан сәйәхәтнәмәһендә яҙылған Джавшир йылғаһының хәҙерге атамаһы Аҡтай булһа кәрәк. Аҡтай - Волганың һул ҡушылдығы, Түбәнге Каманан көньяҡтараҡ аға. Тимәк, саклабтар дәүләтендә ғәрәп илселәре Кама бассейнына, ундағы Яуширмә йылғаһына тиклем барып етмәгән? Һәм, ғөмүмән, кемдәр улар - саклабтар? Иҙел буйы болғарҙарымы? Әгәр шулай икән, ул сағында Ибн Фаҙлан юлъяҙмаһында ниңә "болғар" һүҙе бөтөнләй юҡ? Ә бәлки, бүләр этнонимы (мәғлүм ки, бүләр атамалы ырыу - башҡорттарҙың боронғо этник төркөмө) һәм болғар этник термины бер үк лексик берәмектең ике вариантылыр? Бында тағы шуныһы ла уйландыра: саклабтар иленә барып етер алдынан Ибн Фаҙлан мәжүси башҡорт ырыуҙарын (өс ырыуҙы) ҡайҙараҡ осратҡан - Ҡондорса йылғаһын сыҡҡасмы, әллә ҡайһы бер тарихсылар иҫбатларға ынтылыуынса, Бөгөлмә яғындағы тауҙарҙамы, йәғни Үрге Сәрмәсән ерендәме?



Бына ошо һорауҙар теҙмәһе мине Урта Волга еренә ғилми экспедицияға саҡырҙы. Юлға әҙерлек йыл оҙонона уҡ һуҙылды. Әйткәндәй, тикшереүҙәрҙе тәүҙә Бөгөлмә яҡтарынан башларға тип ниәтләп йөрөнөм. Әммә аҙаҡ кире уйланым: ғәрәп илселәре саклабтар дәүләтенә Үрге Сәрмәсән аша түгел, ә Түбәнге Сәрмәсәндең киңлектәрен төньяҡ-көнбайыш йүнәлештә киҫеп үтеп, 922 йылдың май айында барып етә.

Ибн-Фаҙлан сәйәхәтнамәһенән тағы шулар билдәле: Хорезм дәүләтенең төньяғындағы Джурджания ҡалаһынан Урта Волга үҙәнендәге кескенә Халджаһ һыуына тиклемге арауыҡты үткәндә илселәр бөтәһе 21 йылғаны кисеп сыға. Уларҙың шул йылғаларҙың тәүгеһен (сәйәхәтнамәлә ул һыу исеменең яҙылышы - Бгнды, был гидронимдың этимологияһы, минең ҡарашҡа, Байһун булһа кәрәк) нисегерәк кисеүҙәре тураһында Ибн Фаҙлан ошо мәғлүмәтте теркәгән: йылғаның ҡаршы яҡ ярына тәүҙә ҡоралды һуғышсылар (илселәрҙе һаҡлаусы яугирҙар) кәмәләрҙә йөҙөп сыға, сөнки ғәрәптәр башҡорттарҙың һөжүм итеү ихтималлығынан ҡурҡа.

Әйтергә кәрәк, Доныҙ тауҙарынан баш алған Байһун йылғаһының Ибн Фаҙлан дәүерендә башҡорттарҙың һәм төркмән ғуҙҙарының уртаҡ ыҙанын тәшкил итеүе минең "Башҡорттарҙың аҙ билдәле илдәре" тип аталған фәнни хеҙмәтемдә тулыһынса иҫбатланған (ҡарағыҙ: Раuил Исламшин. Башҡорттарҙың аҙ билдәле илдәре. Роман-гәзит. Өфө, 1998. 31-се бит). Ләкин рәсми фән Муғоджар тауҙарынан көньяҡҡа - Доныҙ тауҙарына таба ағыусы Саған йылғаһы менән Ибн Фаҙлан дәфтәрендә теркәлгән Бгнды (Бағынды, йәғни Байһун һыуы) йылғаһын бер үк ағым тип иҫәпләй. Ә бит бында хәҡиҡәт икенсе. Арал диңгеҙенең көньяҡ-көнбайыш ярҙарынан Ҡара бауыр тауҙарына (уларҙың әүәлге дөйөм атамаһы - Хорезм тауҙары) тиклемге территория (хәҙер унда Барһа килмәҫ сүллеге) ул алыҫ замандарҙа Арал диңгеҙенең бер өлөшөн тәшкил иткән.

Арал диңгеҙенең көньяҡ-көнбайыш ярҙарын Хорезм тауҙары итәктәре тәшкил иткәнлеген иҫбатлау маҡсатында мин боронғо бер сығанаҡтан - ғәрәп географы Гардизи (XI быуат) яҙмаһынан ҡыҫҡа ғына өҙөк килтереп үтәм: "... Что касается печенегов, дорога к ним выходит из Гурганджа (Джурджания, хәҙерге Куна Ургенч ҡалаһы тураһында һүҙ бара - **Р.И.**) на гору Хорезма, от этой горы идет к печенегам, подходит к озеру Хорезма, оставляя озеро по правую руку, оттуда идет до некоей сухой земли и пустыни и следует (по ней) девять дней. Каждый день или каждые два дня доходят до колодца, спускаются туда на веревке и достают воду вьючным животным. Когда наступает десятый день, доходят до источников и воды, там бывает охота на всякого рода птиц и джейранов, в эти шестнадцать дней дороги бывает мало травы" (Б.Н.Заходер. Каспийский свод сведений о Восточной Европе. Т.1, М.,1962. 70-ая стр.).

Өҙөктән күреүебеҙсә, Арал диңгеҙенең Хорезм тауҙарына яҡын булғанлығын Гардизи ап-асыҡ итеп әйтә.

Барһа килмәҫ сүллеге урынының электән Арал диңгеҙенең бер өлөшөн тәшкил иткәнлеген иҫбатларға ярҙам итеүсе дәлилдәр Ибн Фаҙлан сәйәхәтнәмәһендә лә бар:

1. Джурджаниянан 922 йылдың 3 мартында юлды дауам иткәс, илселәр беренсе көндөң кисен Замджан рабатына, йәғни Замджан ауылына килеп етә. Ә ул рабат, хәҙерге Шемаха ҡаласығы, Куна Ургенчтан көнбайышта, аралары - 60 саҡрым.

2. Замджанда ҡунып, иртәгәһен илселәр Джит рабатына барып етә. Ә ул төйәк, археологтар асыҡлауынса, Замджандан төньяҡ-көнбайышта булған, аралары 30 саҡрым.

3. Джитты уҙып, 10 көн асыҡ урындан барғас, илселәр урманға килеп етә. Әлбиттә, сүллектә урман үҫмәй, тимәк, ул урманға барып еткәнгә тиклем 10 көн оҙонона илселек ҡомлоҡтан түгел, даланан хәрәкәт иткән.

4. Ибн Фаҙлан сәйәхәтнамәһендә бик тә мөһим тағы шундай мәғлүмәт бар: Джурджания яҡтарында ҡар күп яуа. Ошо дәлилде нығытыу өсөн шуны ла билдәләп үтеү урынлы: XII быуаттың бөйөк географы Иҙриси яҙмалары ла Арал яҡтары яуым-төшөмгә бай тип билдәләй.

Ибн Фаҙлан сәйәхәтнамәһен тикшереүсе күпселек ғалимдар иҫәпләүенсә, саклабтар иленә барышлай ғәрәптәр Ырғыҙ йылғаһын да (Волганың һул ҡушылдығы) үтеп китә. Ләкин бында минең тикшереүҙәр икенсе һөҙөмтә бирә. Хәҡиҡәт шул: Яйыҡтың уң ҡушылдығы Саған аша сыҡҡас, илселәр һул яҡҡа табан, йәғни Ырғыҙ йылғаһы бассейнына табан китмәй, юлын төньяҡ йүнәлештә дауам итә һәм тиҙҙән Жаха (Саха) йылғаһына барып етә. Оло Быҙаулыҡ йылғаһының был ҡушылдығы исемен Ибн Фаҙлан үҙенең юл дәфтәренә Ырғыҙ тип түгел, ә Азхн тип теркәгән. Аңлашыла ки, был ике гидроним, Азхн һәм Ырғыҙ, үҙҙәренең фонетик ҡоролошо яғынан бер-береһенә яҡын түгел, тимәк, улар икеһе ике йылға атамаһы. Быны Ырғыҙҙың иң ҙур ҡушылдығы Кәрәлек тип аталған икәнлеге лә ышаныслы раҫлай. Әгәр ҙә илселәр Ырғыҙҙы аша сыҡһа, улар бик тиҙҙән Кәрәлеккә барып етер ине. Әммә сәйәхәтнәмәлә Кәрәлек йәки шул исемгә оҡшаш икенсе бер гидроним бөтөнләй телгә алынмай.

Бик ҙур ауырлыҡтарға дусар булып, Яйыҡты йөҙөп сыҡҡандан һуң, илселәр йөҙ илле саҡрымдан ашыу ерҙе бары тик төньяҡ йүнәлештә бара. Ә был мәғлүмәтте асыҡлауға шул яҡтарҙағы ике ҙур ғына йылғаның бер исемдә булыуы ярҙам итте. Һүҙ бында Быҙаулыҡ /гидронимдың этимологияһы - Өбөйәс йылғаһы өйө. Йылғаның тәү исеме - Өбөйәс/ йылғалары тураһында бара. Уларҙың береһе Оло Быҙаулыҡ, икенсеһе - Кесе Быҙаулыҡ.

Иҫбатлауымса, Жаха ерен үткәс, илселәр Кесе Быҙаулыҡҡа барып етә (ул һыуҙың исеме Ибн Фаҙландың яҙмаһында - Баджаг, ә хәҙерге документтарҙа - Бобровка). Оло Быҙаулыҡ, Үрге Һамар ҡарағай урмандары менән күптәнге ҡыҙыҡһыныуым ошо хәҡиҡәтте эҙләп табырға ярҙам итте. Урта Яйыҡ, Үрге Һамар далаларын ҡоро елдәрҙән һаҡлаусы ошо урмандарҙың хәҙерге майҙаны йөҙ мең гектар самаһы. Был уникаль йәшеллектең төп кварталдары - Оло Быҙаулыҡтың уң яғында һәм Һамар йылғаһының уң ҡушылдығы Боровка йылғаһы бассейнында. Ҡыҫҡаһы, Жаха йылғаһының һул ярына сыҡҡас, хәлифәт илселәре артабан да үҙенең сәфәрен төньяҡ йүнәлештә, йәғни дала киңлектәренән дауам итә (илселәрҙең каруанында бөтәһе өс мең дөйә һәм ат була, һәм, әлбиттә, шул тиклем мал-тыуар менән ҡалын урмандарҙы йырып сығыу ауырға тура килер ине).

**Рауил ИСЛАМШИН.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Ғәйнә

Ғәйнә ҡәбиләһе иң боронғоһо һәм һан буйынса иң күбе һанала. Улар төньяҡ-көнбайыш Уралда юрмый, йәнәй, бүләр, кеселәр менән тығыҙ аралашып көн күргән. Ғәйнә ҡәбиләһе этнонимдары - байлар, истәк һ.б. Ғәйнәләр берҙәм халыҡ булараҡ, йәнәйҙәр, таныптар, ундар кеүек боронғо уғыр-башҡорттарына ҡарай.

Болғар осоронан башлап болғарҙар менән башҡорттарҙың ҡушылыуы һөҙөмтәһендә көнбайыш Урал башҡорттарының яңы төркөмө башҡорт-болғарҙар барлыҡҡа килә. Башҡорттар Болғарҙа, Хазар ҡағанатында, Иртыш һәм Иҙел йылғалары араһында күпселекте тәшкил итеп, халыҡ-ара сауҙа мөнәсәбәтендә мөһим урынды биләгән.

Ҡаҙан ханлығы осоронда Ибраһим хан 1468 йылдағы хәрби походында еңеүгә өлгәшә һәм урта Кама буйынан алып Чусовая йылғаһына тиклем, Каманың уң яҡ ярындағы ғәйнәләр биләмәһен ҡул аҫтына ала. Ғәйнәләрҙең төп ерҙәре Уса юлында тороп ҡала. Шул уҡ ваҡытта 1468 йылда Ибраһим хан ғәскәренең төп өлөшөн башҡорттар тәшкил итә.

Ғәйнәләр үҙҙәренең боронғо биләмәһен ҡалдырып китергә мәжбүр була. Төньяҡ-көнбайыш Башҡортостандағы иң эре башҡорт ҡәбиләләренең береһе һаналған ғәйнәләр "үҙҙәренең ата-бабаларының сығышын Минзәлә яғынан күсеп килеүсе болғарҙарҙан тип иҫәпләй". Ғәйнә башҡорттарының төп өлөшө Танып йылғаһының урта ағымында көн итеп, XIII-XIV быуаттарҙа йылға үренә табан йүнәлеп, Сылваның Камаға ҡойған еренә тиклем барып етә.

Ғәйнә улысы башҡорттары боронғо уғыр ҡәбиләләренә туранан-тура барып ялғана, тип иҫәпләй ғәйнә башҡорто Ә.Н. Кирәев үҙенең "Башҡорт халҡының этногенетик легендалары һәм риүәйәттәре" тигән хеҙмәтендә. Р.Г. Кузеев та уның фекерен хуплай.

Ғәйнә башҡорттары X быуатта Сылва һәм Кама йылғалары ҡушылған Шырҙан ханлығының көньяғында йәшәй. Уларҙың Танып йылғаһы буйлап төшөүе билдәле. Һуңынан унда ҡатайҙар һәм ҡыпсаҡтар күсеп килә башлағас, ғәйнәләр төньяҡҡа китә. Хәҙерге заманда ғәйнә ырыуы башҡорттары Башҡортостандың Асҡын, Тәтешле райондарында, Пермь крайының Барҙым, Көйәҙе, Пермь райондарында йәшәй. Мәҫәлән, 1989 йылғы халыҡтың иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса Барҙым районының Тулва йылғаһы буйында 49 мең башҡорт йәшәгән.

Башҡорт ихтилалдарын, крәҫтиәндәр һуғышын аяуһыҙ баҫтырыу, феодаль дәүләттең дүрт быуатлыҡ иҙеүе ғәйнә башҡорттарының рухын һындыра алманы, улар башҡорт теленең үҙенсәлекле төньяҡ-көнбайыш диалектын, мәҙәниәтен, йола-традицияларын һаҡлап ҡала алды. Әммә башҡорт ҡәбиләләренең тарихи ерҙәрендә ситтән килеүселәр менән тулыу сәбәпле улар элекке замандарҙағы һымаҡ ирекле үҫешә алмай. XX быуатта ғәйнәләр, ҡасандыр болғарҙар Ҡаҙан татарҙары булып киткән һымаҡ, башҡа эре башҡорт ҡәбиләләре һәм татарҙар араһында тороп ҡалды. Ғәйнәләр йәнәй, юрматы, юрмый ырыуҙары һымаҡ, көньяҡ Урал башҡорттарының төп өлөшө һанала, тип иҫәпләй ғалим С. Хәмиҙуллин.

**(Дауамы бар).**

***✓ Йәштәрҙең әҫәрҙәрендә иң сағыу сағылған тема - геройҙың яңғыҙлығы. Ул кешеләр араһында йөрөп тә, йәмғиәттә аралашып йәшәп тә - яңғыҙ. Диалогтар ҙа күпкә ҡыҫҡа, монологтар юҡ хәлендә, ике, өс телдә аралашҡан сәхнәләр ҙә бар.***

**Бер заман йәмғиәттә ветерандарҙы, хаҡлы ялдағыларҙы, һәләтлеләрҙе, фекерҙәштәрҙе һәм башҡа күп төрлө уртаҡ эштәр һәм уйҙар менән йәшәүселәрҙе берләштереүсе ойошмаларҙың хәле ҡыл өҫтөндә ҡалды. Был, үҙенә күрә, йәмғиәттең тырым-тырағай булып тарҡала башлауының бер күренеше ине. Әммә, бәхеткә күрә, был хата ваҡытында аңлап ҡалынды һәм предприятиелар, учреждениелар янындағы ойошмаларға ҡабаттан йән өрөлдө. Ошо уҡ яҙмыш Бәҙәр Йосопова исемендәге Актерҙар йортонда урынлашҡан БР Театрҙар эшмәкәрлеге союзын да урап үтмәне. Бөгөн Союзды Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла Ғаззали улы ҮТӘШЕВ етәкләй, ә Актерҙар йорто директоры вазифаһын Әлиә Дамир ҡыҙы ЯХИНА башҡара. Улар менән дөйөм театр донъяһы тураһындағы һөйләшеү гәзит уҡыусыларға ла ҡыҙыҡлы булыр, тип уйлайбыҙ.**

# ИЖАД ИТЕҮ

## балаларҙа ла,

**Хөрмәтулла Ғаззали улы, был ойошмаға күптән түгел генә рәйес итеп билдәләнһәгеҙ ҙә, һеҙ бында яңы кеше түгел, шулай бит? Моғайын, актер булып эшләй башлағандан был идаралыҡ ағзаһылыҙҙыр?**

**Хөрмәтулла Үтәшев:** Мин был ойошмала, яңылышмаһам, 1989 йылдан теркәлгәнмен. Бығаса Театрҙар эшмәкәрлеге союзына ағза булып инеү өсөн ун йылдан артыҡ хеҙмәт тәжрибәһе талап ителә ине. Был йәштәр өсөн үҙенә күрә яһалма кәртә булып торҙо һәм ошо тәртип Союз ағзаларының артыҡ ологайып китеүенә килтерҙе. Бөгөн иһә, йәш актерҙар бер йылдан ашыуыраҡ эшләгән осраҡта, ойошмаға инеүгә ғариза яҙа ала. Йәғни, республикалағы бөтә театрҙар һәм уҡытыу учреждениелары, мәҙәниәт өлкәләрендә эшләгән кешеләр ошо йәмәғәт ойошмаһында берләшә ала. Ойошма ниндәйҙер үтә етди матди мәсьәләләрҙе хәл итмәһә лә, махсус положениелар нигеҙендә төрлө ярҙамдар ҙа ойоштора, йәшәйештең иғтибар талап иткән социаль проблемаларын хәл итешә, әммә театр белгестәрен профессиональ яҡтан камиллаштырыуға булышлыҡ итеүҙе иң беренсе рәткә ҡуя. Был тәңгәлдә беҙ актер оҫталығы, сәхнә теле, грим һалыу, костюм тегеү, ут яҡтыртыу һәм сәхнә өсөн бөтөн кәрәк-яраҡты әҙерләүсе мини цехтар хеҙмәткәрҙәрен әҙерләүгә тиклем хеҙмәттәрҙе күҙ уңында тотабыҙ. Быларҙан тыш, байрамдарҙы, бергә билдәләй торған сараларҙы, театр көндәрен, миҙгел асыу тантаналарын һәм ошондай ғына ла ундан ашыу йолаларыбыҙҙы даими рәүештә үткәреп киләбеҙ. Унан ҡала, спорт уйындарына ла ваҡыт табыла. Волейбол, футбол ярыштарын, һабантуйҙарҙы, тәбиғәткә сығыуҙы көтөп ала ойошма ағзалары.

Идаралыҡ эргәһендә йәштәр ойошмаһын да барлыҡҡа килтерҙек. Һәр театрҙан икешәр кеше, айына бер-ике тапҡыр күрешеп, үтәсәк саралар хаҡында кәңәшләшеп, ижади, социаль проблемаларҙы асыҡлап, юбилей һәм башҡа коллективтар араһындағы календарь даталарҙы билдәләп торабыҙ. Йәштәр менән заманса темаларға уҡыуҙар, сәхнә теленең норматив булмаған телмәрҙәрен үҙләштереү, яңы алымдар менән уйнау, элекке әҫәрҙәрҙе яңы күҙлектән асыу кеүек эштәр менән дә шөғөлләнәбеҙ. Заман драматургияһы һәм режиссураһы үҙәге лә әүҙемләшкәндән- әүҙемләшә бара. Яңы сәхнә әҫәрен тамашасы алдына әҙерләп сығарыу ул бик ҙур сығымдар талап итә. Ә беҙ тап бына ошо хеҙмәтте еңеләйтеүҙең бер юлын ҡулланабыҙ. Пьесаны тамашасыға уҡып, ниндәйҙер кимәлдә уйнап та күрһәтәбеҙ. Шул ваҡыт тамашасы үҙ фекерен дә әйтә ала. Тыңлаусылар өсөн ҡыҙыҡлы түгел икән, яңыһын эҙләйбеҙ. Ыңғай һөҙөмтә алғанда, был әҫәрҙе планға индереп ҡуябыҙ. Әлбиттә, ойошма эшмәкәрлеген тулыһынса бәйән иткәндә, ул көн оҙоно һөйләшеүҙә лә бөтмәҫ ине. Бында тотош бер тормош, йәшәйеш ҡайнай.

**Бөгөнгө театр хаҡында һөйләшкәндә йыш ҡына, драматургтар юҡ, драмалар, сәхнә әҫәрҙәре етешмәй, тигәнде ишетергә тура килә. Театр донъяһын күҙәтеп барғанда яңы авторҙар исеме лә йыш күҙгә ташлана һымаҡ. Ысынлап та ҡытлыҡмы пьесаларға, әллә был нигеҙһеҙ хәбәрҙәрме?**



**Әлиә Яхина:** Драматургия беҙҙең театрҙарҙың төп нигеҙе. Драматургия булмаһа, көн геройы булмаһа, театр ҙа юҡ, тигән һүҙ. Бөгөн ҡайһы театрҙың режиссеры йәки художество етәксеһе менән барып һөйләшеп, хәлдәрен һорашып ҡараһаң да, улар иң беренсе сиратта, бөгөнгө көн кисерештәрен сағылдырған геройҙар юҡ, тип әйтәсәк. Был, әлбиттә, беҙҙең театрҙар ғына проблемаһы түгел, бөтөн Рәсәй буйынса бара ул заманса сәхнә әҫәре эҙләү. Шулай ҙа мәсьәләне хәл итеү юлы юҡ түгел, әле һуңғы ваҡытта "Урал драматургияһы" тигән яңы һулыш тойола. Беҙ ҙә был яңылыҡты тотоп алырға тырышып, йәштәребеҙҙе Екатеринбург ҡалаһына уҡырға ебәреп алдыҡ. Ошо тәңгәлдә, драматург өйрәнеп кенә ижад итә аламы, тип һорарһығыҙ. Беҙ ҙә был хаҡта аҙ уйланманыҡ. Яҙыусыны драма әҫәре яҙырға өйрәтеп буламы, әллә уның тәбиғи һәләтенә генә таянырғамы, тигән һорау бер бөгөн генә борсомай. 2014 йылда беҙ режиссер Зиннур Сөләймәнов менән шундай проект ойоштorҙоҡ. Беҙгә халыҡ араһынан милли телдә яҙа белгән яҙыусылар кәрәк ине. Тәржемә бар, әлбиттә, тәржемә итерлек әҫәрҙәр ҙә килеп тора. Әммә тәржемә ул - тәржемә. Ул драматург тарафынан икенсе телдә фекерләнеп ижад ителгән. Нисек кенә иткәндә лә, ул тамашасы тарафынан тойола. Һәм ошо мәсьәләне хәл итеү маҡсатынан йыл да пьесалар бәйгеһе иғлан итә башланыҡ. Бында пьеса яҙып ҡарарға теләгән һәр кем үҙ ижадын тәҡдим итә ала. Уларҙың һәр береһе ентекләп ҡарала һәм күҙаллау өсөн йәштәр тарафынан өлөшләтә сәхнәләштерелә. Бында ла иң башта башҡорт телендә яҙылған әҫәрҙәргә иғтибар итәбеҙ. Бына шулай итеп Драматургия һәм режиссура үҙәге барлыҡҡа килде.

Тағы ла драма яҙыусыларға урап ҡайтҡанда, үкенескә күрә, улар йылдан-йыл аҙая. Шунлыҡтан, бына ошо конкурсҡа килгән һәм һәләте тойомланған йәштәрҙе сәхнә әҫәре яҙыуға өйрәтмәксебеҙ. Бында әҫәр бик ентекле анализлана. Уны Мәскәүҙән килгән юғары белгестәр тыңлай, төҙәтмәләр индерә, кәңәштәрен бирә. Бына ошо юҫыҡта беҙ драматургтарҙы үҫтереп алырға була икәнен иҫбатламаҡсыбыҙ.

**Башҡорт телендәге сәхнә әҫәрҙәренә, милли рух төшөнсәләренә өҫтөнлөк бирәбеҙ, тинегеҙ. Шулай булғас, ниңә бындай әҫәрҙе Мәскәүҙән килгән кеше баһалай? Уға беҙҙең тамашасыға яҡын булған төшөнсәләр аңлашыламы икән?**

**Әлиә Яхина:** Драматургия ҡанундары бит шул килеш ҡала, улар бөтә телдәргә лә, бөтә театрҙарға ла уртаҡ. Һәм был осраҡта ла Мәскәү белгестәре тап техник яҡты билдәләй. Тағы ла, Драматургия һәм режиссура үҙәгендә сәхнәгә сығыу кимәлендәге әҙер пьеса уйналмай. Бында ниндәйҙер айырым сәхнәләштереү өлөштәре, сюжеттарҙы күрһәтеп ҡарау, миниатюралар өҫтөндә эшләү, йәғни төрлө сәхнә алымдарын ҡулланыу, уларҙы миҫалдарҙа күрһәтеү һәм анализлау маҡсат итеп ҡуйыла. Саҡырылған эксперттарыбыҙ ҙа осраҡлы ғына кешеләр түгел. Улар региондар менән күптән эшләп оҫтарған шәхестәр. Мәҫәлән, эксперт комиссияһы рәйесе Валентина Федорова туҡһанынсы йылдарҙан уҡ был эштең башында тора. Яҙыусылар ойошмаһы менән берлектә улар ошонда, Башҡортостанда, Талҡаҫ күле буйында, башлап яҙыусы драматургтарға аҙна-ун көн буйып сәхнә әҫәрҙәрен яҙыу серҙәрен өйрәтә. Шул осорҙа театр афишаларын исемдәре менән биҙәгән Сөләймән Латипов, Тамара Ғәниева, Таңсулпан Ғарипова, Рәлиф Кинйәбаев кеүек драматургтар үҫеп сыға. Уларҙан һуң бер аҙ торғонлоҡ осоро булып алды. Әле беҙ шул башланғысты киренән яңыртып, саҡ ҡына икенсерәк юҫыҡта эш алып барабыҙ. Алда әйтеп үткәнемсә, семинарҙар бары тик теоретик формала ғына үтмәй, был эшкә режиссер лабораториялары ла әүҙем ҡушыла. Тәүгә эштәрен алып килгән йәки былтырғы, элекке йылғынан алып ҡайтҡан әҫәрҙәрен камиллаштырған авторҙарҙың яҙғанынан эскиздар сәхнәләштерелә һәм шунда инде уның бөтөн етешһеҙлектәре лә, оҫталығы ла күҙ алдына баҫа. Бына был шундай бер мәктәп булып тора.

**Йәш драматургтарҙы, режиссерҙарҙы күберәк ниндәй темалар ҡыҙыҡһындыра? Ниндәй проблемаларҙы сәхнәгә сығарыуға ынтыла улар? Әйтер һүҙҙәре, күрһәтер яңылыҡтары бармы?**

**Әлиә Яхина:** Драматургия һәм режиссура үҙәгендә йәш автор Дамир Йосоповтоң "Ҡырмыҫҡа иләүе" пьесаһы баштағы бер семинарҙа тулыһынса пыран-зыран килтереп ташланған булһа, киләһе йылдарҙа ул уны ҡоршай-ҡоршай формалаштырып, тулы бер сәхнә әҫәре итеп яҙыуға өлгәште һәм был пьеса Салауат театрында донъя күрҙе. Йәки Шәүрә Шәкүрованың "Олюшканың бәхете" тигән драмаһы башта бөтөнләй икенсе исем һәм икенсе образдар менән тәҡдим ителгәйне. Яйлап кәңәшләшә-кәңәшләшә, айырым өлөштәрен сәхнәлә ҡарай-ҡарай, өйрәтеүсе тренингтарҙы тыңлай-тыңлай, авторҙың башында яңынан-яңы уй-фекерҙәр өлгөрөп етеп, өр-яңы әҫәр әҙер булды.

Үҙәктә үҫеп сыҡҡан драматургтар Рәсәй кимәленә лә сыға, төрлө конкурстарҙа ҡатнашалар, бәлки, әлегә артыҡ маҡтанырлыҡ күрһәткестәр ҙә юҡтыр, әммә улар ҡул ҡаушырып ултырмай, яҙалар, ижад итәләр. Ангиза Ишбулдина беҙгә егерме бер генә йәшендә килде. Былтыр уның пьесаһы Рәсәйҙең ун иң яҡшы пьесаларының исемлегенә индерелде. Марат Мөхлисовтың бер пьесаһын Екатеринбургтың "Урал" журналына баҫырға алдылар.

Йәштәрҙең әҫәрҙәрендә иң сағыу сағылған тема - геройҙың яңғыҙлығы. Ул кешеләр араһында йөрөп тә, йәмғиәттә аралашып йәшәп тә - яңғыҙ. Ҡасандыр башҡорт театрҙары өсөн һуғыш юлы үтеп ҡайтҡан драматургтар тарафынан яу юлы, унан һуңғы күтәрелеш йылдары, шул хәл-ваҡиғалар эсендә ҡайнашҡан яҙмыштар темаһы иң күркәм күренеш булһа, бөгөнгө геройҙың эске донъяһы бөтөнләй икенсе. Элекке пьесаларға монологтар, оҙон телмәрҙәр хас булһа, хәҙер телмәрҙең дә ритмы үҙгәреп китте. Аңғарыуыбыҙса, диалогтар ҙа күпкә ҡыҫҡа, монологтар юҡ хәлендә, хатта ике, өс телдә аралашҡан сәхнәләр ҙә бар. Ваҡиғалар барышы ла, идея-тематика ла ирекле ағымға ҡуйылған. Нисек кенә әйткәндә лә, йәштәр мобиль темпта, лирик сигенеүҙәрһеҙ, эпилог-прологтарһыҙ һәм башҡа нюанстарһыҙ ҙа тулы күренештәр килтереп сығара беләләр. Тамашалар антрактһыҙ, сәғәт ярымда түңәрәкләп тә ҡуйыла. Был да бер яңылыҡ һәм традицион, ҡалыплашҡан сиктәрҙе емереп, саф һулыш алып килә, минеңсә.

Яңы заман геройы эҙләп, Урал аръяғы райондарында ижади эҙләнеүҙәрҙә булғайныҡ. Беҙҙең менән Өфө сәнғәт академияһы студенттары ла барҙы һәм ошо сәйәхәттән "вербатим" тип аталған документаль жанрҙағы сәхнә әҫәре килеп сыҡты. Бында үҙҙәренең ауылдарының фольклорын күрһәтергә йый-

***Балалар менән эшләүебеҙҙең маҡсаты нимәлә? Беренсенән, маҡсат - туған телебеҙҙе өйрәтеү, өйрәнеү, һөйләү телмәрен үҫтереү. Икенсенән, баланың дикцияһын дөрөҫ итеп ҡуйыу, төрлө тел ҡытыршылыҡтарынан арындырыу, интонациялы, шыма һөйләү һәм ораторлыҡ алымдарына өйрәтеү. Өсөнсөнән, тартыныу ғәҙәттәренән арындырыу, комплекстарына ҡаршы көрәшергә өйрәтеү. Дүртенсенән, кеше алдында үҙеңде тотоу серҙәренә төшөндөрөү, хәрәкәт, кәүҙәне тотоу, ҡараш, ҡул хәрәкәттәре менән идара итеү һ.б.***

***✓ Барыбер ҙә кеше театрға ниндәйҙер эске таҙарыныу, рухи күтәрелеш эҙләп бара бит. Ғәҙәттә, күңелен юшҡын баҫып киткән, был тормошта нисектер ваҡланып, тарҡалып киткәндәй булғанда иҫкә төшә ошондай урын.***

# ҺӘЛӘТЛЕГЕН...

## ололарҙа ла үҫтерәү кәрәк

ылған ауыл ҡатындарының тарихтары сағылдырыла. Был эксперименттың мәғәнәһе нимәлә? Бында хәл-ваҡиғаны автор яҙмай, ә геройҙар үҙҙәре һөйләй. Һәм шундай тетрәткес тарихтарҙы тотоп ала белә улар. Үткән быуат хәлдәре һөйләнһә лә, улар беҙҙең бөгөнгө заман кешеләре, бөгөнгө геройҙар бит. Ошо спектакль менән йәштәребеҙ республиканың "Театр яҙы" фестивалендә ҡатнашыу хоҡуғы алдылар һәм уларға юғары баһа бирелде.

**Балалар менән эшләү ҙә юлға һалынған, ахыры, һеҙҙә? Интернет селтәрҙәрендә мәктәп балаларының сәхнәлә уйнауҙарын һәм улар араһында билдәле актерҙар ҙа булыуын йыш аңғарырға була. Нисек ойошторола был эштәр һәм балалар менән хеҙмәттәшлек итеүҙең маҡсаты нимәлә?**

**Хөрмәтулла Үтәшев:** Балалар менән драма түңәрәктәре башлап ебәргәс, бер йыл самаһы улар ошонда, Актерҙар йортона йөрөнө. Унан, балаларға дәрестәрҙән һуң йөрөү ауырлашҡандай булғас, Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһына йөрөп дәрестәр үткәрә башлағайныҡ. Ҡыҙғаныска күрә, әлегә унда дәрестәр туҡталып тора. Нимә әйтергә теләйем, ата-әсәләр араһында һүлпәнлек көслө, улар был эштең мөһимлеген аңлап етмәй, ахыры. Әлеге мәлдә Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында, Дим биҫтәһендәге 102-се башҡорт гимназияһында, Шамонино ҡасабаһындағы мәктәптә түңәрәктәребеҙ эшләп килә. Бигерәк тә Шамонинола балалар әүҙем. Былтыр улар менән "Маугли" спектаклен сәхнәләштергәйнек, быйыл "Муха-цокотуха"ны башҡортса ҡуйып йөрөйбөҙ.

Балалар менән эшләүебеҙҙең маҡсаты нимәлә? Беренсенән, маҡсат - туған телебеҙҙе өйрәтеү, өйрәнеү, һөйләү телмәрен үҫтереү. Икенсенән, баланың дикцияһын дөрөҫ итеп ҡуйыу, төрлө тел ҡытыршылыҡтарынан арындырыу, интонациялы, шыма һөйләү һәм ораторлыҡ алымдарына өйрәтеү. Өсөнсөнән, тартыныу ғәҙәттәренән арындырыу, комплекстарына ҡаршы көрәшергә өйрәтеү. Дүртенсенән, кеше алдында үҙеңде тотоу серҙәренә төшөндөрөү, хәрәкәт, кәүҙәне тотоу, ҡараш, ҡул хәрәкәттәре менән идара итеү һ.б. Ҡайһы бер ата-әсәләр "Балаларыбыҙ барыбер артист булмаҫ", тип, балаларын бындай түңәрәктәргә йөрөтөүгә ҡаршы килә. Был балаларҙың артист буларға тейешлеге күҙ уңында тотолмай ҙа. Бындай түңәрәктәр менән киләсәк быуындарҙа театрға йөрөрлөк тамашасы тәрбиәләй алһаҡ та ҙур бәхет булыр ине. Ә иң беренсе сиратта был - балаларҙың үҙҙәрен һәм рухтарын тәрбиәләүсе, үҫтереүсе, камиллаштырыусы бер сара ул. Быны аңлаған ата-әсәләр ҙә бар, улар балаларының күңелендәге, психологик торошондағы яҡшы яҡҡа булған үҙгәрештәрҙе күрәләр. Бөгөн телде һаҡлап ҡалыуҙы тел дәрестәренә һәм әсбаптарына ғына ҡайтарып ҡалдырырға ярамай. Мәҫәлән, Ҡаҙағстанда туған телде үҫтереүҙә ошондай мәктәптән тыш булған коммерция йүнәлешле түңәрәктәр, ойошмалар күп һәм емешле эшләй. Һәм, көнләшерлек, халыҡ балаларын түләп ошондай ерҙәргә йөрөтә, һәр ғаилә балаларында ниндәйҙер милли сифаттар күрергә теләй. Беҙҙекеләр иһә һаман "ҡурҡыныс беҙгә янамай әле" тигән фекерҙә йәшәп ята бирә... Был миллилекте һаҡлаусы алымдар тап театр өлкәһендә генә лә булмаҫҡа мөмкин, шул уҡ рәссамдар, милли кейем тегеүселәр, ҡобайырсылар, шиғыр ижад итеүселәр ҙә был эште башҡара ала.

**Әле һеҙ әйткән дәрестәрҙе ололарға ла тәҡдим итергә мөмкин бит? Мәҫәлән, дөрөҫ һөйләй белеү йәки үҙеңдә әртислектә һынап ҡарау, бәлки, күптәрҙең хыялылыр?**

**Хөрмәтулла Үтәшев:** Шамонино ҡасабаһында ата-әсәләр йыйылышы үткәреп, балалары өйрәнгән һөнәрҙәрҙе күрһәттек һәм бер юлы аңлатыу эштәре алып барҙыҡ. Ошо саранан һуң ҡайһы бер ата-әсәләр: "Ә ниңә беҙ ҙә йөрөмәйбеҙ һуң был түңәрәккә?"- тигән теләк белдереп, бер унлап ата-әсә шөғөлләнә башланы. Әгәр шундай теләктәре булғандар йыйылһа, ата-әсәләр менән дә был эште ойошторорға мөмкин, ниңә булмаһын!

**Мәктәп балалары араһында тағы ла бер проектығыҙ билдәле шикелле, Әлиә Дамир ҡыҙы?**

**Әлиә Яхина:** Эйе, "Драм-квадратик" тип атала ул. Был проект өсөн беҙ мәктәптәрҙән үҫмерҙәр һайлап алдыҡ. Яҙышҡан, әүҙем балаларҙы түгел, ә тап киреһен, аҙ аралашҡан, ниндәйҙер комплекстарға дусар булған, башҡалар менән уртаҡ тел табып бармағандарҙы һайларға тырыштыҡ. Һәм ошо балалар бөтөн эске кисерештәрен ҡағыҙға төшөрә барҙы. Был эште Ангиза Ишбулдина ойошторҙо. Һәм, әйтергә кәрәк, проект бик уңышлы булып сыҡты. Ололар етәкселегендә ижад иткән балаларҙың эштәре күптәрҙең башына ла килмәҫлек көтөлмәгәнлектәр, берҡатлылыҡ, сафлыҡ, эскерһеҙлек менән һуғарылғайны. Был яҙмаларҙы республиканың төрлө театры артистары сәхнәләштерҙе һәм балалар үҙҙәренең яҙғандарын уйын мәлендә күреп, түбәләре күккә тейҙе.

Бына ошо проектҡа ла беҙ балалар эҙләйбеҙ. Нимәһе борсой? Бөгөнгө аңлы, белемле балаларҙа ижад итеү һәләтлеге йомшарыраҡ. Был кешелек өсөн оло юғалтыу буласаҡ. Шунлыҡтан, балаларыбыҙҙа был һәләтлете юғалтмаҫҡа, үҫтерергә кәрәк.



**Заман авторҙары һәм заман драматургтары тәҡдим иткән әҫәрҙәр, әле әйтеп үтелгән коллаждар, миниатюралар һәм башҡалар зауыҡлы тамашасының ихтыяжын ҡәнәғәтләндерер микән? Мин, мәҫәлән, тулы сюжетлы, туйғансы ҡарарлыҡ, аҙаҡтан уйлап йөрөрлөк драма яҡлы...**

**Әлиә Яхина:** Яңылыҡтарҙы өйрәнеү сәхнәнән классик әҫәрҙәрҙе, легендар драмаларҙы алып ташлау тигәнде аңлатмай.

***Әлегә тиклем театрҙар һәр кемдең зауығына хуш килерҙәй репертуар менән эшләне һәм был киләсәктә лә шулай буласаҡ. Әммә беҙгә бөгөн йәш тамашасыны ла күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Улар театрҙа үҙ зауығындағын да табырға тейеш. Әгәр уларға ҡыҙыҡ булмаһа, улар театрға ылыҡмаясаҡ. Бөгөн йәштәрҙе интернеттан, планшеттан һәм башҡа реаль булмаған донъянан айырып алыу өсөн ана шул донъянан да ҡыҙыҡлыраҡ башҡа шөғөлдәр кәрәк. Үкенескә күрә, бөгөн беҙҙең тамашасы ла аҙая бара. Беҙ уларҙы бөртөкләп сүпләп, йыйып, арбап алырға мәжбүр. Һәм был бик ҙур көс һәм хеҙмәт талап итә.***

Әлегә тиклем театрҙар һәр кемдең зауығына хуш килерҙәй репертуар менән эшләне һәм был киләсәктә лә шулай буласаҡ. Әммә беҙгә бөгөн йәш тамашасыны ла күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Улар театрҙа үҙ зауығындағын да табырға тейеш. Әгәр уларға ҡыҙыҡ булмаһа, улар театрға ылыҡмаясаҡ. Бөгөн йәштәрҙе интернеттан, планшеттан һәм башҡа реаль булмаған донъянан айырып алыу өсөн ана шул донъянан да ҡыҙыҡлыраҡ башҡа шөғөлдәр кәрәк. Үкенескә күрә, бөгөн беҙҙең тамашасы ла аҙая бара. Беҙ уларҙы бөртөкләп сүпләп, йыйып, арбап алырға мәжбүр. Һәм был бик ҙур көс һәм хеҙмәт талап итә.

Һәм икенсе мәсьәлә лә бар бында. Бала сағында, йәш сағында театрға йөрөп өйрәнмәгән кеше, олоғая бара, "Туҡта, театрға барып киләйем әле", тигән ҡарарға килмәйәсәк. Уның өсөн театр донъяһы юҡ. Күңелендә сәнғәткә урын булған баланы ата-әсә тәрбиәләй. Шуның өсөн һәр кемгә, алып килегеҙ балаларҙы үҙегеҙ менән эйәртеп, аңламаған осраҡта ла, сәхнәләге тамашаны ҡараһын, театр мөхитен, ундағы тәртиптәрҙе, ғәҙәттәрҙе күрһен, танышһын, тип әйтке килә. Сәхнә телен тыңлап ҡараһын, тере артистарҙың уйнағанын күрһен. Кино менән театр тамашаһының айырмаһын аңғарһын. Былар барыһы ла уға тик яҡшы йоғонто ғына яһаясаҡ, ышанығыҙ.

**Эйе, аңлашыла, бөгөн тамашасы бөртөклө тауар һәм ул театрҙар өсөн бик ҡәҙерле. Был хәл кинотеатрҙар өсөн дә, башҡа сәнғәт үҙәктәре өсөн дә шулайҙыр. Мәҫәлән, хәҙер кинотеатрҙар тамашасыға бөтөн уңайлыҡтарын да булдырырға теләп, залға һыра ла, попкорн да, уларға ҡушып, башҡа төр ашау-эсеү мөмкинлектәрен дә бирә. Шул сәбәпле, ҡасандыр мәғәни сара булған кино ҡарау йәмһеҙ бер күренешкә әйләнде. Ә театрҙа нисек? Матур кейенеп килеү, үҙеңде әҙәпле тотоу, һуңламау, тамаша мәлендә йөрөмәү, һөйләшмәү кеүек тәртиптәр күҙәтеләме хәҙер?**

**Хөрмәтулла Үтәшев:** Әлбиттә, элекке тәртиптәр хаҡында һүҙ алып барып булмай хәҙер. Элек һуңлап килгәндәр залға инә алмай һәм театрға һуңлап барыу оят һанала ине. Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙҙар ҡыш көндәре лә алмаш аяҡ кейемдәре алып килә ине. Бер яҡтан, Мәскәү кеүек ҙур ҡалаларҙа театрға йөрөү модала итеп ҡабул ителә һаман һәм тамашасы үҙен элекке кеүек тота, кейенә. Үкенескә күрә, беҙҙә хәҙер икенсерәк күренеш. "Театр тәрбиәләй" тигән төшөнсә төшөп ҡалып бара. Аңлы тамашасы сәхнә әҫәренең үҙенә йоғонто яһай, уйландыра, хистәрен уята, тетрәндерә, фәһем бирә, һығымталар яһата, тәрбиәләй икәнен белә. Театрҙың ошо ролен юғалтмаҫҡа ине ул.

**Театрҙар ҡалаларҙа урынлашҡан. Уларға күберәк ҡала халҡы йөрөй. Ә милли һыҙатлы тамашаларҙың күбеһе ауыл тормошона, ауыл кешеләренә һәм дөйөм алып әйткәндә, ауыл психологияһына ҡоролған. Йәм табамы бынан ҡала кешеһе?**

**Хөрмәтулла Үтәшев:** Теләһә ниндәй әҫәрҙә лә хәл-ваҡиғаның ҡайҙа һәм кемдәр тарафынан алып барылыуы түгел, ә ул шул хәлдәр барышындағы кешеләрҙең хис-тойғолары, кисерештәре, уйҙары, ҡылыҡтары мөһимерәк була. Ауылда яңғыҙ зарыҡҡан әбей ул шул уҡ ҡалала ла бар. Собестарҙың ишек төптәрендә таңдан зарығышып торған әбей-бабайҙарға ҡарап, "Быларҙың балалары ҡайҙа икән?" тип әсенеп уйлайһың. Йәки ғашиҡ йәндәр, мөхәббәт хәсрәттәрен, бәхетен кисереүселәрҙең атап ҡына күрһәтер урыны бармы? Хистәр улар ҡайҙа ла хистәр. Шул уҡ ҡатмарлы яҙмыштар йәки башҡа драматик хәлдәр ҙә ауыл кешеһенә лә, ҡаланыҡына ла хас.

Театрҙы архаик күренеш, тип әйтеүселәр ҙә бар. Кино сәнғәте, эстрада, шоу-бизнес менән сағыштырғанда, театр сәнғәте бер ваҡытта ла улар кеүек килемле йәки үҙ сығымдарын күтәрерлек өлкә була алмаясаҡ. Әммә ул шундай бер илаһи тере организм булып ҡала. Бер үк пьеса шул уҡ артистар менән дә көн дә бер үк төрлө уйналмай бит. Бында тере кешеләр, улар һәр уйнағанда хәрәкәте, кәйефе, эске тороşо менән үҙ үҙгәрештәрен индерә килә.

Барыбер ҙә кеше театрға ниндәйҙер эске таҙарыныу, рухи күтәрелеш эҙләп бара бит. Ғәҙәттә, күңелен юшҡын баҫып киткән, был тормошта нисектер ваҡланып, тарҡалып киткәндәй булғанда иҫкә төшә ошондай урын. Һәм бөгөн йәмғиәттә "свежий продукт" ҡулланыу модаға ингән һәм был хеҙмәт бик ҡиммәт баһаланғанда, һинең өс йөҙ тәңкә аҡсаңа егермеләп артист йәнле бер донъя аса. Бында һин шул уйнаған артистар менән бер энергетик яланда була алаһың. Сәхнәлә уйналғанды төшөнөү, тойоу өсөн дә һиҙгер һәм зауыҡлы була белеү зарур. Беҙ хәҙер спектаклде тәржемә наушниктары менән ҡарауға ла ҡаршыбыҙ. Тәржемә ул телдең нескәлектәрен, уның һығылмалығын, тыңлаусыға алып барып еткерергә тейеш биҙәктәрен боҙа. Шунлыҡтан ике телдәге спектаклдәр сығарыу яғындабыҙ. Ҡыҫҡаһы, Республика театрҙар союзының тамашасыларына тәҡдим итер яңылыҡтары һәм күңелдәрен арбар мөғжизәләре алда әле...

**Миләүшә ХӘБИЛОВА**
**әңгәмәләште.**

# СУРЫТЫП АЛАЙЫҠ ӘЛЕ!

**Йәғни халҡыбыҙҙың булған хәл-ваҡиғаға биҙәктәр, аҙ ғына шаштырыу өҫтәп һөйләү гәҙәтен иҫкә төшөрөп алайыҡ**



## АТ ЙӘНЛЕ АТАЙЫМДЫҢ АСЫУЛАНҒАНЫ

Ысын башҡорт минең атайым, шул тиклем ат йәнле. Өйгә ҡарағанда аты янында күберәк булалыр ул. Бер саҡ тай өйрәтергә алып сыҡты мине. Йәй көнө арба урынына сана егеп, бер аҙ йөрөп килдек. Шунан һыбай ҙа йөрөгөләп алды. Уйнаҡлап торған тай ҡулға бирелә башланы, ҡамыт кейҙерһәң, башын эйеп тора, эйәр һалһаң - тынлаулы ғына көтөп тора. Ҡыҙығып киттем бит мин дә, күҙ ҡыҙа атайға - һыбай сапҡы килә. Бер көн атайым күрмәгәндә генә эйәрләп алдым бит теге тайҙы. Китте бит был ялан буйлап. Әллә кем булып, теҙген тартып килгән мин, ятып, тегенең муйынын ҡосаҡлап алдым.

- Ат һиҙә бит ул бала-саға ултырғанды. Арт ағын һикертеп, осороп та ҡалдыра ул ҡайһы берәһе.

- Шуға сат йәбештем шул ялына. Муйынын ҡосаҡлап алдым. Уйнаҡлап килә инде. Шуны ғына тоям. Ағас араһына барып инһә, ботаҡҡа һағып ҡалырмын, тип уйлаған булам инде балалығым менән. Юҡ, ялан буйлап елә генә. Шунан иң ҡурҡҡаным күренде.

- Униһы нимә тағы?

- Атай сыҡҡан йоҙроҡ төйнәп. Өйгә табан бороп алып булмай теге тайҙы. Баш бирмәй. Атай тора алмашлап йоҙроҡтарын болғай-болғай. Бөттө баш, тип уйлайым. Ун өс кенә йәштә инем әле. Нисек ыңғайлағандыр менгем - белмәйем, әллә атайҙың йоҙрођо уға тәғәйен тип уйланымы - килеп инде ҡапҡанан. Килеп тә инде, ауып та китте. "Яндырҙың бит атты!"- тип атай килә йүгереп. Икенсе яҡтан тупһала көтөп торған әсәйем һикереп төштө: "Ҡас, улым, ҡас. Атайың ныҡ ҡыҙған. Ҡаны яткас, үҙем барып алырмын", - тине лә, мине, артҡы яҡтағы ҡапҡанан сығып ҡасҡанымса, ҡамабыраҡ торҙо. Ыҫҡыныуыма ҡыуаныстан, йән-фарман урамдан түбән йүгерә башланым.

- Сурай ауылының урамы йылғаға табан һарҡыулата төшөп китә. Әхмәтхандар ауылдың үр яғында йәшәй.

- Эйе. Түбән яҡҡа табан йән-фарман барам бит. Атайҙың: "Бисәкәй, тайға ҡурмас ашата тор, мин хәҙер", - тип, минең арттан төшкәнен һиҙҙем. Бөттө баш, тип уйлайым.

- Ҡайным ологайғанса һабантуйҙарҙа йүгереүҙә алдынғылыҡ бирмәне. Биш малайын да бәләкәйҙән йүгертеп сынаҡтырған. Һабантуйҙарҙа иң алдан ҡайным, уның артынан биш малайы килә һәр ваҡыт.

- Хәтерләйем әле. Иң бәләкәй ҡустыма өс йәш тирәһе ине, тарбаңлап йүгереп килгән була торғайны. Әле инде мин йүгерәм, атай ҡыуа.

- Былай йүгерә алғас, һау икәнһең, имгәнмәгәнһең икән, шильма малай, - тип әйтә ти ҡайным.

- "Ике ҡулыңды нығыраҡ һелтә. Нимә, аҫҡа төшөрөп, һәлпелдәтеп киләһең, нисек өйрәтәм мин һеҙгә?" тип әрләй-әрләй килә үҙе. "Ҡайҙа ғына барайым икән?" тип киләм. Ике ҡуллап һелтәп үҙемә көс өҫтәйем тиһәм, һыңар ҡул һәлпелдәп килә. Күтәрелмәй. Ҡыҙыулыҡ менән һиҙмәгәнмен. Атайым әйткәс кенә абайлап ҡалдым - ҡолап киткәнемдә ҡулымды һындырғанмын икән. "Тукта, тип уйлайым, медпунктҡа барайым. Кеше алдында әллә ни эшләтмәҫ әле. Ҡулды ла бәйләтермен", тип шул яҡҡа ыңғайланым. Атайға һиҙҙермәҫ өсөн, иҙеүҙе ыҫҡындырып һынған ҡулды тығып ҡуйҙым да, ары саптым.

- Ҡулын муйынға аҫып ҡуйҙы булды инде, йәнәһе.

- Атыу. Һөйәк-мөйәге шылғылаһа, ялған ҡуйыуы ауырлаша бит. "Мин һине шулай йүгерергә өйрәттемме, шильма малай. Ике ҡулыңды һелтә, ике ҡулыңды", ти атай һаман. Үҙе һаман ҡыуа килә, "Әләктерһәм, бынан ары ат тип ауыҙыңды асмаҫлыҡ итәм мин һинең, шильма малай", тип тә ҡыҫҡыра. Йүгереп барып индем медпунктҡа. Унда эшләгән медбрат кешеләрҙе лә, малды ла ҡарай торғайны. Өҫтәлендә ятҡан ҙур шприцты күреп ҡалдым да: "Уй, ағай, ҡотҡар мине. Тоҫҡа шприцыңды, мылтыҡ һымаҡ итеп. Атайымды ҡурҡыт. Ул элек-электән уколдан ҡурҡа. Атыу мине ялпаштыра һуға ул", тейем. "Ни булды?" - ти медбрат. " Тайҙы яндырҙым шикелле". "Улай булғас, атайың, ысынлап та, ялпаштыра һине", - тине лә медбрат ағай, шприцты алып, ишек эргәһендә тоҫҡап торҙо. Күҙенә аҡ-ҡара күренмәй атай килеп инде бер саҡ, мин ширма артына йәшенеп ҡарап торам. Атайым шприцты күрҙе лә, күҙҙәре шарҙай булды, артҡа сигенә бирҙе. Шунан ишек артынан ғына: " Ҡустым, әйҙә уколыңды ал да киттек беҙгә. Малай атты яндыра яҙған, шуға йүгереп килеүем", - тип тағы сыҡты ла йүгерҙе. Медбрат миңә ҡараны ла: "Ҡустым, ҡулыңды иҙеүеңә аҫып йүгереп дөрөҫ эшләгәнһең. Һин тағы анау өҫкө бер төймәңдә эл дә ҡулыңды күтәреберәк ҡуй. Шунан аҙ ғына көтөп тор, тәүҙә тайҙы ҡарайым. Ул-был була ҡалһа, атайың көн күрһәтмәҫ һиңә лә, миңә лә", - тип, велосипедына атланып, беҙгә ҡарай китте.

- Атты ҡотҡарҙылармы?

-Ҡотҡарҙылар. Әсәйем былар килгәнсе әмәлен тапҡан.

- Оҫта йүгереүе менән бәйле тағы бер мажараһы бар әле Әхмәтхандың, - ти эргәһендә һәр һүҙен йөпләп, ҡыҙығына иң тәүҙә үҙе көлөп ултырған ҡатыны.

- Униһы әллә ни түгел дә...

- Һөйлә, һөйлә. Һин оҫта сурытаһың бит ул. Бесән юҡ ерҙә кәбән һалып ултыртаһың. Милиционер булып йөрөгәнсе, юморист яҙыусы ғына булһаң.

- Яҙыусы булып эшкиндерә алмаҫ инем мин. Бер урында ун биш минуттан артыҡ ултыра алмайым бит ул. Яҙыусы булыу өсөн иң мөһиме - оҙаҡ-оҙаҡ ултыра алыу һәләтелер ул.

- Униһы шулай. Һин хәрәкәтһеҙ булдыра алмайһыңдыр, тейендән дә артыраһыңдыр, билләһи.

- Арттырмаһам да, кәм дә түгелмен. Участка милиционеры булып эшләгән саҡ ауылда. Берәү, балыҡ ыуылдырыҡ сәскән саҡта мурҙа һалған да, балығын бушатып тора ине. Өҫтөнә барып баҫтым бит тегенең. Мине күрҙе лә торҙо ла йүгерҙе. Мин төш тегенең артынан. Иң шәп тиҙлеккә һалып йүгерәм, ахыры, теге ситкә тайпылып ҡала, мин уҙам да китәм, уҙам да китәм. Әлеге һарҡыу урамдан түбәнгә табан уҙышабыҙ. Уҙып китә бирәм дә көтөп торам. Теге лә йылғыр, тоттормай. Тағы ҡыуа төшәм. Теге артына ҡарай-ҡарай ҡаса. Мин тағы уҙып китәм. Шунан: "Мә, тот, ғәйеплемен. Һинән ҡасып ҡотолоп булмаҫ. Алда ла Әхмәтхан, артта ла Әхмәтхан", - тип эргәгә килеп туҡтаны.

- Әхмәтхандан бейегерәк ул кәүҙәгә. Әхмәтхан нисәнсе тапҡырҙыр уҙып киткәс, артынан ҡыуып етеп, яурынына ҡулын һалған була ти.

- Аҙаҡ был ҡылығын аңлатҡан булды ул. Мин әйтәм, бынан ҡасып ҡотолоп булмаҫ. Ғәйебен үҙе танып, үҙе тотолған кешегә ташлама була, шикелле, тинем дә туҡтарға булдым, тиған була.

## ӘСӘЙЕМДЕҢ ХӘЙЛӘҺЕ

Беҙ игеҙ үҫтек. Кеше түгел, ҡайһы саҡта үҙ әсәйебеҙ ҙә бутай торғайны. Үҫмер саҡ. Киске уйынға йөрөй башланыҡ. Беҙгә уйыны әллә ни түгел ине, ауыл егеттәренең беҙҙе бутауы ҡыҙыҡ була торғайны. Бигерәк тә ситтән килгән, беҙҙе белмәгән егеттәр беребеҙ менән танышып һөйләшеп торған саҡта, иплəп кенә икенсебеҙ килеп сыға торғайныҡ. Эй, аптырай торғайнылар. Әлбиттә, һуң ҡайтһаҡ, әсәйҙән эләгә бит инде. Шуға сығыр саҡта әсәйебеҙ эргәһендә торған уятҡысты /будильникты/ иплəп кенә артҡа бороп китәбеҙ ҙә, ҡайтҡас, яңынан дөрөҫләйбеҙ. Бер саҡ борорға онотҡанбыҙ ҙа әсәйем көтөүгә һуңланы, беҙгә ныҡ ҡына эләкте. Шулайын шулай ҙа уйынға сыҡһаҡ, онотолабыҙ ҙа китәбеҙ бит. Бер ваҡыт тағы һуңланыҡ. Ипле генә итеп ишектә асып инәйек, тиһәк, әллә нимә даһыр-доһор итеп ҡалмаһынмы. Әсәйем һикереп килеп торҙо ла будильникты тотоп килә әрләбеҙгә. Бәхетіһәң, әсәйем ишек тотҡаһына күнәк бәйләп ҡуйған икән.

- Мин алдан инеп бара инем. "Исмаһам, һин алдама, Фәниә. Бына ҡара, сәғәт нисә, ҡара, сәғәт нисә?" - ти әсәйем будильникты күрһәтеп. "Мин бит Ғәлиә" , - тим. "Ғәлиә булһаң ни, сәғәт ҡарай белмәйһеңме? Әйт, сәғәт нисә?" - ти.

Атайым йоҡоға ҡаты була торғайны. Күнәк даһырлағанда ла уянманы, ә ни эшләптер әсәйемдең шыбырлап ҡына әрләгәненә уяныл китте.

- Эй, яратты ул беҙҙе. Әсәйемдән һүҙ әйттермәй торғайны. Әсәйем әрләһә лә ул юҡта ғына эләгә ине. "Бер алмаһың ике яртыһы", - тип ярата торғайны беҙҙе.

- Фәниә бигерәк шаян булды. Бер саҡ йоморҡҡа бешереп ашап ултырһаҡ, Фәниәнең йоморҡаһы ике һарылы булып сыҡты. Атайымдың бер алманың ике яртыһы тип йырлаған көйөнә үҙе таҡмаҡ сығарып, әсәйемдән әрләнгәйне.

- Йоморҡаның ике һарыһын алып һалдым да ҡыҙыҡ булып китте. Хас үҙебеҙ һымаҡ. Беҙҙең яҡта йоморҡа тимәйҙәр, күкәй тиҙәр. Шунан былай тип таҡмаҡланым: "Бер алманың ике яртыһы, бер күкәйҙең ике һарыһы". Шунан әсәйем: "Кит, суҡынған, теләһә нимә һөйләп ултырма", - ти. "Бер ҙә теләһә нимә түгелсе. Беҙҙән дә сәсебеҙ һары, күкәйҙәр ҙә һары, бына бер күкәйҙән ике һары сыҡты", - тип ныҡышам. "Шағирә булыр әле минең Фәниә ҡыҙым. Ҙурайғас, иң тәүге шиғырым, тип яҙып ҡуйырһың ошоно", - тиған булды атайым.

- Әле лә әсәйемдең әрләгәненә уяныл китте атайым. Йоҡо аралаш нимә тип уйлағандыр инде әсәйемдең әрләгәнен: "Әсәһе, йонсотма әле балаларҙы, сәғәт һорап. Ней баянан бирле сәғәт һорап ныҡышаһың. Йоҡлаһындар. Көтөүгә үҙем уятырмын", - тиған булды.

Көлөргә ҡурҡабыҙ. Ауыҙҙы ҡаплап, юрған аҫтына саҡ инеп сумдыҡ.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

**(Аҙағы. Башы 49-50-се һандарҙа).**

*✓ Сәхнәгә ярты мең бейеүсе сыҡты. Ғаиләләре, ауылдары менән бейеүселәр бар хәҙер республикала. Үткән йылдарҙағы еңеүселәрҙең яңынан сәхнәгә сығыуы тамашаны тағы ла сағыуыраҡ итте.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**"Байыҡ" Республика башҡорт бейеүе бәйгеһе быйыл 10 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Ошо уңайҙан декабрь айында Өфөнөң "Башҡортостан" дәүләт концерт залында ҙур байрам концерты үтте. Унда был бәйгелә Гран-при яулаусылар, финалға сығыусылар, Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле, "Мираҫ" фольклор йыр һәм бейеү ансамбле, "Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамбле, Стәрлетамаҡ ҡалаһының бейеү театры һәм Мәскәүҙән, Татарстан, Төньяҡ Осетия-Алания, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан республикаларынан, Алтай крайынан ҡунаҡтар ҡатнашты.**

# ЫЛАУ-ЫЛАУ БУЛЫП...

## бейеүселәр килде "Байыҡ"ҡа





Ғаләм бейеклегенән ҡарағанда, ун йыл ғүмер күп тә түгел һымаҡ, әммә "Байыҡ" һымаҡ телевизион бәйге өсөн был аҙ ваҡыт түгел. Ун йыл дауамында яңынан-яңы бейеүселәр, ансамблдәр асыу, аҙна һайын тапшырыу төшөрөп, эфирға сығыу өсөн күпме көс талап ителә. Шуға ла проект авторы Рита Өмөтбаеваның "Ун йыл тип әйтеүе генә анһат!" тейеүендә ҙур мәғәнә ята. "Проект башта яңғыҙ бейеүселәр менән башланды һәм ул артабан да шулай дауам итер, тип уйлағайныҡ. Тәүге йылда 50 кеше ҡатнашырға теләк белдерҙе. Тик бәйгенең тағы ла ҙурыраҡ масштабҡа сығыуын күҙаллағас, ансамблдәрҙе лә саҡырырға булдыҡ. Икенсе йылына шулай 100 кеше йыйылды. Ошо юбилейға әҙерләнгәндә үткән юлға ниндәйҙер һығымталар ҙа яһалды. "Байыҡ" аша бөтәһе 8 мең бейеүсе үткән. Улар араһында халыҡ артистары ла, ябай хеҙмәтсәндәр ҙә бар", - Рита Рәшит ҡыҙының ошо һүҙҙәренән генә лә проекттың әһәмиәтен, киңлеген самалайһың.

Шулай ҙа иң мөһиме, "Байыҡ"тың ошо 8 мең кешегә ҡанат ҡуйыуын, яңы үрҙәргә дәрләндереүен дә иҫәпкә алып, был һанға ошо арауыҡта башҡорт бейеүен яратып өлгөргән меңәрләгән тамашасыны ла ҡушһаң, проекттың тотош милләтте берләштереүен аңларға була. Боронғо башҡорт бейеүе "Байыҡ"тың исемен йөрөтөүсе был бәйгегә йылдан-йыл бейеүселәр күберәк килә, уның еңеүселәре донъя кимәлендәге башҡа ярыштарҙа ла лайыҡлы сығыш яһай. "Байыҡ"та ҡатнашҡан йөҙҙән ашыу кеше тормошон бейеү менән бәйләргә теләп, бөгөнгө көндә махсус уҡыу йорттарында белем ала, 300-ҙән ашыуы республиканың профессиональ коллективтарында бейей.

Башҡортостандың халыҡ артисы Риф Ғәбитов та бындай проекттың Рәсәйҙә тиңе юҡлығын һыҙыҡ өҫтөнә алды: "Байыҡ"тың популяр булыуының төп сәбәптәренең береһен башҡорт бейеүенең тамырҙарында күрәм. Башҡорт бейеүе баштан уҡ сюжетлы булған, был турала сит ил сәйәхәтселәре лә яҙып ҡалдырған. Лепехин, йырҙа йырланған тарихты күрһәтеп бейенеләр, тип яҙа. Фәйзи Ғәскәров та ошоно аңлап, тойоп эшләгән, башҡорт профессиональ бейеүен ошо юҫыҡта үҫтергән. Башҡорт бейеүе менән бөтөн теманы сағылдырырға була - тарихты ла, шәхесте лә, лириканы ла. Бына шуның өсөн дә беҙҙең бейеүҙәр төрлө-төрлө һәм улар башлыса фольклорға таяна".

Риф Ғәбитовтың һүҙҙәренең раҫлығын тамашасы тап ошо юбилей концертында күрҙе лә инде. Сәхнәгә ярты мең бейеүсе сыҡты. Ғаиләләре, ауылдары менән бейеүселәр бар хәҙер республикала. Үткән йылдарҙағы еңеүселәрҙең яңынан сәхнәгә сығыуы тамашаны тағы ла сағыуыраҡ итте. Шулай уҡ баһалама ағзаларының, бәйгене ойоштороусыларҙың сығышы ла матур хәтирә булып, күңелдәрҙә ҡабат-ҡабат ҡайтауаз булып яңғырар әле. "Байыҡ"тың тәүге йылдарынан уҡ баһалама рәйесе булған, үҙе лә сәхнәләрҙә бейегән һәм бөгөн дә башҡорт бейеүе традицияларына тоғролоҡ һаҡлаусы Радмир Бәҙретдинов та "Байыҡ"тың ошо ваҡыт арауығында юғары кимәлгә күтәрелеүен билдәләне: "Үткән быуаттың 50-се йылдарында Мәскәүҙә ойошторолған Башҡортостан көндәрендә ҡатнашыу өсөн бейеүселәр таба алмай йонсойҙар ине, - тип хәтергә ала Радмир ағай. - Башҡорт өсөн бейеү - иң популяр сәнғәт төрө булыуға ҡарамаҫтан, традицияларыбыҙҙы юғалта төшкән шундай мәлдәр ҙә булды. "Байыҡ" проекты ошо бушлыҡты тултырҙы бит. Халыҡта бейеүгә ҡарата яңынан һөйөү уянды. Фәйзи Ғәскәров Ҙур театр эргәһендәге хореография училищеһында Моисеев класында уҡығанда уның ансамблен күреп, башҡорт бейеүенең дә ошондай уҡ юғарылыҡҡа күтәрелер мөмкинлеген тойомлай һәм республикаға ҡайта. "Байыҡ"ты ойоштороусыларҙың йөрәгендә лә Ғәскәровҡа хас ошо фиҙаҡәрлек бар. Конкурста бейеүселәрҙе бөгөндән үк тот та профессональ ансамблдәргә эшкә ебәр, кәүҙә-һындары бар, таланты бар, хатта кейемдәре лә тап башҡортса, дөрөҫ итеп тегелгән. Былар барыһы ла ун йыл эсендәге ыңғай үҫеш тураһында һөйләй. Тауҙағы ҡая ташын тишеп аҡҡан шишмәләр була бит әле. "Байыҡ"ты мин ошондай шишмәгә оҡшатам. "Байыҡ"тың дауамын яҡты итеп күрәм, иманым камил, был шишмә халыҡтың моңға, гүзәллеккә сарсаған күңелен күп йылдар сафландырыр әле", - ти башҡорт бейеүе аҡһаҡалы Радмир Сәрүәр улы.

Был проекттың хореографтарҙың үҫешенә "йәшел ут" асыуы ла маҡтауға лайыҡ. Ошо йылдар эсендә күпме бейеү барлыҡҡа килгән. Әлбиттә, улар араһында бер көнлөк бейеүҙәр ҙә бар, әммә башҡорт бейеүенең алтын фондын тулыландырғандарының һаны ла йөҙҙән артыҡ. Иң ҡыҙығы, һәр бейеүсе, һәр ансамбль мотлаҡ рәүештә профессиональ хореографтарға мөрәжәғәт итә. Шуға ла был бәйгене һәүәҫкәрҙәр араһында барған ярыш тип аңларға ярамай, ул халыҡсанлығы менән айырылып торған үҙ һөнәренең оҫталары ярышы.

"Байыҡ"тың билдәлелегенең тағы бер яғы - уның ихласлығында, ти БДУ-ның Сибай институты "Сармат" ансамбле етәксеһе Илдар Хәтмуллин. Уның билдәләүенсә, был уҡыу йортонда уҡыу менән бер рәттән, студенттарҙың рухи яҡтан үҫешенә лә ҙур иғтибар бирелә. Институт етәкселеге барлыҡ сығымдарҙы үҙе ҡаплай, ҡаланың мәҙәниәт бүлеге лә матди ярҙам күрһәтә. Ә шулай ҙа күпселек ҡатнашыусылар бындай ярҙамды көтөп ултырмай. Мәҫәлән, ауылдарҙа йәшәүселәр пенсияларынан өлөш сығарып, бейеүҙәр ҙә һалдыра, күлдәктәр ҙә тектерә. Әбйәлил районы Амангилде ауылының "Сәсмәүер" халыҡ фольклор ансамбле солисы Ләлә Ғүмәрова әйтеүенсә, ансамбль район буйлап концерттар ҡуйып та матди яғын нығыта. Әйткәндәй, быйыл Гран-при яулаусы был ансамблдең иң өлкән бейеүсеһе - сәсәниә Хәнифә Әбүбәкироваға 73 йәш. "Беҙ йәш әле, миңә лә, ансамблдә бейеүсе иптәшем Иштимергә лә - 69 йәш. Ансамблдә 4 ғаилә пары бейей - беҙ, Ҡужахмәтовтар, Ҡадировтар, Шаһыбаловтар, йәштәр ҙә бар. 2002 йылда ҡатын-ҡыҙҙарҙан ғына торған төркөм төҙөгәйнек, ошо йылдар эсендә төрлө ерҙәрҙә булып, Гран-приҙар яуланыҡ. "Байыҡ"ҡа барырға булғас, ир-егеттәрҙе лә йәлеп иттек һәм "Туй сыбыртҡыһы" тигән бейеү башҡарҙыҡ. Махсус күлдәк, камзул, итектәр тектерҙек. Һәр кемдең күңеленә ятҡан шөғөл булғанға күрә, беҙ ауырлығын тоймайбыҙ, пенсия аҡсаһын да йәлләмәйбеҙ", - ти Ләлә Мөхәррәм ҡыҙы.

"Байыҡ"тың йыл һайын үҙенсәлекле асыштары ла була. Әбйәлилдең "Әхирәттәр" ансамбле көйһөҙ бейеү - туҡал бейеү менән тамашасыны таң ҡалдырҙы. Уларҙың "Һеү-һеү-һеү" тип, бармаҡ сиртеп кенә "көй" сығарып, йәки Ғафури районы Сәйетбаба ауылының "Быҙыбыт" ансамбленең тараҡҡа ҡағыҙ ҡыҫтырып бейеүе барыһын да таң ҡалдырҙы. Былар ҙа боронғо башҡорт бейеүҙәре, халыҡ араһында уларҙы хәтерләгән кешеләр бар әле. Шуға ла "Байыҡ"тың иң ҙур байлығы - ул уның халыҡ аҡылын, халыҡ йолаларын йөрәгендә һаҡлаусы ҡатнашыусылары, тип әйтеү һис хата булмаҫ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ун йыл, ысынлап та, аҙ ваҡыт түгел. Кеше ғүмере менән сағыштырғанда, ун йәшлек баланың аяғына ныҡлы баҫып, ярайһы ғына белем, ғилем эстәп өлгөргән мәле ул. Дөйөм милли сәнғәт кимәленән сығып һүҙ йөрөтһәк, Радмир Сәрүәр улы әйткән тау шишмәһенең төрлө ҡаршылыҡтар аша үҙен юғалмай, йыраҡ юлдар үтеп, һыуының тамсыһын да исрафламай оло йылғаларға алып барып ҡушып, артабан тағы ла мулыраҡ һыулы булып ағыуылыр, моғайын. Һәр хәлдә, "Байыҡ"тың башҡорт бейеүе үҫешендәге өлөшөнә киләсәктә тарих үҙенең баһаһын бирер әле. Әлегә проект авторы Рита Ришат ҡыҙының "Һәр бейеүсенең яҙмышы берсә һағыш, берсә шатлыҡ, берсә ялҡын булып күңелемдә ята. "Байыҡ" конкурсына ылау-ылау булып килгән, башҡорт бейеүен яратып, уға тоғро ҡалған халҡыма мең рәхмәт", - тигән һүҙҙәренә ҡушылып, шулай тип өндәшәбеҙ: һин дә беҙҙең күңелдәрҙә, "Байыҡ"!**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**



ИНТЕРНЕТТАН



# АҠЫЛ СЫБЫҒЫ

■ Йыш баш ауыртыуының сәбәбе ҡояш яҡтылығы, тимәк D, В витаминдары һәм коэнзим Q10 етешмәүҙән булыуы ихтимал. Ҡояшта йөрөү мөмкинлеге һирәк эләгә икән, был витаминдарҙы ризыҡтар ярҙамында тулыландырырға мөмкин, ти ғалимдар. D витамины балыҡ һәм йоморҡала бар. В витамины - рибофлавин дөгөлә, йомортҡала һәм һөттә бар, рибофлавин нервы системаһының эшенә, күреү һәләтенә, метаболизм процестарына ыңғай йоғонто яһай. Коэнзим Q10 бауырҙа була һәм ул шәкәрҙәрҙе энергияға әүерелдерә. Лаборатор тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, хроник баш ауыртыуы менән яфаланыусыларҙа тап ошо матдәләрҙең норманан түбән булыуы асыҡланған.

■ Ғалимдар алкоголизм, наркомания, депрессия менән яфаланған, үҙ-үҙенә ҡул һалырға маташыусыларҙы сыбыҡ менән ярырға тәҡдим итә. Бындай психосоматик ауырыуҙар йәшәү дәрте һүнгәндәрҙә барлыҡҡа килә. Әҙерәк "туҡмап" алғандан һуң кешелә эндорфин рецепторҙары әүҙемләшә һәм "бәхет гормоны" күпләп бүленә. Белгестәр нисек итеп һуғырға ла өйрәтә - "йомшаҡ" ергә 60 тапҡыр шыйыҡ сыбыҡ менән 30 көн дауамында һуғырға кәрәк. Был ысулды тәҡдим итеүсе, биология фәндәре докторы Сергей Сперанский үҙе ошо рәүешле депрессиянан һәм ике тапҡыр кисергән инфаркт эҙемтәләренән ҡотолған. Шулай ҙа иң файҙалы ысул - көләү, ти белгестәр. Ул стресс булдырмай, йөрәк һәм ҡан тамырҙары эшен, матдәләр алышыныуҙы яҡшырта, ғүмерҙе оҙайта.

■ Америка психологтары сәләмәтлек өсөн файҙалы һәм түбән калориялы тип рекламаланған ризыҡтарҙы күп ҡулланмаҫҡа кәңәш итә. Экспериментта йөҙҙән ашыу кеше ҡатнашҡан. Фильм ҡараған мәлдә уларға "файҙалы" печенье тәҡдим итәләр. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, кеше дөрөҫ туҡланам тип уйлаһа, күберәк ашай икән. Магазинда ла йышыраҡ "сәләмәт туҡланыу" тигән яҙыуға иғтибар итәләр. Әммә ризыҡтың калорияһын бөрөү ҙә иҫәпләп тормай. Был иһә һимереүгә алып килеүе бар.

■ Ябай мәтрүшкә составындағы май инфекциялар менән антибиотиктарға ҡарағанда ла яҡшыраҡ "көрәшә". Британия ғалимдары билдәләүенсә, был майҙа карвакрол тигән матдә бар, ул эсәк эшмәкәрлеген боҙоусы паразиттарға, бәшмәк инфекцияларына ҡаршы антисептик булып тора. Иң ҡыҙығы, карвакролды 18 төрлө антибактериаль препарат менән сағыштырып, был матдәнең уларға ҡарата көслөрәк булыуын асыҡлағандар.

■ Төндә насар йоҡлаһаң, йоҡларға ятыр алдынан физик күнекмәләр эшләп ал, тип кәңәш итә ғалимдар. АҠШ-тың Йоко милли фонды үткәргән һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусылар яуаптары буйынса бер нисә төркөмгә бүленгән: уларҙың ҡайһылары күнекмәләрҙе даими яһаған, ҡайһылары еңелсә генә спорт менән шөғөлләнгән, ҡайһылары бөтөнләй ҡыбырларға яратмаған. Кем ниндәй ҙә булһа күнегеү төрө яһаған, улар яҡшыраҡ йоҡлаған. Кемдәрҙер матур төштәр күреүен дә билдәләгән. Көнөнә 10 минут ҡына йәйәү йөрөү ҙә йоконоң сифатын күпкә яҡшырта, ти белгестәр.

ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# АМЕРИКА АСТРОНАВЫ АРМСТРОНГТЫҢ...

## Айҙа аҙан ишеткәне



**1969 йылдың 16 июле. Түҙеп торғоһоҙ эҫе булыуға ҡарамаҫтан, Флоридала 55 илдән 3 миллион 493 мең журналист һәм космодромдан ситтә тағы ла ярты миллион самаһы халыҡ Йыһан карабының осоп китеүен күҙәтә. Тағы ла йөҙәрләгән миллион кеше был осоштоң тормошҡа ашырылыуын көтөп, зәңгәр экрандарға төбәлә. Нимә шундай ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра һуң? Ошо минутта кеше тәүге тапҡыр Айға осорға йыйына.**

Шулай итеп, "Аполло-11" карабы Нейл Армстронг, Эдвинг Олдринг, Мишель Коллинсты бортына алып, күккә күтәрелә. Тап 102 сәғәт 47 минуттан "Аполло-11" йомшаҡ ҡына итеп Айға төшөп ултыра. Караптан иң тәүҙә Нейл Армстронг сыға һәм беренсе булып Айға аяҡ баҫыу бәхетенә ирешә. Ләкин ысын дан уға һуңыраҡ, 14 йылдан һуң килә.

1983 йылда Армстронг конференцияла ҡатнашыу өсөн Египетҡа килә. Уның Египетҡа ғына түгел, ғөмүмән, Ислам донъяһына тәүге сәйәхәте була был.

Конференция мәлендә президиумда ултырыусы Армстронг ҡапыл ағарынып китә. Ул урынынан тора һәм аптырап тирә-яғына ҡарана, иғтибар менән ниҙер тыңлап тора башлай. Шунан:"Ниндәй көй был?" - тип һорай. Урамдан аҙан тауышы яңғыраған була. Көләүҙән саҡ тыйылып торған египетлылар: "Көй түгел был, ә аҙан, ул сиркәүҙәге ҡыңғырау кеүек, дин әһелдәрен намаҙға саҡыра. Ул Аллаһы Тәғәләнең һәм уның ҡылғандарының бөйөклөгөн танырға, гонаһтарынан арынырға саҡыра", - ти.

Ошонан һуң Армстронгтың әйткәндәре аяҙ күктә йәшен йәшнәгәндәй тәьҫир итә: "Был тауышты мин Айға аяҡ баҫҡас та ишеттем һәм тәнем сымырҙап китте. Тәүҙә минең ҡолағым төбөндә тауыш шаулап торҙо, тыңлай торғас, минә шул ҡәҙәре рәхәт булып китте..."

Залда тып-тын ҡалалар. Барыһы ла онотолоп аҙан тауышын тыңлай. Шул мәлдә Армстронг тағы телгә килә: "О, Аллам, мин һине Ерҙә түгел, ә Айҙа таптым. Мин Айға доға уҡымайынса аяҡ баҫтым, хәҙер бына доғаларымды ҡат-ҡат ҡабатлайым - мине мосолман тип иҫәпләгеҙ..."

Шулай итеп, Айға осҡан Армстронг, яңы рухи яңырыу кисереп, Ислам динен ҡабул итә.

### Барыһы ла магнит таҫмаһына яҙылған

Астронавтарҙың өсөһө лә - Олдринг та, Коллинс та, Армстронг та инанған христиандар була. Ай өҫтөн тикшергән саҡта улар көтмәгәндә аңлашылмаған күренешкә тап була. Был мәлдәге бар һөйләшеүҙәр магнит таҫмаһына яҙылған. Бына ниндәй яҙыуҙар ҡалған унда:

*Олдринг:* "Беҙ тынлыҡ диңгеҙе өҫтөндә асыҡ китапҡа оҡшаш ниндәйҙер әйбер күрәбеҙ".

*Армстронг:* "Ул ике ҡуласаға ла, асыҡ китапҡа ла оҡшаған".

*Коллинс:* "Мин сексанттың торошон үҙгәрттем, хәҙер асығыраҡ күренә, был асыҡ китап рәүешендә".

*Ерҙән:* "Нимә юҡты һөйләйһегеҙ, Айҙа ниндәй китап булһын?".

Тауыштар лентаға яҙылған. Икенсе көндә китап юғала, уның ҡарауы, ниндәйҙер тышҡы тәьҫир, сиреналы янғын машинаһынығына оҡшаған тауыш радиобәйләнешкә килеп ҡушылып, һәр саҡ ҡамасаулап тора.

*Коллинс:* "Ер, һеҙ мине ишетәһегеҙме? Был сигналды алығыҙ әле, һаңғыраулаһам бит".

*Ерҙән тауыш:* "Был тауыш Ерҙән түгел, ҡайҙандыр Айҙан килә. Бәлки, унда тағы берәй карап барҙыр?"

*Армстронг:* "Ә хәҙер ниндәйҙер көй башланды. Ер, был көйҙө туктатаһығыҙмы, юҡмы?"

*Ер:* "Беҙҙә барыһы ла һәйбәт эшләй, көй һеҙҙән килә".

*Олдринг:* "Әллә нимә һөйләйһегеҙ. Аңламайһығыҙмы әллә һеҙ, был көй һеҙҙән килә".

Иртәгәһенә Армстронг тағы Айға аяҡ баҫа. "Бөркөт ултырҙы", - ти ул тулҡынланып. Шул ваҡытта сигналға оҡшаш тауыш тағы барлыҡҡа килә. Ләкин был юлы ул тауыштың һүҙҙәре лә яңғырай:

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# БИҘӘҮЕСТӘР...

## асылыбыҙҙы балҡытыр



**Мәләүез ҡалаһының Кинйә Арыҫланов исемендәге 9-сы башҡорт гимназияһында район-ҡала ағинәйҙәре ҡатнашлығында селтәр (түшелдерек, һаҡал) яһау һәм кейеҙ баҫыу буйынса оҫталыҡ дәресе үтте.**

Оҫталыҡ дәресен Федоровка районы Батыр ауылында йәшәгән Башҡортостандың атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре, педагогия хеҙмәте ветераны Хәлисә Багаева үткәрҙе. Хәлисә Шаһыбал ҡыҙының исеме мәләүеҙдәргә яҡшы таныш. Ул - республиканың билдәле ҡул эштәре оҫталарының береһе. Үҙенең ижади эштәре менән Өфөлә үткән Халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһендә, төрлө кимәлдәге фестивалдәрҙә, конкурстарҙа ҡатнашып, маҡтаулы урындар яулаған.

Билдәле булыуынса, селтәр - башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейеменең айырылғыһыҙ бер өлөшө һәм биҙәүестәр араһында төп урынды алып тора. Уны кейгәндә өләсәйҙәребеҙ күҙ тейеүҙән һаҡланыу, шулай уҡ ҡупшыланыу, биҙәнеү маҡсатын ғына күҙ уңында тотмаған. Биҙәүес шулай уҡ халҡыбыҙҙың йәшәйешен, тормош тәртибен, ғаиләнең йәмғиәттәге урынын сағылдырған бер элемент та.

Хәлисә Багаева дәресте башлар алдынан түшелдеректең тәғәйенләнеше тураһында һөйләп, уның тарих төпкөләнән алып быуаттар буйы барлыҡҡа килгән ижад емеше булыуын билдәләне. Уны ҡатын-ҡыҙҙар байрамдарҙа ғына түгел, көндәлек тормошта ла кейгәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Түшелдеректәрҙе тығыҙ буҫтауҙан тегеп, көмөш тәңкә, ынйы, мәрйен, аҡыҡ һәм ҡабырсаҡтар менән семәрләп, селтәрләп теккәндәр. Ҡул эштәре оҫтаһы үҙе яһаған биҙәүестәрҙең классик һәм стилләштерелгән өлгөләре менән таныштырғас, милли биҙәүесте яһау нескәлектәрен өйрәтте. Оҫталыҡ дәресендә ҡатнашҡандарҙың бөтәһе лә боронғо башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының яраткан шөғөлә булған эшкә ҙур ҡыҙыҡһыныу һәм теләк менән тотондо.

Түшелдерек яһау менән бер рәттән, халҡыбыҙҙың боронғо кәсебе - кейеҙ баҫыу, йөндән әйберҙәр эшләү нескәлектәре буйынса гимназияның технология уҡытыусыһы Асия Рахманғолова оҫталыҡ дәресе күрһәтте.

Асия Миңлехәсән ҡыҙы белем биреү учреждениеһында "Хужабикә" түңәрәге алып бара. Унда ҡыҙҙар ҡул эштәренә, шул иҫәптән һырыҡ йөнөнән уйынсыҡтар, биҙәүестәр, сувенирҙар яһарға өйрәнә. Уларҙың ижад емештәре йылдан-йыл төрлө конкурстарҙа маҡтаулы урындар яулай. Ағинәйҙәр был шөғөлгә лә ҙур ҡыҙыҡһыныу белдерҙе. Был көндә улар һарыҡ йөнөнән кейеҙ, быйма баҫыуҙан тыш, йөндән бөтә төр өҫ кейеме, биҙәүестәр, урын-ергә түшәү өсөн ҡаралтылар ҙа эшләп булғанын иҫкә төшөрҙө. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ оҫталыҡ дәресендә алған тәжрибәләрен аҙаҡ башҡаларға ла өйрәтеп, тиҙҙән бөтә гүзәл заттарыбыҙ байрамдарҙа булһа ла түшелдеректәр тағып, милли асылыбыҙҙы яңынан балҡытыр, тип ышанабыҙ.

Ләйсән ӘМИРОВА.

"Робби-ал ардз-дини инда хуиза-кун-алийм".

*Ер:* "Әй, кем һөйләй унда?"

Был ваҡытта Армстронг Ай өҫтөндә йөрөгән була. Көйгә оҡшаш тауыш тағы ишетелә: "Ашхаду аллах иллаха иллалох".

*Ер:* "Тағы ла әлеге осоусы объекттар, ахыры. Ул көйҙәге һүҙҙәр ниндәй ине?"

*Коллинс:* "Ашан махатма расамбал-ла..." һымағыраҡ яңғыраны шикелле. Һинд һүҙҙәренә оҡшаш..."

*Армстронг:* "Мин уны аҙағынаса тыңланым. Уны ишеткәндән һуң нисектер рәхәт булып китә. Моғайын, Африка радиостанцияларының береһенән килә был көй..."

*Олдринг:* "Юҡ, был тауыш Айҙан килә. Был радиотулҡын түгел. Был ниндәйҙер сәйер хәл, ышаныуы ла ҡыйын..."

*Ер:* "Һеҙ нимә, барығыҙ ҙа аҡылдан яҙҙығыҙмы әллә? Һауаһыҙ пространствола ҡайҙан тауыш булһын, ти?"

*Коллинс:* "Улай булғас, нимә һуң был? Осоусы объекттармы?"

*Армстронг:* "Осоусы объекттар асыҡ китап рәүешендә була аламы?"

*Ер:* "Ниндәйҙер һаташыу. Бәлки, ниндәйҙер йыһан тулҡынылыр? Моғайын, тауыш, китап, көй - улар һеҙ уйлап сығарған һаташыуҙыр..."

*Армстронг:* "Уйҙы камераға төшөрөп булмай! Юҡ тауышты таҫмаға яҙҙырып булмай!"

*Ер:* "Ярай, улай булғас, нисек һауаһыҙ пространствола тауыш тарала ала?"

Күпмелер ваҡыттан һуң астронавтар Ергә әйләнеп ҡайта. Кассеталар яңынан әйләндереп тыңлана. Ул арала NASA Ал-базомдың яуаплы сәркәтибе менән консультация ла үткәрелә. Ул Айҙа яңғыраған көй һәм һүҙҙәр тураһында белешмә бирә һәм уның ғәрәп телендәге изге китаптан өҙөк икәнен әйтә.

Күп ваҡыттан һуң ошо изге доғаларҙы "Аполло-16" астронавы Ворден да ишетә. Ләкин был хәбәр бөрәүгә лә ҡәнәғәтләнеү килтермәй. Уны, ғөмүмән, йәмәғәтселек иғтибарынан йәшерергә тырышалар.

## Дуҫым менән булған хәл

Стамбулда булды был. Мин үҙемдең яҡын бер дуҫыма ҡунаҡҡа барҙым. Ул телевизорҙан Америка астронавтарының Айға осоуы тураһындағы репортажды ҡарап ултыра ине, уға мин дә ҡушылдым. Беҙ экран алдына ултырып, унда барған ваҡиғаларҙы күҙәтә башланыҡ. Армстронг ҡарап баҫҡысынан төшөп, Айға аяҡ баҫҡан мәлдә генә дуҫым ҡысҡырып ебәрҙе:

- Һин ишетәһеңме? Айҙа аҙан тауышы яңғырай!

Мин бер ни ҙә ишетмәгәнемдә әйттем һәм программаны артабан ҡарарға тәҡдим иттем. Дуҫымдың был ҡылығына артыҡ әһәмиәт бирмәнем. Ләкин йылдар үткәс, Египеттағы конференцияла Армстронгтың Айҙа аҙан тауышы ишетеүе тураһындағы белдереүенән һуң ғына, мин баяғы дуҫым менән булған ваҡиғаны иҫкә төшөрҙөм.

Тағы бер йыл үтте. Үҙен Армстронгтың сәркәтибе тип танытыусы бер әҙәм уның конференцияла әйткәндәрен кире ҡағырға, уны астронавтың ауырыуы менән бәйләргә маташты. Ләкин был тырышлыҡтар бушҡа ғына булды. NASA хеҙмәткәрҙәренең береһе, милләте менән сириялы, "Аполло-11" осошо ваҡытында ҡарап менән Ер араһындағы барлыҡ тауыштарҙы яҙып ала һәм уны йәмәғәтселеккә тыңлата, үҙенең комментарийҙарын бирә. Был һөйләшеүҙәр төрлө илдәрҙә баҫылып сыға.

**Доктор Холик НУРБОКИЙ.**

## Йыһан сикһеҙ ул

**Американың өсөнсө космонавы Джон Клин бына нимәләр һөйләй:**

"Йыһанды тикшереү буйынса задание алғас, осраҡлы ғына Йыһан пространствоһы параметрҙары тураһындағы китап ҡулға эләкте. Мине был баҫманың икенсе бүлеге бигерәк тә ҡыҙыҡһындырҙы. Уның йөкмәткеһен аңлау өсөн "яҡтылыҡ йылы" төшөнсәһен үҙләштерергә кәрәк ине.

Билдәле булыуынса, яҡтылыҡтың тиҙлеге секундына 300.000 км тәшкил итә. Быныдай тиҙлек менән яҡтылыҡ бер секундта Ерҙе ете тапҡыр әйләнеп сыға ала. Хәҙер яҡтылыҡтың тура пространствола бер йыл эсендә нисек хәрәкәт итеүен күҙ алдына килтерәйек. Был юлдың оҙонлоғо миллионға ҡабатланған 9,5 млн км-ға (йәғни яҡтылыҡ йылына 9.500.000.000.000 км тиҙлек менән хәрәкәт итә) тиң буласаҡ.

Йыһан - сикһеҙ, быны хатта күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Хатта иң заманса астрономик саралар ҙа уны иңләй алмай. Әйҙәгеҙ, беҙҙең Галактиканың ҙурлығын иҫәпләп ҡарайыҡ әле. Уның диаметры 100.000 яҡтылыҡ йыл тип тип иҫәпләнә. Был 100.000 тапҡыр 9.500.000.000.000 км тигән һүҙ. Ләкин беҙҙең Галактика үҙ сиратында тағы ла ҙурыраҡ системаның бәләкәй генә бер өлөшө булып тора. Миллионлаған башҡа галактикалар бар, беҙгә иң яҡыны - 2.000.000, ә иң йыраҡтағыһы триллион яҡтылыҡ йыл алыҫлығында ята. Яҡтылыҡ беҙҙең Галактиканың бер осонан икенсе осона етһен өсөн генә лә йөҙ меңләп йыл кәрәк.

Ошоларҙан һуң: "О, Аллам, был сикһеҙлектә һәм ҙурлыҡты, мәңгелекте нисек күҙ алдына килтерергә?"- тип ҡысҡырғы килә. Эйе, беҙ теүәл һәм аныҡ башҡарылған камиллыҡ алдында торабыҙ. Йыһандың бөйөклөгө, уның сикһеҙлеге Хоҙайҙың барлығы тураһында һөйләй. Аҡылы булған һәр кем был оло донъя менән ҡеүәтле бер көс идара итеүен аңларға тейеш. Беҙ ракетаны Ерҙән космоска күтәргән һәм идара иткән көстө таныйбыҙ, сөнки уның сығанағын беләбеҙ. Ә ниңә йондоҙҙар, ҡояш, Ер менән оҫта идара иткән көстөң барлығына икеләнергә тейешбеҙ әле?

Кешелек тарихында беренсе булып космосҡа осҡан Юрий Гагарин күп тапҡырҙар шулай тип белдерҙе:"Мин Йыһанда булдым, ләкин унда Хоҙай Тәғәләне осратманым". Ләкин ошо белдереүенән һуң ул үҙ үлемен ҡуктә тапты. Аллаһы уны баяғы һүҙҙәре өсөн хөкөм итмәнеме икән?"

КӨН КҮРГӘН ШӨҒӨЛ

# ҮҘ ЭШЕ - ХӘЛӘЛ КӨСӨ

**Тормош яратҡан, үҙен уратып алған бөтә нәмәгә ғашиҡ булған кеше бер ҡасан да юғалып ҡалмай. Өҫтәүенә, ҡулы оҫта, үҙе уңған, күңеле бай икән, яратҡан шөғөлөнән кинәнес кенә түгел, килем дә алып, ғаилә бюджетын тулыландырыу бер ни тормай ундайҙарға.**



Районда ғына түгел, республикала, илдең башҡа төбәктәрендә, хатта яҡын сит илдәрҙә ҡурсаҡтарға милли костюмдар, мосолман кейемдәре тегеү оҫтаһы булып танылған Фәнзилә Бураҡанова менән осрашып һөйләшкәс, был фекерем тағы ла нығыны.

Фәнзилә Фәтих ҡыҙы Баймаҡ районы Таулыҡай ауылынан. Мәләүез еренә килен булып төшөүенә күп ваҡыт та үтмәгән, әммә күркәм холҡо, ижади күңеле менән төбәк халҡының ихтирамын яулап та өлгөргән. Хәләл ефете Радик менән Әҙел, Исмәғил, Исхаҡ һәм Ғүмәр исемле дүрт ул үҫтерәләр.

Тегенселәрҙең бер ҡасан да ҡул ҡаушырып ултырмағанын бөтәһе лә беләләр. Уларҙың күбеһе йорттарының бер бүлмәһен оҫтаханаға әйләндергәнен күргәнегеҙ барҙыр. Фәнзилә лә - шундайҙарҙың береһе. Декрет отпускыһына сыҡҡас, ҡалалағы кейем тегеү һәм ремонтлау ательеһын ябырға тура килә. Әммә балалар тәрбиәләп кенә ултырырға насип булмай уға. Оҫта тегенсе икәнлеген белгән Смаҡ ауылы ағинәйҙәре йәш әсәйҙән байрамдар өсөн күлдәк тегеүен теләне. Шунан башлана ла инде оҫтаның милли кейемдәр тегеү эшмәкәрлеге.

- Тәүҙә китапхананан китаптар алып, һуңынан интернет киңлегендәге өлгөләрҙән өйрәндем. Халыҡ костюмдары донъяһы мине үҙенә шул тиклем ылыҡтырҙы һәм магазиндарҙағы ярым шәрә ҡурсаҡтарҙы һатып алып, уларҙы "кейендерә" башланым. Милли кейемдәге уйынсыҡтарға башҡалар ҙа һоҡланһын әле, тип, социаль селтәрҙәргә урынлаштырғайным, көтмәгәндә заказдар килә башланы. Ҡаланың балалар баҡсаларына, Өфөгә, Мәскәүгә, хатта Ҡаҙағстанға башҡорт халыҡ кейемендәге байтаҡ ҡурсаҡ оҙаттым, - ти Фәнзилә Фәтих ҡыҙы.

Башҡорттоң күңел байлығы сигеү-нағышта, мәрйендән селтәрләп яһалған биҙәүестәрҙә, көмөшкә сүкелгән биҙәктәрҙә, төҫтәрҙә сағыла. Ҡурсаҡтарға теккәндә лә тегенсе милли кейемдең бөтә нескәлеген күҙ уңында тота. Маһирлыҡтың сиге булмағанын яҡшы аңлап һәм халыҡ костюмдарын тегеү буйынса белемен даими камиллаштыра, китаптар яҙҙырып ала, күп уҡый. Урыҫ, татар халыҡ кейемдәрен тегеүҙе үҙләштергән. Әлеге ваҡытта Ханты-Манси автономиялы округынан ханттарҙың кейемен заказ алған. Милли кейемдәрҙән тыш, Фәнзилә Бураҡанова ҡурсаҡтарға мосолман кейемдәре лә тегә. Уның билдәләүенсә, заказды башлыса Ислам дине буйынса йәшәгән ғаиләләр бирә.

Һуңғы йылдарҙа ғүзәл заттарыбыҙ араһында милли биҙәүестәргә, кейемгә ҡыҙыҡһыныу артыуы күҙәтелә. Быны беҙ ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ түшелдерек, һаҡал, хәситә кейеп, үҙ кейеменә милилектең бер өлөшөн генә өҫтәргә тырышыуынан да күрәбеҙ. Фәнзилә кеүек оҫталар барҙа тиҙҙән зауыҡ менән тегелгән күлдәк, еләндәрҙә лә, сәхнәлә генә түгел, ә көндәлек тормошта ла осратырға насип булыр әле, тип уйлайым.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## "Тормош - тотош хаос"

Күҙ алдына килтерегеҙ: барыһында ла һәм бөтөн нәмәлә етешһеҙлек эҙләп, тирә-яҡта барыһы ла алдайҙар, урлайҙар тип әрләшеп, эшһеҙҙәрҙе һүгеп, күп ашаусыларҙы, аҡсаһын елгә осороусыларҙы күрә алмай, берәүҙәрҙең ыуылдырыҡты ҡалаҡлап ашауына, икенселәрҙең борсаҡ бешереүенә зарланып, күпме энергия яндырабыҙ, әрәм итәбеҙ. Тормошто даими тәнҡитләп, бәхетебеҙҙе кәметәбеҙ. Әлбиттә, Калькутталағы асығыусыларҙы миҫал итеп: "Тормош дөрөҫ ҡоролмаған", - тиергә һәм быны шәхси тормошобоҙ менән шөғөлләнмәү өсөн файҙаланырға мөмкин. Әммә үҙең шунда йәшәп, аслыҡ сигенә етеүселәргә ярҙам итһәң, хәл-торош аңлайышлыраҡ булыр. Донъяның икенсе сигендә булып, үҙең дә аңламаған хәл тураһында фекер йөрөтөп, бер ниндәй ҙә файҙа килтермәйһең. Әгәр уны үҙгәртергә йәки ошо йүнәлештә нимәлер эшләргә теләһәң - был икенсе мәсьәлә. Ләкин юҡҡа ғына үҙеңде яфалауҙан файҙа юҡ. Донъяның Тереза Әсәләре үҙҙәрен яфаламай, ә аныҡ ғәмәл ҡыла.

## "Донъяла былай ҙа барыһы ла яҡшы"

Икенсе вариант - донъяны нисек бар - шулай ҡабул итеү. Кемдер: "Ә донъяла барыһы ла яҡшы икәнен нисек раҫларһың?" - тиеүе мөмкин. Был ауыр түгел: Ай Ер тирәләй әйләнә, Ер Ҡояш тирәләй йөрөй, сәскәләр ата, ҡоштар һайрай, ғаиләләр ҡорола, һуңынан айырылыша, күршеләр бер-береһе менән талаша. Былар барыһы ла - йәшәйештең бөйөк схемаһы элементтары. Кешеләр ауырыуҙан йәки алдашыуҙан туҡтаһа, донъяла бөтөн нәмә яҡшы буласаҡ, тип раҫлау дөрөҫ булмаҫ, сөнки был Ҡояш дәүмәле менән риза булмау кеүек үк. Донъя нисек бар - шундай!

Бәғзеләр: "Бөтөн донъяла тыныслыҡ урынлашмай тороп, бәхетле була алмам", - тиер. Был яҡшы, әммә аҡыллы түгел. Тап бөгөн бәхетле булырға һәм әле йәшәгән урыныңда тыныслыҡ булдырыу өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләргә кәрәк. Донъяны нисек бар - шулай итеп ҡабул итергә мөмкин, шул уҡ ваҡытта уны камиллаштырыу өсөн үҙеңдең иңеңдә яуаплылыҡтың ниндәйҙер өлөшө ятыуын да онотorға ярамай.

## Проблемаларым булмаһа, бәхетле булыр инем!

Борсолорға үҙебеҙ сәбәп эҙләйбеҙ. Мәҫәлән, самолетта 12 сәғәт осорға кәрәк икән, ти. Лайнер саҡ күтәрелә, һеҙ ял итергә, бәлки, йоҡлап алырға хыялланаһығыҙ. Шул ваҡыт иғтибарығыҙҙы күршегеҙ йәлеп итә. Ул йыш танауын тарта. Һеҙ уның танау тартҡанын һанай башлайһығыҙ... Ошоға тиклем арттағы креслола бала ултырыуына ла иғтибар итмәгән булһағыҙ, ул уяныр, илай башлай. Һеҙҙең иғтибарығыҙ уға йүнәлә. Был тауыш эргәһендә күршегеҙҙең танау тартыуы онотола... Ҡапыл аэробус ныҡ итеп һелкенә һәм аҫҡа оса. Тирә-яғығыҙҙа ҡысҡырыш, илаш, башығыҙға ҡан бәрә, ҡотҡарыу жилетын алған арала Аллаһы Тәғәләгә алышбиреш тәҡдим итәһегеҙ: "Эй, Хоҙайым, самолетты ҡотҡар инде, башҡаса бер ваҡытта ла танау тартҡан кешеләргә зарланмам, бала илағанын кинәнеп тыңлармын!". Самолет ҡапыл өҫкә күтәрелә башлай. Экипаж командиры ғәфү үтенә һәм лайнерҙың һауа соҡорона эләгеүен аңлата. Бала илауҙан туҡтай, күршегеҙ тыныс ҡына йоҡлай. Һеҙ кроссворд сисергә ултырағыҙ... Һәм күршегеҙ хырлай башлай! "О юҡ! Әгәр ошо хырлау булмаһа, мин ысынлап бәхетле булыр инем!"

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**



### 25 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 02.10, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 01.15 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Серебряный бор". 17-я и 18-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Полицейский участок". "Белка в колесе", "С ног на голову". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия-17". "Явный мотив". Детективный сериал (16+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Классные мужики". Комедийный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Обыкновенное чудо". Сериал.**
**11.00 "Итоги недели".**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.00 "Учим башкирский язык".**
**17.15 "Провинция Аньхой" (12+).**
**17.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).**
**18.20 Хоккей. КХЛ. "Барыс" (Астана) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**21.00 "Бирешмә!" Сериал (12+).**
**22.00 "Спортбар".**
**23.15 "Автограф" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Мимино". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

### 26 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.05 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.05 "Модный приговор".
12.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 02.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Серебряный бор". 19-я и 20-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.10 "Шерлок Холмс: шесть Тэтчер". Детективный сериал (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Полицейский участок". "Угон", "Все тайное..." Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия-17". "Семейная сцена". Сериал (16+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Классные мужики". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Обыкновенное чудо". Сериал.**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму".**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Сәмәр".**
**17.00 "Дознание" (16+).**
**17.45 "Уфа-Швейцария" (6+)**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Автограф" (12+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Моя Республика. Итоги-2017"**
**21.00 "Бирешмә!" Сериал (12+).**
**23.00 "Башкорт йыры-2017" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Убежать, догнать, влюбиться". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

### 27 ДЕКАБРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.05 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.05 "Модный приговор".
12.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 02.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+)
21.00 "Время".
21.30 "Серебряный бор". 21-я и 22-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.10 "Шерлок Холмс: Шерлок при смерти". Сериал (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Полицейский участок". "Кулон". "День рождения Полины". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия-17". "Случай на пробежке". Сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Классные мужики". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Обыкновенное чудо". Сериал (6+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.00 "Ледяная земля" (12+).**
**17.50 Хоккей. КХЛ. "Авангард" (Омская область) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**20.30 "Моя Республика. Итоги-2017" (12+).**
**21.00 "Бирешмә!" Сериал (12+).**
**22.00 "Вечерний телецентр".**
**23.00 "Бала-сага" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Человек с Бульвара Капуцинов". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

### 28 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.05, 04.05 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.05 "Модный приговор".
12.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 02.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Серебряный бор". 23-я и 24-я, заключительная, серии (12+).
23.35 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.10 "Шерлок Холмс: последнее дело". Сериал (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Полицейский участок". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия-17". "Вирус". Сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Классные мужики". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Железнодорожный романс". Сериал (6+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Бай" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Одуванчик" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.00 "Ледяная земля" (12+).**
**17.45 "Современник" (12+).**
**18.00 "Автограф" (6+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Башкорттар" (6+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Моя Республика. Итоги-2017" (12+).**
**21.00 "Бирешмә!" Сериал (12+).**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Формула любви". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

### 29 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.15, 05.25 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 04.20 "Модный приговор".
12.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.55 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Сегодня вечером" (16+).
23.30 "Голос". Новый сезон. Финал
01.35 "Вечерний Ургант" (16+).
02.30 "Шерлок Холмс: пусто катафалк". Сериал (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Любовь на миллион". 8 серий. Мелодраматический сериал (12+).
18.40 "Андрей Малахов. Прямой эфир". Специальный выпуск (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Юморина" (12+).
23.30 "Сказки Рублевского леса". Мелодрама (12+).
01.25 "В ожидании любви". Худ. фильм (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Железнодорожный романс". Сериал (12+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Н.Асанбаев. "Вишневая гора" (12+).**
**14.00 "Хазина о Хазине" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Бала-сага" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**16.00 "Гора новостей" (6+).**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**17.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.45 "Замандаш" (6+).**
**18.00 "Йома".**
**18.50 Хоккей. КХЛ. "Югра" (Ханты-Мансийск) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**22.00 "Бирешмә!" Сериал (12+).**
**23.00 "Байык-2017" (12+).**
**24.00 "Дедушка в подарок". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз).**
**02.00 Н.Карпенко-Карий. "Бесталанная" (12+).**

### 30 ДЕКАБРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Все сбудется!" Худ. фильм (12+).
08.00 "Кубанские казаки". Худ. фильм.
10.00 Новости.
10.15, 20.00 "Голос". "На самой высокой ноте" (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.25, 04.00 "Золушка". Цветная версия. Сказка.
14.00 "Новогодний "Ералаш".
14.30 "Все сбудется!" (12+).
16.00 "Аффтар жжот под Новый год" (16+).
8.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.25 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым".
21.00 "Время".
21.20 "Голос". Финал (12+).
23.25 "Прожекторперисхилтон" (16+).
24.00 "Форсаж-7". Боевик (16+).
02.40 "Один прекрасный день". Худ. фильм.

### РОССИЯ 1

04.50 "Кто-то теряет, кто-то находит". Худ. фильм (12+).
08.10 "Золотая невеста". Худ. фильм (12+).
10.00 "Сто к одному".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" (16+).
14.05 "Девчата". Худ. фильм.
16.00 "Операция "Ы" и другие приключения Шурика". Комедия
18.00 "Привет, Андрей!" Ток-шоу. Знаменитые гости вместе с ведущим Андреем Малаховым (12+).
20.00 "Вести".
21.00 "Перекресток". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.50 "Все будет хорошо". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Фиксики".**
**09.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**10.00 "Это мы!" (6+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15, 19.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**11.45 "Тәмле" (12+).**
**12.00 "Сладкая сказка". Худ. фильм.**
**13.00 "Учу башкирский язык" (6+).**
**13.45 "Орнамент".**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 Республиканская новогодняя елка (12+).**
**17.30 "Алтын арба" (12+).**
**19.30 "Первая Республика" (12+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Моя Республика. Итоги-2017"**
**21.00 "Бирешмә!" Сериал (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**22.30, 02.15 "Итоги года" (на башк. яз.).**
**23.30 "Күңелем моңдары" (12+).**
**24.00 "Покровские ворота". Худ. фильм (6+).**

### 31 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Новогодний Ералаш".
06.45 "Карнавальная ночь-2, или 50 лет спустя". Худ. фильм (12+).
10.10 "Ирония судьбы. Продолжение"
12.30 "Главный новогодний концерт".
13.40, 15.10 "Служебный роман". 2 серии. Лирическая комедия.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.50 "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". Комедия (6+).
18.25 "Лучше всех!" Новогодний выпуск.
21.15 "Иван Васильевич меняет профессию". Комедия (6+).
23.00, 24.00 Новогодняя ночь на Первом (16+).
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В.Путина.

### РОССИЯ 1

04.20 "Новогодние сваты".
06.25 "Девчата". Худ. фильм.
08.25 "Лучшие песни". Праздничный концерт.
10.25 "Операция "Ы" и другие приключения Шурика". Худ. фильм (6+).
12.20 "Короли смеха". Юмористическая программа (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Джентльмены удачи". Худ. фильм (6+).
16.10 "Ирония судьбы, или С легким паром!" Лирическая комедия.
20.00 "Бриллиантовая рука". Комедия.
21.55 "Новогодний парад звезд". Развлекательное шоу.
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.ВюПутина.
24.00 Голубой огонек-2018.

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Секретная миссия Санты".**
**09.30 "Орнамент".**
**09.45 "Йома".**
**10.15 "Алтын тирмә".**
**11.00 Новогодний звон "Сулпылар".**
**12.30 "Тел асҡысы". Новогодняя сказка.**
**13.00 "Тәмле". Гости программы - режиссер Айрат Абушахманов и актриса Ильгиза Гильманова.**
**13.30 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Рәхмәт". Худ. фильм (12+).**
**17.45 "Весело живем" (12+).**
**18.30 "3D-шоу".**
**20.30 "Итоги года".**
**21.30 "Голубой огонек на БСТ" (6+).**
**23.50 Новогоднее поздравление Главы Республики Башкортостан Р.З.Хамитова.**
**23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В.Путина.**
**00.05 "Башҡорт йыры-2017". Гала-концерт (12+).**

---

Республика халыҡ ижады үҙәге коллективы Өфөнөң Совет районы хакимиәтенең мәҙәниәт һәм йәштәр сәйәсәте бүлеге етәксеһе Сөмбөл Тәҡсил ҡыҙы Ғәниеваның, һөйөклө әсәһе вафат булып ҡалыу сәбәпле, ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# АҠЪЮЛАЙ ЮБИЛЯРҘАРЫ




Фирүзә ИШБИРҘИНА төҙөнө.

**45-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Ҡунафин. Кинйәбаева. Арба. Репринт. Гөлфиә. Хәбилова. Жюри. Ғарипова. Нафиҡова. Манапова. Сәйәсәт. Венера. Карл. Раҡаева. Әзмәүер. Нур. Танк. Әпкәләй. Һөйөндөков. Батыршин. Илдә. Әлбә. Лиана. Нәфис. Лава. Елкән. Рита. Ишбулатов. Архыз. Алла.

**Вертикаль буйынса:** Ағас. Мөхәмәтшина. Йөкләм. Дан. Инә. Әләйһә. Әйле. Карри. Арай. Өмәсе. Луидор. Ҡыйғыр. Көн. Өшәмә. Науруз. Нәжип. Арарат. Вәзир. Аҡса. Хина. Булат. Аша. Артист. Ваза. Айыт. Ҡатын. Лаҡан. Квартал. Етегән. Уилки. Ағала. Анар. Нужа.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**26 декабрь** театр бәләкәй дуҫтарын Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу менән бергә Яңы йыл тамашаһында ҡатнашырға саҡыра. Тамаша **"Айыу бабай" (С. Әлибай)** тип аталған спектакль ҡарау менән тамамланасаҡ. Сара башҡорт телендә барасаҡ. Башлана 16.00 0+

**Кем алыҡ?**

"Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры нисә йәшлек юбилейын билдәләне?" - тигән һорауға дөрөҫ яуап биреүсегә 2 кешелек билет бүләк итәсәкбеҙ. Йәгеҙ, кем алыҡ? **Тел.: 252-39-99**

**"История одной снежинки"** (В. Аношкин), Яңы йыл спектакле

**23, 24, 30 декабрь** - 11.00, 14.00, 17.00; **31 декабрь** - 11.00; **2 - 8 ғинуар** - 11.00, 14.00, 17.00 0+

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23 декабрь "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. Башлана 11.00, 13.00 0+

**23 декабрь "Кил әле, кил әле, сәмле ярыш күр әле!"** ҙур концерт

**24 декабрь "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. Башлана 11.00. 13.00 - Шыршы байрамы һәм әкиәт башҡорт телендә 0+

**24 декабрь "Эҙләнем, бәғерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама 12+

**"Mouse story" (Д. Урбан),** әкиәт

**25, 26, 28, 29 декабрь** - 10.30, 13.00; **27 декабрь** - 10.00, 12.00; **30 декабрь, 3 ғинуар** - 11.00, 13.00; **2 ғинуар** - 12.00 0+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23-25 декабрь, 2-4 ғинуар "Щелкунчик"** (Н. Соболева), Яңы йыл әкиәте. Башлана 10.30, 13.00 0+

**23-30 декабрь "Пес Барбос и новогодний кросс"** (И. Казакова), бәләкәстәр өсөн Яңы йыл әкиәте. Башлана 10.00, 12.00 0+ **2-4 ғинуар** - 12.00, 14.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**"Өфөнөң төп Яңы йыл тамашаһы"**

**23, 24 декабрь** - 11.00, 13.00, 15.00; **25-29 декабрь** - 11.00, 13.00; **2 ғинуар** - 14.00, 16.00; **3, 4 ғинуар** - 12.00, 14.00, 16.00; **5 ғинуар** - 12.00, 14.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**23-30 декабрь, 2-5 ғинуар "Три богатыря и "Соловей разбойник"** (А. Зарипов), әкиәт 0+

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Декабрь (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (7) дүшәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:20 | 16:50 | 18:20 |
| 26 (8) шишәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:21 | 16:51 | 18:21 |
| 27 (9) шаршамбы | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:22 | 16:52 | 18:22 |
| 28 (10) кесе йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:23 | 16:53 | 18:23 |
| 29 (11) йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:24 | 16:54 | 18:24 |
| 30 (12) шәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:25 | 16:55 | 18:25 |
| 31 (13) йәкшәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:26 | 16:56 | 18:26 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

АЛДАЙҘАР!

# "КҮҘ ТЕЙГӘН, СИХЫРЛАҒАНДАР..."



**Өфө полицияһына мутлашыусылар тоҙағына эләккән ҡатындан хәбәр килде. Енәйәтселәр күҙ тейеүҙе дауалау ниәте менән унының миллион һумдан ашыу аҡсаһын урлаған.**

Зыян күреүсе һүҙҙәренсә, урамда таныш булмаған ҡатын уға күҙ тейгәнлеге һәм уны тиҙ арала бөтөрөү кәрәклеге хаҡында әйтә. Ошо мәлдә унының эргәһенә тағы бер ҡатын килеп, үҙенең "таҙарыныуы" тураһында һөйләй һәм ялған дауалаусыға рәхмәт белдерә. "Йоланы" башҡарыу өсөн мутлашыусы икенсе көнгә осрашыу билдәләй һәм тауыҡ йомортҡаһы килтерергә ҡуша. Тылсымлы эш барышында ул йомортҡаны ҡулъяулыҡҡа төрә, уны асҡас, пенсионер ҡатынға йомортҡалағы ҡыҙыл тапты күрһәтә. Был, йәнәһе лә, бик ныҡ күҙ тейгән, тигәнде аңлата. Шунан һуң мутлашыусы ритуалды тамамлау өсөн аҡса йыйып, төнгө сәғәт 12-гә зыяратҡа алып барырға кәрәк, тип хәбәр һала. Ялған клиент аҡсаны аферисткаға тапшырырға тәҡдим итә. Ҡатын, мутлашыусыларға ышанып, миллион һумдан ашыу аҡсаһын йоланы башҡарған "дауалаусыға" бирә. Икенсе көндө билдәләнгән ваҡытҡа осрашыуға бер кем дә килмәй. Шунда ғына пенсионер ҡатын үҙенең алданыуын аңлай. "Мутлыҡ" статьяһы буйынса енәйәт эше ҡуҙғатылған. Полиция ике ҡатынды эҙләй. Беренсеһе 55 йәштәрҙә, буйы 160 сантиметр, ҡара сәсле, ҡара күҙле. Енәйәт ҡылған мәлдә ҡара пальто, бәйләнгән башлыҡ һәм итек кейгән булған. Икенсеһе лә 55 йәштәрҙә, буйы 155 сантиметр самаһы, күҙҙәре йәшел (зәңгәр) төҫтә. Ҡара дубленка, бәйләнгән башлыҡ һәм ҡара итек кейгән. "Әгәр ҙә һеҙ уларға оҡшаған кешеләрҙе күрһәгеҙ йәки уларҙың ҡайҙалығын белһәгеҙ, 02, 279-39-02, 237-19-60, (347) 237-63-04, 279-53-42 телефондары буйынса шылтыратыуығыҙҙы һорайбыҙ. Полиция граждандарҙы таныш булмаған кешеләргә ышанмаҫҡа саҡыра. Туғандарығыҙҙы хәүеф янау ихтималлығы тураһында иҫкәртергә онотмағыҙ", - тип мөрәжәғәт иттеләр халыҡҡа ведомствола.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ТАҒЫ ФИЛЬМ ТӨШӨРӨЛӘ



**Булат Йосоповтың "Беренсе Республика" исемле яңы тулы метражлы нәфис фильмында тарихи персонаждарҙы уйнаясаҡ актерҙар билдәле булды.**

Алдан уҙғарылған кастинг буйынса, яҙыусылар Һәҙиә Дәүләтшинаны - Лилиә Исҡужина, Дауыт Юлтыйҙы - Рафиҡ Хәсәнов, композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтовты - Артур Ишмөхәмәтов, башҡорт милли театрына нигеҙ һалған Вәлиулла Мортазин-Иманскийҙы - Руслан Хайсаров, актриса Зәйтүнә Бикбулатованы - Рушанна Бабич, милли театр реформаторы Мәкәрим Мәһәҙиевты Артур Ҡунаҡбаев уйнай. Режиссер Булат Йосопов хәбәр итеүенсә, тарих төп герой - "Башҡортостан" гәзитенең тәүге баш мөхәррирҙәренең береһе булған, һуңынан репрессияланған Ҡасим Аҙнабаев аша сағылдырыла. Ролде әле Мәскәүҙә йәшәгән актер һәм каскадер Роберт Йылҡыбаев башҡара. "Беренсе Республика" - "Йәнле таçма" кинокомпанияһы һәм "Башҡортостан" киностудияһының берлектәге проекты. Конкурс комиссияһы ҡарары буйынса фильм 2018 йылға производство планына индерелгән. Бөгөнгә фильмдың сценарийы әҙер, тип белдерҙе режиссер. Сценарий авторҙары - Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Таңсулпан Бабичева һәм Гөлсәсәк Саламатова. Фильмды Өфөлә һәм Стәрлетамаҡта, шулай уҡ ҡайһы бер күренештәрҙе ауылдарҙа төшөрөү күҙаллана. "Яңы проектҡа ярҙам итеү өсөн түләүле онлайн-кинотеатр астыҡ. Ул ошо проектҡа аҡса йәлеп итергә мөмкинлек бирә. Хәҙер теләгән һәр кем "Бабич" фильмын өс вариантта: рус, инглиз һәм төрөк субтитрҙары менән ҡарай ала. Фильмды рус телендә лә сығарыу ҡаралған", - тине Булат Йосопов.

# ЯҢЫ ИСЕМДӘР

**Өфөлә "Ural-Batyr" Республика башҡорт рок фестивале үтте. Башҡортостан мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, министр урынбаçары Рәнис Алтынбаев фестивалдең ҡунаҡтары булды. Республика халыҡ ижады үҙәгенең генераль директоры Артур Әлибәков ҡатнашыусыларҙы сәләмләне.**

Быйыл фестивалдә 8 рок төркөмө ҡатнашты. "ДАН" рок төркөмө, "Nectoria" төркөмө, "Малай-шалай" панк-рок төркөмө, "ХамZа" этно-рок төркөмө, "Шором-Бором" рок бандаһы, Салауат районының "Юлдаш" вокал-инструменталь ансамбле, Белорет районының "Елмәрҙәк" рок төркөмө, MANA*VARA ("EuroАзия") төркөмөнөң һәр сығышы яҡшы ҡабул ителде. Музыканттар популяр башҡорт йырҙарын да йырланы.

Сара йәш талантлы музыканттарҙы асыҡлау һәм уларҙың ижади мөмкинлектәрен тормошҡа ашырырға булышлыҡ итеү, йәштәрҙә музыкаль ижадҡа ҡыҙыҡһыныу уятыу маҡсатынан уҙғарыла. Ойоштороусылары - БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге.

# КИНО ҠАРАЙБЫҘ!



**Башҡортостанда алты муниципалитеттағы 11 кинозал цифрлы ҡорамал һатып алыу һәм ҡуйыу өсөн федераль бюджеттан дөйөм суммаһы 54 миллион һумлыҡ субсидия аласаҡ. Ә 2015 һәм 2016 йылдарҙа Башҡортостанда 14 кинозал дәүләт ярҙамы алғайны.**

Улар - Ишембайҙағы алты кинозал: "Вита" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең - өс, "Урал" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең - ике, Ҡала мәҙәниәт һарайының бер кинозалы; Салауатта "Агиҙел" мәҙәни-ял үҙәге; Янаул районының Йәштәр һарайы; Үргә Йәркәй ауылының мәҙәниәт бүлеге; Ҡариҙел ауылының мәҙәниәт йорто; Ҡырмыҫҡалы үҙәкләштерелгән клуб системаһы. Бер кинозалға уртаса 4,9 миллион һум тура килә. Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, был - бәләкәй ҡалаларҙа (500 меңгә тиклем халыҡ йәшәгән) кинотеатрҙарға булышлыҡ итеү буйынса кино фонды конкурсы һөҙөмтәләре. Программаның төп бурысы - кинотеатрҙар булмаған тораҡ пункттарҙа кинозалдар асыу. Илебеҙҙә төшөрөлгән фильмдарҙы күрһәтеү ҡайтанан йыһазландырылған кинозал өсөн төп шарт булып тора. Уларҙың кинопрокатта күләме 50 проценттан ашыу тәшкил итергә тейеш.

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әçәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туктамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

***83. Хәсән Назар "Шоңҡар сөйәм" китабы.*** Был китапта Хәсән Назарҙың шиғырҙары, тәржемәләре, пародиялары тупланған. Шағирҙың тәрән фекерле, уҡыусыны уйландырған шиғри юлдарын киләсәк быуындар уҡырға, заман зағын ишетергә тейеш. Авторҙың "Һинә өндәшәм" тигән шиғырының һуңғы юлдарында уның рухи донъяһы, тойғолары, уй-фекере ярылып ята:

*Боларышлы йылдар, болғанышлы...*
*Халҡым уйлап, йәнем ҡыйыла.*
*Ошо саҡта ишетелһә һүҙем,*
*Мин дә шағир, тимәк, донъяла".*

***84. Диҡҡәт Бураҡаевтың "Мөғжизәләр донъяһына сәйәхәт" китабы.*** Хәҙер балалар өсөн баçылған төрлө тематик энциклопедиялар, һүрәтле китаптар бик популяр. Баланың үҙен уратып алған әйберҙәр, күренештәр тураһында, йәнһүрәттәрҙә ҡараған күренештәргә ҡағылышлы мең дә бер һорауына яуаптарҙы ата-әсәләр йыйнаҡ ҡына, сағыу китаптарҙа эҙләй. Йәки электрон "ярҙамсыларға" мөрәжәғәт итә. Ә мин башҡорт балаларына башҡорт халыҡ әкиәттәрендә, легендаларында, риүәйәттәрендә бәйән ителгән ғәжәйеп йән эйәләре, борон ер йөҙө ниндәй булған, унда кемдәр йәшәгән һәм башҡа ҡыҙыҡлы һорауҙарға яуапты Диҡҡәт Бураҡаевтың ошо китабында эҙләргә тәҡдим итәм. Әлбиттә, был китап 1983 йылда баçылып сыҡҡан һәм сағыу һүрәттәре юҡ. Әммә балалар аңларлыҡ бик ябай, ҡыҙыҡлы тел менән башҡортса фәнни-популяр очерктар бирелә. Батырҙар, аждаһалар, гигант филдәр, ҙур ҡоштар, серле ер ҡатламдары һәм башҡалар тураһында мауыҡтырғыс ҡыҫҡа ғына мәҡәләләр баланы нимә менән мауыҡтырырға белмәй аҙапланған ата-әсәгә лә, олатай-өләсәйҙәргә лә бик уңайлы сығанаҡ булыр.

**"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әçәрҙәре араһынан иң-иңдәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған **"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы"** тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

**Рубриканы Сәриә ҒАРИПОВА алып бара.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЛДАН ҺӨЙЛӘҺӘҢ...

## артынан көйөнөрһөң

Яҡшы түрә әҙәмгә юл асыр, яман түрә әҙәмдең юлын быуыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Мәктәптәрҙә һәм университеттарҙа уҡығандарыбыҙ - ул белем түгел әле, ә белем алыу ысулына өйрәнеү генә.

**(Ралф Эмерсон).**

Бер быуат йәшәйһең икән - бер быуат уҡы! Ул саҡта һинең, исмаһам, бер нимә лә белмәүең тураһында әйтергә хоҡуғың буласаҡ.

**(Козьма Прутков).**

Бөгөн ниндәй генә ишек яныңа килмә, ул автоматик рәүештә асыла; ниндәй генә кешегә яҡын килмә, ул автоматик рәүештә ябыла.

**(Пер Халверсен).**

Йәмғәтселек фекере иçке замоктағы өрәк шикелле: уны берәү ҙә күрмәгән, әммә уның менән һәр кемде ҡурҡыталар.

**(Зигмунд Графф).**

Йәмғәтселек фекере - үҙ фекере булмаған сәйәсмәндәрҙең һуңғы йәшереңеү урыны.

**(Морис Картер).**

Эштәрең ни тиклем насар барған һайын, шул тиклем яҡшыраҡ кейенергә тейешһең.

**(Инглиз мәҡәле).**

Ир-егеттәр ниндәйҙер хәл иткес ҡарарға килер алдынан: "Ни әйтермен?" - тип, ә ҡыҙ-ҡатындар: "Ни кейермен?" - тип борсола, ти.

**(Мадлен де Пюизье).**

Бәхәс формулаһы шулай: "Һарыҡ дөйөм аңлашылмаусылыҡ тураһында һөйләй. Ҡуян дөйөм икеләнеүҙе еткерә. Һунынан арыслан аяғүрә баçа һәм дөйөм фекерҙе белдерә.

**(Феликс Кривин).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ҡарт үҙенең ейәненә бер донъя серен аса:**

**- Һәр кешелә ике бүре араһындағы көрәк алыш бара. Бер бүре насарлыҡ яҡлы, ул көнләшеү, эгоизм, алдау көрәк нәмәләр өсөн алыша. Икенсе бүре яҡшылыҡ яҡлы, ул мөхәббәт, өмөт, дөрөçлөк, изгелеккә өндәй.**

**Малай олатаһының һүҙҙәрен йөрәгенә бик яҡын ала һәм шулай тип һорай һала:**

**- Ә бүреләрҙең ҡайһыһы еңә һуң, олатай?**

**Ҡарт йылмайып яуап бирә:**

**- Ҡайһыһын ашатаһың, шуныһы еңә инде, улым..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баçылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаçары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 22 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 2601/12